ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27-2 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай)

2018

№4 (786)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Ил башлығы ыңғай баһаланы



4

Сабата шәп атлатамы?..



6

Уңышлы сәйәхәт нигеҙе...

юлдаштарҙың ышаныслы булыуында



8

Теләк һәм елкә кәрәк...



9

ТВ-программа 14


***Михнәт үә фетнәгә, донъяның ҡайғыларына дусар булған кешеләр өсөн берҙән-бер йыуаныс - китап уҡыу, ҡәләм тотоу үә ҡул эштәре менән шөғөлләнеүҙер.***

***Ризаитдин ФӘХРЕТДИН.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостандың ҡунаҡтарҙы, туристарҙы йәлеп итер популяр брендтары нимә?



***Азат ХӘЙБУЛЛИН, эшҡыуар, Өфө ҡалаһы:*** Яҡтыгүл, Янғантау, Асы шифаханалары, Ирәмәл тауы, Асылыкүл Башҡортостандан ситтә йәшәүселәргә яҡшы таныш. Төбәктең уникаль тәбиғәте үҙе үк бренд, минеңсә. Шулай уҡ республикала йәшәгән милләттәр төрлөлөгөн дә бренд итеп ҡарау яҙыҡ булмаç. Республикаға килгән турист бер урында әллә күпме халыҡтың бөгөнгөһө менән генә түгел, ә тарихы менән дә таныша ала, сөнки төбәктә йәшәүсе төрлө милләт вәкилдәренә иғтибар беҙҙә бер үк юғары кимәлдә.

Башҡортостандағы һәр райондың үҙенә генә хас бренды бар. Мәçәлән, Әбйәлил күлдәре менән дан тота, Белорет районы тауҙары менән билдәле. Бөрйәндең Шүлгәнташы бар. Краснокама районындағы тарихи-архитектура комплексы үҙе ни тора. Благовещен ҡалаһында урынлашҡан, 1756 йылда нигеҙ һалынған баҡыр иретеү заводы Рәсәйҙә бөгөнгө көндә эшләүсе иң боронғо заводтарҙың береһе (хәҙер "Благовещен арматура заводы") - шулай уҡ тарихи объект, тимәк, бренд. Республикала туристарҙы йәлеп итеүсе брендтар аҙым һайын. Беҙ уларға өйрәнгәнбеҙ һәм күренекле итеп күрмәйбеҙ, ә ситтән килеүсегә улар ҡыҙыҡлы. Тик матур итеп күрһәтә белергә кәрәк. Бүләкте матур төргәккә урап биргән кеүек, үҙебеҙҙәге бренд әйберҙәрҙе, урындарҙы, күренештәрҙе күркәм итеп ҡунаҡтарға танытыу мөһим.

Милли батырыбыҙ Салауат Юлаев, бәхәсһеҙ, шулай уҡ бренд. Тик ул һәйкәлгә, хоккей командаһына ғына ҡайтып ҡалмаçҡа тейеш, ә киң форматта булырға тейеш. Бының өсөн уның тыуған ауылын тергеҙеү, унда тәбиғи музей эшләү мөмкинлеге табылһа, республикаға килгән туристар өсөн тағы ла бер ҡыҙыҡлы маршрут барлыҡҡа килер ине.

Ишетеүемсә, былтыр октябрь аҙағында БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты республиканың туристик бренды концепцияһын эшләү буйынса иғлан ителгән тендерҙың еңеүсеһен билдәләне. "Парадокс" ЯСЙ реклама студияһы төрлө тикшереүҙәр, һорау алыуҙар ярҙамында Башҡортостанда нимә бренд була ала икәнен асыҡлап, быйыл 30 мартҡа тиклем комитетҡа Башҡортостандың туристик логотибын эшләп бирергә тейеш. Улар шулай уҡ төбәктәге туризмдың төп йүнәлештәрен билдәләйәсәк, республиканы башҡа төбәктәрҙә киң танытасаҡ ҡеүәтле берҙәм образын булдырыу өçтөндә лә эшләйәсәк. Уларҙың һығымталары нигеҙендә Башҡортостанда туристарҙы йәлеп итерлек брендтарҙың исемлеген тағы ла тулыландырып буласаҡ, тип уйлайым. Бик кәрәкле һәм мөһим эш башлағандар.

***Гүзәл ХӘМИТОВА, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының баш мөхәррире:*** Күптән түгел Иранда булып ҡайттым. Урындағы халыҡ үҙенең тарихына, электән килгән шөғөлөнә, милли аш-һыуына, музыкаль инструменттарына, тәбиғәтенә, ғөмүмән, илдең бөтә өлкәһенә лә ҙур иғтибар бүлә. Туристар өсөн дә ҡыҙыҡлы экскурсиялар ойошторалар. Башҡортостанға туристарҙы күпләп йәлеп итеү, үҙебеҙҙә булған брендтарҙы күрһәтеү һәм ҡунаҡтарға ҡыҙыҡлы итеүҙә Иран халҡынан үрнәк алырға кәрәк. Ә бренд булырлыҡ әйберҙәр күп республикала. Мәçәлән, кейеҙ. Был материалдың тәбиғи йөндән эшләнеүе, уның файҙалы үҙенсәлектәре, баçыу процесы, төрлө һүрәттәр менән биҙәү ысулы - быларҙың барыһын да туристар өсөн ҡыҙыҡлы булырлыҡ брендҡа әйләндерергә мөмкин. Артабан ҡымыҙ. Ҡымыҙ менән дауалау системаһын бөтә Башҡортостан буйлап киң йәйелдереү сит тарафтарҙан кешене күпләп йәлеп итер ине. Беҙҙә һауыҡтырыу туризмы бар, шифаханаларҙың күп өлөшө сит төбәктәрҙән килеүселәр менән тулылана, ләкин был һанды тағы ла күбәйтергә мөмкин. Шулай уҡ милли аш-һыуыбыҙ ҙа туристар өсөн үҙенсәлекле. Ниндәйҙер төбәккә ял итергә барыусы мотлаҡ рәүештә урындағы милли аш-һыуҙы тәмләп ҡарарға тырыша. Шуға күрә, беҙгә килгән ҡунаҡтарға ла башҡорт милли аш-һыуын, бигерәк тә бишбармаҡты, күп урында тәҡдим итергә кәрәк. Бишбармаҡ - башҡорттоң ғына түгел, ә тотош республика бренды икәнен туристарға күрһәтеү мотлаҡ. Ҡурайыбыҙ тураһында онотмайыҡ. Пластмасса, тимерҙән эшләнгән ҡурайҙы түгел, ә урманда үçкән, тәбиғи шарттарҙа формалашҡан үлән ҡурайҙы бренд булараҡ күрһәтеү урынлылыр, тип уйлайым. Ғөмүмән, Башҡортостандың бренды ерле халыҡтың көнкүрешенә, шөғөлөнә, эшмәкәрлегенә, аш-һыуына бәйле булырға тейеш. Мәçәлән, йыл һайын гөрләп уҙған һабантуйҙар ҙа беҙҙең бренд була алырлыҡ. Унда беҙҙең йыр-бейеүебеҙ ҙә урын ала, республикала йәшәүсе барлыҡ милләттәрҙең аш-һыуы һәм шөғөлө менән танышырға була. Шулай уҡ ат сабышы, тирмәләр конкурсы, көрәш, бағанаға менеү һәм башҡа милли уйындар беҙгә ғәҙәти булһа ла, ситтән килгән кеше өсөн ҡыҙыҡлы. Бренд, тимәк, сифатлы тигән һүҙ. Үрҙә әйтелгәндәрҙең барыһын да юғары кимәлдә һәм сифатлы итеп күрһәтә белһәк, былай ҙа әҙ булмаған туристарҙың һаны тағы ла артасаҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Башҡортостан да Көньяҡ Уралға инә икәнлеген күрһәтер өсөн, үҙ эсенә 11 тауҙы алған 130 саҡрымлыҡ маршрут булдырылды. Ул Белорет ҡалаһынан башланып, Төлөк ҡасабаһында тамамланасаҡ.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҺҮҘҘӘРЕБЕҘҘЕ...

## яҡшылар хуплаһын

***Нурия ҠУНЫСБАЕВА, Ейәнсура районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Милләттәштәремә әйтер һүҙем шул: кемдәндер көтмәйек, һәр кем ҡулыбыҙҙан килгәнде эшләйек. Ғаилә ҡиммәттәрен һаҡлайыҡ - ул ҡулыбыҙҙан килерҙәй эш. Ғаиләлә мөхәббәт, тоғролоҡ, бер-беребеҙгә ихтирамлы мөнәсәбәт, татыулыҡ йәшәһен. Ғаилә ҡиммәттәре тураһында һөйләгәндә, тәү сиратта, туған телебеҙгә ҙур иғтибар бүлеүҙе күҙ уңында тоторға кәрәк. Атай-әсәй, ғәҙәттә, балаларына туған телен өйрәтмәүен, мәктәптә туған телде уҡытмау яғында булыуын Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырғанда еңел булһын һәм шуға оҡшаш тағы әллә күпме сәбәптәргә япһара, үҙен аҡларға тырыша. Ләкин Аллаһы Тәғәлә һәр кешене бер милләттең вәкиле итеп яратҡан, баҡыйлыҡҡа күскәндә кеше үҙенең милләте менән саҡырылыр, ти. Унда барып яуап тотҡанда: "Мин ваҡытлыса ғына урыҫ булып торҙом", - тип әйтә алмаҫбыҙ бит. Был донъяла ҡылған ҡылыҡтарыбыҙҙың береһе лә ваҡытлыса ғына, эҙһеҙ үтеп китмәй. Кешенең һәр эше, һәр һайлауы, һәр ҡарары уның үҙенең һәм балаларының тормошона туранан-тура йоғонто яһай. Шуны иҫтә тотоп, милләттәштәр үҙ асылын һаҡлауҙы төп бурысы итеп белһен, балалар күңеленә лә һеңдереп үҫтерһен ине. Үҙем мәктәптә эшләгәс, беләм: балаға ун йәшкә тиклем рух, илһөйәрлек, әҙәп-әхлаҡ нормаларын өйрәтеп ҡалырға кәрәк, улар уға еңелерәк бирелә. Башҡорт бер ваҡытта ла үҙен бахыр итеп тоймаһын, меҫкенләнмәйек, ир-аттарға зарланмайыҡ. Һәр халыҡтың һарҡындыһы бар, халыҡ исеменән һөйләмәйек. Сөнки ни тиклем зарланһаҡ та, ил таянырлыҡ ирҙәребеҙ бар, шөкөр итерлек йәштәребеҙ күп. "Ейән-ейәнсәрҙәр үҫтерер йәшкә килеп еттек, шөкөр, ейәнемә ат туғарып-егеп өйрәтә беләм, һунарға йөрөү серҙәрен дә өйрәтәм, уҡ-һаҙаҡ эшен дә беләм. Бер нәмә генә борсой - "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын ғына яттан һөйләй белмәйем, шуны белһәм, бынамын тигән ҡартатай булыр инем", - тигәйне ғаиләбеҙҙең яҡын дуҫы. Бына шундай олатай-өләсәйҙәр булғанда, уларҙың һүҙен улдары, ейәндәре тотҡанда, халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булырына шигем юҡ. Яҡшыларға хуп булырҙай, ямандарға ут булырҙай һүҙҙәребеҙҙе әйтә йөрөйөк, ғаиләлә лә шул аманатҡа тоғро булайыҡ!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# КҮҢЕЛ ТОРОШОН ДА ҮЛСӘЙЕМ...

**Йома көндө гәзит һатып алырға сығам. Ике квартал киоскыға, унан ике квартал өйөмә табан атлайым. Алыҫ түгел. Йәйәү йөрөү файҙалы, тип, рәхәтләнеп йөрөйөм. Юлымда һәр саҡ буклеттар таратып йөрөгән ҡыҙыҡай осрай, ул мине хәҙер таный ҙа инде, баш ҡағып иҫәнләшәбеҙ.**

Бер көндө ҡайтып барышлай уға: "Һеҙ көләмәстәр яратаһығыҙмы?" - тип өндәштем. Ҡыҙ: "Яратам" тигәс, бер көләмәс һөйләп алдым. Тарих былай: бер йәш йәһүд егете революцонерҙарға, подпольщиктарға ҡушылырға теләгәс, уға һынау ҡуялар. Ҡулына листовкалар тотторалар ҙа таратырға ҡушалар. Листовкаларҙы алып киткән егет зым-зыя юҡ була, көтөп-көтөп, "Был жандармдар ҡулына эләккәндер, күрәһең", тип борсола башлайҙар. Бер аҙна тирәһенән был егет йылмайып килеп инә. "Ҡайҙа булдың улай оҙаҡ?" тип һорайҙар бынан. Егетебеҙ: "Был хәтлем ҡағыҙҙарҙы һатып бөтөүе еңел тип уйлайһығыҙмы әллә?" тип, һорауға һорау менән яуап бирә...

Ҡыҙыҡай рәхәтләнеп көлдө. Ә мин: "Бына һин был йылтыр ҡағыҙҙарҙы бушлай таратаһың, бәлки, һиңә лә уларҙы һатырға кәрәктер?" - тип шаяртып, һаубуллашып китеп барҙым.

Аҙаҡ ҡарайым, был йылтыр ҡағыҙҙар ортопедия магазинына реклама икән. Юл ыңғайы шул магазинды ла инеп ҡарап сығырға булдым. Урамда бик тайғаҡ, шул бәләнән берәй уңайлы ғына таяҡ һатып алайым, тип, ҡараһам да, хаҡтар "тешләшә" булып сыҡты. Һатыусыға рәхмәт әйттем дә: "Һеҙ йомаҡ сисергә яратаһығыҙмы?" - тип һораным. Ул: "Эйе, йомаҡтар, кроссвордтар сисергә яратам", - тигәс, йомаҡ ҡойҙом. Йомаҡ былай ине: кем иртә таңдан - дүрт аяҡлап, көндөҙөн - ике, ә кисен өс аяҡлап атлай? Боронғо грек мифынан алынған йомаҡты һатыусым сисә алманы. Мин яуабын әйттем: беҙ, кешеләр, тормош юлыбыҙҙы тәүҙә имгәкләп, йәшлек йылдарында - ике аяҡлап, ҡартайғас, таяҡҡа таянып үтәбеҙ бит...

Шулай бер көндө юлыма яҡшы ишектәр рекламалаусы егет осраны. Ул тотторған ҡағыҙҙарҙы алдым да: "Һеҙ урыҫ халҡының ишек тураһындағы әкиәтен beләһегеҙме?" - тип һораным. "Юҡ" яуабын ишеткәс, әкиәтте ҡыҫҡа ғына итеп һөйләп бирҙем. Тыңлағыҙ: бер ир бай ғаиләгә эшкә ялланған. Бер көндө хужалар ҡалаға баҙарға юлланған. Ялсыға төрлө өгөт-нәсихәт биргәндәр һәм "иң мөһиме, ишекте һаҡла" тигәндәр. Ялсы эштәрен бөткән, уға ҡайҙалыр барырға кәрәк булған һәм хужаларҙың "ишекте һаҡла" тигәнен иҫенә төшөрөп, ишекте һүтеп алып, арҡаһына аҫҡан да алып киткән. Хужалар ҡайтһа, өй ишегенең бөтөнләй юҡлығын күреп, шаҡ ҡатҡандар, ти. Кинәйәмде лә әйттем: бер ҡәҙерле нәмәне лә ишек артында һаҡлап булмай. Рекламасы егет рәхәтләнеп көлдө лә: "Беҙҙең ишектәрҙе улай ғына һүтеп алып булмай, улар металдан", - тине...

Әйткәндәй, ошолай аралашып, осрағандарға һүҙ ҡатып йөрөгәндә бер күңелһеҙ хәлгә лә тарыным мин. Магазинға ингәйнем, бер сибәр генә ҡатындың милләттәш икәнен аңғарып, аҙыраҡ ҡына туған телдә һөйләшке килеп, һаулыҡ һораштым. "Мин ҡарттарҙы яратмайым!"- тип сәпәне был. Шул ваҡыт сибәркәйҙең аҡыл ғынаһы һай икәнен аңлап, ғәфү үтенеп, шымдым. Ҡыҙыҡ, әлбиттә, ул үҙен ҡартаймай торған кеше, тип иҫәпләйҙерме... Ә былай, дөйөм алғанда, илебеҙ халҡының күңеле ҡатмаған ул. Шаяртыуҙы аңлайҙар, күптәре күтәреп ала, ихлас тыңлап, көлөп булһа ла китәләр. Шулай итеп, һауа торошон ғына түгел, кешеләрҙең күңел торошон да үлсәп йөрөйөм мин...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Башҡортостандың ҡунаҡтарҙы, туристарҙы йәлеп итер популяр брендтары нимә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәис ҒӘБИТОВ, "R&R" коммуникатив агентлыҡ етәксеһе, блогер:*** Миненсә, беҙҙең тауарҙарыбыҙҙы республиканың бренды итеп ҡарарға була. Юғарыға үрмәләргә яратыусы экстремалдар үҙебеҙҙә генә түгел, Рәсәй һәм сит ил буйлап бик күп. Яңыраҡ ҡына Рәсәй географик йәмғиәтенең Башҡортостандағы бүлексәһе тарафынан уҙғарылған "Урал ҡапланы" проектына йомғаҡ яһалды. Уның талаптарына ярашлы, проектта ҡатнашыусы төбәктәге бейеклеге 1000 метрҙан ашыу булған ете тау түбәһен - Ирәмәлде, Көмәрҙәкте, Ҡурташ-тауҙы, Мәсемде, Ҡушайҙы һәм Яланғасты - яуларға тейештәр ине. Беренсе этаптың шарттарын Рәсәйҙең 6 төбәгенән 115 кеше тулыһынса үтеп, икенсе этапҡа сыҡты. Күреүебеҙсә, тауҙар ғына ла йөҙәрләгән кешене үҙенә тарта, тимәк, улар - бренд. Шуға тейешле маршрут тәҡдим иткәндә, Башҡортостанға килеүселәр һаны тағы ла артасаҡ.



Әйткәндәй, Көньяҡ Урал тиһәләр, ни өсөндөр тик Силәбе өлкәһен генә күҙ алдына баҫтыралар. Был стереотипты юйырға кәрәк. Ошоно күҙ уңында тотоп, Башҡортостан да Көньяҡ Уралға инә икәнлеген күрһәтер өсөн, үҙ эсенә 11 тауҙы алған, 130 саҡрымлыҡ маршрут булдырылды. Ул Белорет ҡалаһынан башланып, Төлөк ҡасабаһында тамамланасаҡ. Маршруттың яртыһы маркировкаланған, йәй башына тиклем был эштәрҙе тамамлаясаҡбыҙ. Юлды тулыһынса үтер өсөн бер аҙна тирәһе ваҡыт кәрәк буласаҡ. Бөгөндән үк был ҡатмарлы юлға сығырға, төбәктең тауҙарын яуларға теләк белдереүселәр етерлек.

Республиканың башҡа брендтары рәтенә мин шулай уҡ Шүлгәнташты, башҡорт балын, ҡурайын һәм ҡымыҙын, "Абҙаҡ" тау саңғыһы курортын, "Янғантау" шифаханаһын индерер инем. Уларҙың барыһы ла киң билдәле һәм ҡунаҡтарҙы йәлеп итә.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостандың 100 йыллыҡ юбилейына социаль төҙөлөш объекттарының дөйөм хаҡы 40 миллиард һумдан ашып китәсәк. Был турала республика Башлығы Рөстәм Хәмитов белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, улар араһында онкология диспансерында палаталар корпусы, "Өфө" халыҡ-ара аэропортындағы яңы терминал, бер нисә балалар поликлиникаһы, яңы күперҙәр, юлдар, юл сиселештәре кеүек мөһим, күп миллионлы объекттар ҙа бар. Бөгөн республикала бер төркөм дауаханалар, мәктәптәр, инфраструктуралар етмәй, тип өҫтәне Рөстәм Хәмитов. Уның һүҙҙәренсә, бөтә был йүнәлештәр "юбилей" проектына инәсәк.

✓ Башҡортостанда Рәсәй Президентына кандидат Владимир Путинға булышлыҡ итеү өсөн төбәк штабы эш башланы. Ул Өфөләге Цюрупа урамындағы 17-се йортта урынлашҡан. Телефондар: +7 (347) 286-13-32, 286-13-66. Штабты Владимир Путиндың ышаныслы кешеләре - Өфө дәүләт нефть техник университеты ректоры Рәмил Бәхтизин һәм "Салауат Юлаев" хоккей клубы" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһының генераль директоры Таһир Ибраһимов, Башҡортостан республикаһы Милли йәштәр театры актрисаһы Рушанна Бабич һәм "Өфө" халыҡ-ара аэропортының генераль директоры Александр Андреев етәкләй.

✓ Башҡортостанда Урал аръяғының иң шәп 100 ғаиләһен һайлайҙар. Конкурс республикала иғлан ителгән Ғаилә йылына арналған. Проектты ойоштороусылар - "Атайсал" гәзите, Сибай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы, "РемСтройЦентр" йәмғиәте. Бәйгелә айыҡ тормош алып барған һәм һәр яҡлап өлгө булған ғаиләләр ҡатнаша ала. Конкурсҡа йыл аҙағында йомғаҡ яһала. Сибай ҡалаһынан, Баймаҡ, Хәйбулла һәм Йылайыр райондарынан иң шәп дүрт ғаиләгә 25-әр мең һум аҡса тапшырыу ҡаралған.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Рәсәй һәм донъя: маҡсаттар һәм ҡиммәттәр" IX Гайдар форумы сараларында ҡатнашты. Йыл һайын Гайдар форумы төрлө илдәрҙән билдәле ғалимдарҙы, власть органдары вәкилдәрен, ижтимағи һәм сәйәси эшмәкәрҙәрҙе, эшҡыуарҙарҙы берләштерә һәм көнүҙәк социаль-иҡтисади һәм сәйәси мәсьәләләрҙе бергәләп тикшереүгә, милли иҡтисадты үҫтереү буйынса стратегик тәҡдимдәр һәм кәңәштәр әҙерләүгә йүнәлтелгән.

**✓ Бөгөн журналисты йыш ҡына уның профессиональ оҫталығына ҡарап түгел, ә ниндәйҙер сенсация материалдары яҙыуына ҡарап баһалау ғәҙәткә инеп бара бит. Шул шауҡымға бирелеп киткәндәрҙе иҫкәртеп торорға кәрәк тә инде.**



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ТӨЙМӘНӘН ДӨЙӘ ЯҺАМАЙЫҠ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың республиканың һәм ҡаланың киң мәғлүмәт саралары баш мөхәррирҙәре менән осрашып, уларҙың һорауҙарына биргән яуаптары аша (гәзитебеҙҙең быйылғы 2-се һаны) етәкселеккә ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итеү, ҡапыл килеп тыуған хәл-торошто көйләү, халыҡҡа күренмәгән ниндәй эштәр башҡарырға тура килеү тураһында ниндәйҙер кимәлдә аңлатырға тырышҡайныҡ инде. Аңлаған кешегә шул да етә. Икенсе яҡтан, эшләгән кеше генә тәнҡиткә дусар була, сөнки эшләмәгән кешене нимә тип тәнҡитләйһең - уның эше лә, һөҙөмтәһе лә юҡ.**



Гүзәл Өфөм, башҡалам!

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы журналистар менән осрашыуҙарҙа ҡәләм оҫталарынан һәр саҡ компетентлылыҡ, һөнәри этикетҡа тоғро ҡалыу тураһында билдәләй. Был турала ул баш мөхәррирҙәр менән осрашыу ваҡытында ла телгә алды: "Мәскәү журналистары буран булһа, ҡар яуһа, ҡайһы юлдан йөрөү яҡшыраҡ, уңайлыраҡ булыуы хаҡында халыҡты иҫкәртергә тотона, Мәскәү властына шул рәүешле ярҙам итергә тырыша, ә беҙҙәге киң мәғлүмәт саралары журналистары бөтә тәнҡитте, дәғүәләрҙе етәкселеккә йүнәлтә".

Башҡа сетерекле мәсьәләләр буйынса ла журналистар, тикшереү үткәрмәйенсә, мәғлүмәтте "эҫе" көйө бирергә тырышып, төймәнән дөйә яһаусан. Һуңғы миҫалды ғына ҡарайыҡ: йәнәһе, Ғафури урамында йәшәүсе Фәрзәт Шәйнуров командировканан ҡайтыуға, ул йәшәгән йорт һүтеп алына. Был мәғлүмәт интернет аша Рәсәй кимәленә тарала. Ә бына "Вся Уфа" телеканалы журналистары тикшереү үткәреп, шуны асыҡлай: бында йәшәүселәр был дәғүәсене бер ваҡытта ла йорттарында күргәне булмаған. Асыҡланыуынса, уның ғаиләһенең ҡаланан ситтә лә, ҡалала ла торлағы бар. "Зыян күреүсе" күрһәткән паспорт та үҙенеке түгел, ә ағаһыныҡы. Әммә Фәрзәт Шәйнуров был йортта үҙе йәшәүен раҫларға маташа. Һүтелгән авария торошондағы йорттағы 32 фатир хужалары, Фәрзәттән башҡа, барыһы ла яңы торлаҡ ала. Төҙөүсе вәкиле белдереүенсә, Фәрзәт Шәйнуров һүтелгән йорттағы дүрт квадрат метрҙан (сөнки дәғүә иткән фатирға бер-нисә кеше теркәлгән) арттырып файҙа күрергә теләй. Был майҙандың хаҡы бөгөнгө ваҡытта 200 - 300 мең һум. Шул уҡ ваҡытта төҙөүсе мәсьәләне дәғүәсе файҙаһына хәл итергә тырышып, уға яңы йорттан бер бүлмә тәҡдим итә.

Әлеге ваҡытта был буталсыҡ мәсьәлә буйынса хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм тәфтиш комитеты тикшереүҙәр алып бара.

Мәҡәләлә ошо һуңғы һөйләмде яҙмағанда ла булыр ине, әммә тема буйынса тап ошо һөйләм бында иң мөһиме булып тора. Ни өсөн? Сөнки ниндәйҙер тема буйынса журналист тикшереүе үткәргәндә, ҡәләм оҫталарына "барҙым, күрҙем, яҙҙым" тип кенә түгел, ә мәсьәләнең энәһенән-ебенә төшөнөп, кәрәк икән хоҡуҡ һаҡлаусы ла, тәфтишсе лә, эҙәрмән дә һәм башҡа бик күп ролдәргә инер-гә, ошо өлкәлә бер ни тиклем булһа ла белемле булырға, анализ һәм һығымта яһай, проблеманан сығыу юлдарын күрһәтә йәки тәҡдим итә белергә кәрәк. Йәғни журналистика - ул "барҙым, күрҙем, яҙҙым" ғына түгел, ул - барлыҡ булған һөнәрҙәр тупланмаһы һәм уларҙы урыны-мәленә ҡарап ҡуллана белеү оҫталығы.

Әйе, бөгөн Башҡортостан, бигерәк тә башҡорт журналистикаһында профессионалдар быуа быуырлыҡ тип әйтеп булмай. Бының үҙенә күрә сәбәптәре лә бар. Беренсенән, киң мәғлүмәт саралары ҡасандыр "дүртенсе власть" булып һаналһа, бөгөн уның статусы бар, йоғонтоһо юҡ. Әгәр хеҙмәтең нимәгәлер йәки кемгәлер йоғонто яһамай, тәьҫир итмәй икән, тимәк, уның һөҙөмтәһе юҡ. Ә һөҙөмтә булмағас, кешенең эш дәрте лә түбәнәйә.

Икенсенән, журналист тикшереүе - бүлмәлә генә ултырып атҡара торған бурыс түгел. Уның өсөн эҙләнеү, теманы яҡшылап өйрәнеү, бәхәсле яҡтарҙың ҡарашын тыңлап, алтын урталыҡты табыу фарыз. Был иһә профессиональ оҫталыҡ, эмоциянан азат айыҡ аҡыл талап итә. Журналистарыбыҙ был сифаттарға эйә түгел, тип әйтергә тел әйләнмәй. Бәлки, йәмғиәт алдындағы, үҙеңдең һөнәрең алдындағы яуаплылыҡ бер аҙ һүрәнәйә төшһә төшкәндер. Сөнки бөгөн журналисты йыш ҡына уның профессиональ оҫталығына ҡарап түгел, ә ниндәйҙер сенсация материалдары яҙыуына ҡарап баһалау ғәҙәткә инеп бара бит. Шул шауҡымға бирелеп киткәндәрҙе иҫкәртеп торорға кәрәк тә инде. Өфө мэры Ирек Ишмөхәмәт улының һәр аҙналағы оператив кәңәшмәлә ҡатнашҡан хәбәрселәргә төбәп, "асыҡ дәрес" һабаҡтары биреүе тап шул маҡсаттан сығып эшләнә тип аңлайбыҙ ҙа инде. Аңлаһалар инде...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




## КҮҘӘТЕҮҘӘР

*32-се күҙәтеүем.* Фән үҫеше, тәбиғәттең күп серҙәренең асылыуы ҡайһы бер нығынған һүҙбәйләнештәрҙең, хатта мәҡәлдәрҙең мәғәнәһен үҙгәртә. Мәҫәлән, "кәкүк әсә" төшөнсәһе. Ғалимдар билдәләүенсә, себеше тыуған ваҡытта кәкүктең ауыҙынан ағыу бүленеп сығып, балаһын ашатҡанда үлтерә икән. Шуның өсөн дә ул балаһын һаҡлап ҡалыр өсөн йомортҡаһын сит ояға һала икән. Әсә кәкүк балаһын юҡһынып, ҡысҡырып йөрөй ҙә, йәй уртаһында ағыуы бөткәс, балаһы янына бара. Беҙ был саҡта "кәкүк һаҡауланды" тибеҙ. Тағы ла кәкүктең бер ҡанаты ҙур, икенсеһе бәләкәс була. Ни өсөн? Сөнки ул балаһын ташлап китмәйенсә, бер тирәлә әйләнеп тик йөрөй, йәғни тик бер яҡҡа табан түңәрәкләп осҡас, бер ҡанаты үҫешмәй ҡала. Был да балаһына тоғролоҡ билдәһе.

*33-сө күҙәтеүем.* Ҡыҙыбыҙ балалар баҡсаһын тамамланы. Май аҙағында хушлашыу тантанаһы булды. Дөрөҫөрәге, балаларыбыҙ сабый сағы менән хушлашты. Үҙҙәре әле аңламаһа ла, мөңгелеккә хушлашты. Уларҙың туған телебеҙҙә йырлағанын, бейегәнен, шиғыр һөйләгәнен күреп, күҙҙәргә йәш эркелде. Балаларының башҡортса балҡығанын күреп, бигерәк тә башҡа милләттән булған ата-әсәләр ҡыуанды. Улар: "Минең балам башҡортса шиғыр һөйләй, йырлай ҙа, бейей ҙә, ҡумыҙҙа ла уйнай белә. Был бит бик шәп, беҙ уларҙы ошо балалар баҡсаһына алып килеп, бик күркәм сифаттарын астыҡ..." - тигән һүҙҙәрен әйтте. Был һүҙҙәрҙе улар ихлас әйтте.

Беҙ тағы ла шуға ла шаһитбыҙ: башҡа милләттән булған күп кенә ата-әсәләр балаларын фәҡәт башҡорт мәктәптәрендә һәм гимназияларында уҡытҡыһы килә. Был хәлде башҡорт мәктәптәрендә һәм гимназияларында тәрбиә эшенең яҡшы ҡуйылыуы, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә алып барылыуы менән аңлатырға булалыр. Тик бына ундай ата-әсәләрҙең ҡайһы берҙәренең балаларына дәүләт теле сифатында ни өсөн башҡорт телен өйрәткеһе килмәүе генә аңлашылмай.

*34-се күҙәтеүем.* XX быуатта илебеҙ әҙәбиәтенең иң гүзәл өлгөләре совет осоронда ижад ителгән. Бөгөн әҙәбиәт дөйөм кимәлдән түбән төштө. Быны совет осороноң идеология тотороҡлоғо йә булмаһа яҙыусының йәшәү шарттары кимәле менән генә аҡлап булмайҙыр ул. Мин иһә совет осороноң ҡаты цензураһы ла әҙәбиәт үҫешенә булышлыҡ иткәндер тим. Нимә генә тимә, барыһын да һөйләргә рөхсәт ителгән киң билдәлелек заманында ижадсы фекерен туранан-тура әйтә ала, ә һүҙ азатлығы булмаған заманда иһә кинәйәгә, образдарға күсә. Һуңғылары иһә әҙәби әҫәр өсөн иң кәрәкле талаптар һанала.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Экология министрлығы яҙғы ташҡынға әҙерләнә башланы. Бөтә ведомстволарҙың, хеҙмәттәрҙең төп бурысы - тәбиғи күренештең кире эҙемтәләрен кәметеү. Министрлыҡта үткән ултырышта гидротехник ҡоролмаларҙың хәүефһеҙлек мәсьәләһе ҡаралды. Республикала улар 491, уларҙа һыу күләме 100 мең кубометрҙан ашыу тәшкил итә.

✓ Башҡортостандан һәләтле балалар Рәсәйҙең 17-се йәштәр Дельфий уйындарында ҡатнашырға әҙерләнә. Улар быйыл 20-25 апрелдә Приморье крайында (Владивосток ҡалаһы) үтә. Республиканың уҡытыу-методика үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, ғәҙәттәгесә, Башҡортостандың рәсми делегацияһына республиканың мәҙәниәт өлкәһе белем биреү йорттары уҡыусылары инә. Дельфий уйындарына һайлап алыу (төбәк) туры ағымдағы йылдың 7 февралендә Урта махсус музыка колледжында Уйындарҙа ҡатнашыуға дәғүәселәрҙең видеоязмалары буйынса үтә.

✓ Декабрь-ғинуар айҙарында республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында һиҙелерлек үҙгәрештәр булды. Министрҙың элекке урынбаҫары Эльза Сыртланова Өфөләге 13-сө клиник дауаханаһын етәкләй, министрҙың беренсе урынбаҫары Нәзир Минһажев Республика клиник перинаталь үҙәгенең баш табибы итеп тәғәйенләнде. Республика ҡан биреү станцияһын Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Рәмил Хәмитов етәкләйәсәк. Ул үҙенең бурыстарын шаршамбы, 17 ғинуарҙа, башҡара башланы.

✓ "Башинформ" агентлығының конференц-холында Рәсәй матбуғаты көнөнә арналған тантаналы сара уҙҙы. Сара сиктәрендә Рәсәй Федерацияһы Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығының, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығының, Рәсәй Федерацияһы Журналистар союзының, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының маҡтау ҡағыҙҙары һәм рәхмәт хаттары тапшырылды.

✓ 2018 йылдың 1 февраленән Башҡортостанда ҡала яны поездарында юл йөрөү һәм йөк хаҡы арта. Башҡортостан Хөкүмәтенең ҡарар проектына ярашлы, сәфәр алыҫлығына ҡарамаҫтан, түгге 10 саҡрым өсөн юл хаҡы 20 һум тәшкил итәсәк (хәҙер ул 19 һум тора), унан һуңғы һәр саҡрым өсөн - ике һум (хәҙер 1,9 һум).

**"Башинформ"дан.**

*✓ Киләсәктә "Парк эсендәге ҡала" концепцияһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә ҡаланы тулыһынса ял зоналары менән ҡаплау планлаштырыла. Улар үҙ-ара йәйәүлеләр йәки велосипедсылар юлы менән тоташасаҡ.*



*ҠЫҪҠАСА*

## СИТТӘ ҠАЛМАҒЫҘ...

✓ **Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә "Рәсәйҙең киләсәге" III Милли премияһының һайлап алыу туры 4 февралдә Өфөлә Ҡала мәҙәниәт һарайында үтәсәк.** Унын төп маҡсаты булып һәләтле һәм перспективалы балаларҙы, йәштәрҙе асыҡлау тора. Заявкалар 29 ғинуарға тиклем ҡабул ителә. Номинациялар - вокал, хореография, dance solo, костюм һәм мода театры. Тулыраҡ мәғлүмәтте natpremium.ru рәсми сайтында һәм "Бәйләнештә" vk.com/natpremium төркөмөндә табырға мөмкин.

✓ **Ҡар яуған осорҙа боҙланған ҡаты ҡатлам барлыҡҡа килмәһен өсөн ҡала хеҙмәттәре махсус технология ҡуллана.** Ҡала магистралдәрен таҙартыу алдынан улар юлдарҙы боҙлауыҡҡа ҡаршы материалдар менән эшкәртә. Ҡатнашма составында тоҙ булғанлыҡтан, юлдарҙа боҙ түгел, ә йомшаҡ ҡар барлыҡҡа килә һәм ул механизацияланған юсул менән енел таҙартыла. Бындай технология ихаталарҙы комплекслы таҙартыу ойошторолғанда ла ҡулланыла.

✓ **Былтырғы һуңғы алты йылда Өфөлә барлығы 19 яңы ял зонаһы булдырылған һәм ғәмәлдәге 28-е - төҙөкләндерелгән.** Бындай эшмәкәрлек артабан да дауам итәсәк, сөнки социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, ҡала халҡы үҙгәрештәрҙе ыңғай ҡабул итә. Киләсәктә "Парк эсендәге ҡала" концепцияһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә ҡаланы тулыһынса шундай ял зоналары менән ҡаплау планлаштырыла. Улар үҙ-ара йәйәүлеләр йәки велосипедсылар юлы менән тоташасаҡ. Шул рәүешле ҡала халҡын сәләмәт тормош рәүешенә ылыҡтарыу маҡсатында киң күләм спортты үҫтереү мәсьәләләре хәл ителә.

✓ **Өфөләге 32-се спорт мәктәбендә "Геркулес" спорт мәктәбенә нигеҙ һалған Николай Попов иҫтәлегенә 23 йәшкә тиклемге юниорҙар араһында дзюдо буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары үтте.** Унда Волга буйы, Үҙәк, Төньяҡ-Көнбайыш, Көньяҡ, Урал федераль округтарынан 14 ауырлыҡ категорияһында (ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында етешәр) 200 спортсы ҡатнашты. Был сара уҙған быуаттың 1990 йылдарында башланып, һуңынан туҡтап ҡала. Бынан дүрт йыл элек ҡабаттан тергеҙелә һәм йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны үҫә, географияһы киңәйә бара. Турнир енеүселәре 1-4 мартта Смоленск ҡалаһында үтәсәк Бөтә Рәсәй беренселегендә ҡатнашасаҡ.

*АҘНА ВАҠИҒАҺЫ*

# ИЛ БАШЛЫҒЫ ЫҢҒАЙ БАҺАЛАНЫ



**24 ғинуарҙа Башҡортостанға эш сәфәре менән Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин килде. Өфө аэропортында уны республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡаршыланы.**

Ил етәксеһе визиты барышында Өфө моторҙар эшләү берекмәһенең (УМПО) вертолеттар двигателдәре узелдарын әҙерләү һәм йыйыу производство-технологик үҙәге, шулай уҡ МС-21 авиалайнеры өсөн ПД-14 двигателе узелдары һәм деталдәре, газ һурҙырыу агрегаты һәм башҡа продукция экспозицияһы менән танышты.

Ҡыҫҡа экскурстан һуң Владимир Путин Ростех дәүләт корпорацияһына ингән УМПО предприятиеһында оборона-сәнәғәт комплексы ойошмалары тарафынан граждандарға тәғәйен продукция етештереүҙе төрләндереү (диверсификациялау) мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Бының әһәмиәтен ул киләсәктә Оборона министрлығы заказдары кәмейәсәге, дәүләт оборона заказдары күләме ҡыҫҡарасағына бәйләне. Ил башлығы билдәләүенсә, 2025 йылға ОПК предприятиеларында сығарылған граждандар өсөн тауарҙар өлөшө 30 процентҡа тиклем үҫергә, ә 2030 йылға 50 процентҡа етергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта уның юғары сифатлы, һәр кем һатып алырлыҡ хаҡта булыуы мотлаҡ.

Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыу барышында Владимир Владимирович төбәктең көнүҙәк социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләре буйынса фекер алышты. Республика етәксеһе РФ Президентының 2012 йылдың май указдарында сағылыш тапҡан йөкләмәләрҙең үтәлеше менән таныштырҙы һәм төбәктә эш хаҡының уртаса 3,4 процентҡа артыуын билдәләне. Әңгәмә барышында шулай уҡ нефть химияһы комплексы үҫешенең төрлө аспекттары ҡаралды, республикала иғлан ителгән Ғаилә йылында балалы ғаиләләргә ярҙам саралары хаҡында бәйән ителде.

Шулай уҡ был көндө Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, Баш мөфтөй Тәлғәт Тажетдин менән осрашты. Әңгәмә алдынан ул Рәсәйҙең иң боронғо мәсеттәренең береһе - Беренсе Йәмиғ (Соборная) мәсете менән танышты. Бина 1830 йылда төҙөлә, мәсет ҡарамағында "Ғосмания" мәҙрәсәһе, ике класлы рус-башҡорт училищеһы эшләй. 1960 - 1992 йылдарҙа ул Өфөлә ғәмәлдәге берҙән-бер мәсет була. Ил башлығы Башҡортостанда мәсеттәр һаны артыуын ыңғай баһаланы һәм бының традицион диндәрҙең үҫеше сағылышы икәнен билдәләне, республикала алып барылған ислам белгестәрен әҙерләү буйынса ыңғай фекер белдерҙе.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ЮЛ СИТЕНДӘ НИ БАР?

**Былтыр баш ҡалала дөйөм майҙаны 1 518 179,1 квадрат метр тәшкил иткән, шул иҫәптән "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" өҫтөнлөклө проекты, ҡала агломерацияһын комплекслы үҫтереү программаһы буйынса Өфө - Дим (Дим шоссеһы) һәм Өфө - Затон (Халыҡтар дуҫлығы проспекты) урам-юл селтәре ремонтланған. Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге бер төркөм объекттарҙағы эш менән танышты.**

Өфө - Дим трассаһында юл полотноһынан тыш, ике йүнәлештә лә кәртәләр, трос ҡоймаһы ҡуйылған. Был конструкцияларҙың өҫтөнлөгө шунда - авария булғанда йәрәхәтләнеү һәм транспорттың зыян күреү кимәле түбәнәйә. Шулай уҡ йәмәғәт транспорты туҡталыштары төҙөкләндерелгән, юлға билдәләр һалынған һәм 1,5 мең метр ямғыр һыуы канализацияһы эшләнгән. Тикшереү сиктәрендә "Сәләмәтлек баҡсалары" туҡталышынан бер нисә метр алдараҡ, водителдәр тиҙлеген кәметһен өсөн, өҫтәмә рәүештә йәйәүлеләр сығыу юлын күрһәтергә кәрәклеге билдәләнде. Шулай уҡ Дим йылғаһы аша һалынған күперҙән биҫтә яғына йүнәлештә ремонт эштәре тамамланған урындарҙа тиҙлекте ваҡытлыса 40 километрғаса сикләү билдәләрен алырға ҡарар ителде. Артабан сарала ҡатнашыусылар Халыҡтар дуҫлығы проспекты менән таныштылар. Бында ремонт былтыр яҙын башлана. Бөгөн был участкала юл ремонтланған, ремонт сиктәрендә 177 яҡтылыҡ сығанағы терәүе, 70 юл билдәһе, өс светофор, яңы типтағы 6 туҡталыш ҡуйылған. Юлдың буйынан-буйына термопластик билдә һалынған. Ирек Ялалов белдереүенсә, былтыр "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә баш ҡалала урам-юл селтәренең 31 участкаһы ремонтланған. Быйыл 51 урамда ремонт үткәреү планлаштырыла.

## ҮҘЕБЕҘҘЕҢ АҘЫҠТЫ АША!

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары аҙыҡ-түлек именлеге тураһындағы законға үҙгәрештәр индерәсәк.**

Яңыртылған закон проекты республика халҡына "туҡланыуҙың физиологик нормаларына ярашлы йәшәү өсөн мөһим аҙыҡ-түлектең эргәлә булыуын тәьмин итеп" кенә ҡалмаясаҡ, ә тәьминәттең механизмдарын да ҡараясаҡ. Һуңғы ике йылда Башҡортостан "яңы иҡтисади шарттарҙа" йәшәй һәм был игенде, итте, шәкәрҙе һәм башҡа продукция сеймалын ҡайтанан етештереү менән ҡылыҡһырлана. Әммә урындағы етештереүсенең әҙер продукцияһы өлөшө бик әҙ. Республика халҡы йылына аҙыҡ-түлек өсөн 365 миллиард һум сарыф итә. Шул уҡ ваҡытта эшкәртеү предприятиелары һәм шәхси хужалыҡтар 160 миллиард һумлыҡ әҙер продукция етештерә. Баҙарҙың күп өлөшөн башҡа төбәктәрҙән һәм сит илдән индерелгән ризыҡ алып тора. Бушлыҡты тултырыу өсөн властар ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәргә эшкәртеү һәм баҙарға сығыу, эре эшкәртеү предприятиеларының продукцияһын һатыу һәм иҡтисади әүҙем халыҡ йәшәгән ауылдарҙа кооперативтар ойоштороу менән ярҙам итеүҙе планлаштыра.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостан мәғариф министрлығы төбәктең көс структуралары менән берлектә дөйөм белем учреждениеларында хәүефһеҙлек системаларын тикшерә башланы. Тәү сиратта был дөйөм белем биреү учреждениеһы биләмәләренә инеү режимына ҡағыла. Әлеге ваҡытта республиканың байтаҡ мәктәптәре ашығыс рәүештә полиция нарядын саҡырыу төймәһе менән йыһазландырылған. Ҡала дөйөм белем биреү ойошмаларының бөтәһе лә тиерлек бинаға инеүҙе контролдә тотоу системаһына эйә һәм видеокүҙәтеү ҡорамалдары менән йыһазландырылған, һаҡ сигнализацияһы бар. Бынан тыш, уларҙа хәүефһеҙлек өсөн шәхси һаҡ агентлыҡтары яуаплы.

✓ Башҡортостан тарихында тәүгә 26-27 ғинуарҙа Яҡтыкүл тау саңғыһы курортында Digital-ҡоролтай үтә. Конференцияла Рәсәйҙең иң яҡшы digital, SMM һәм яңы медиа спикерҙары сығыш яһаясаҡ. Ҡунаҡтарҙы ҡыҙыҡлы лекциялар һәм оҫталыҡ дәрестәре, "Урал легендалары" тау саңғыһы мегакубогы һәм күңел асыу саралары көтә.

✓ 22 ғинуарҙан 22 февралгә тиклем Башҡортостанда "Каргиҙәр" операцияһы уҙа. Тейешле бойороҡто республика хөкүмәте сығарған. Операция барышында ҡаргиҙәрҙәрҙе файҙаланыу ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын иҫкәртеү буйынса саралар ойошторола. Операцияны республика буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы менән берлектә Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһы, Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы үткәрә.

✓ Башҡортостанда "Беҙҙең берләшмә" социаль видеороликтар республика конкурсы башланды. Ҡатнашыусы ғаризалар 19 февралгә ҡәҙәр республиканың Йәмәғәт палатаһында ҡабул ителә. Конкурс темалары: "Экология"; "Минең үҫеш биләмәһе" - йорт ширҡәттәре үҫешендә ҡатнашыу өсөн халыҡты дәртләндереү; "Урындарҙа ирекмәнлек"; "Объективта ғаилә ҡиммәттәре" - ғаилә йолалары, варисләлығы, ата-әсә даны хаҡында хикәйәләр.

✓ *Тап ошондай боласылар менән эшләй ҙә инде Өфө ҡалаһының йәмәғәт именлеген һаҡлау инспекторҙары. Былтыр туғыҙ ай эсендә 2584 низағ ҡуптарыусыларға протоколдар төҙөлөп, улар яуапҡа тарттырылған.*



*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ҺАНДАР АРТЫНДА...

## кеше яҙмыштары



**"Тормош булғас, була төрлө хәлдәр", - тип, йырҙа көнелле генә йырлана ла бит. Ысынбарлыҡта, тормошта осраған хәлдәрҙән күҙгә йәштәр төйөлә ҡайһы саҡ, ҡулдар ҡалтырап төшә...**

Бөлйерәп кенә бөткән ҡарсыҡ сығып китте кабинеттан. Кисәге төн әбекәй өсөн еңелдән булмаған. Унын менән бергә йәшәгән, бер ҡайҙа ла эшләмәгән 37 йәшлек улы, иҫереп ҡайтып, ҡаңғыртып сыҡҡан. "Балам, суд-муд юлдарын тапата күрмә, үлергә йөрөгәнемдә. Әҙәм ыстырамы, кеше ишетеп ҡалмаһын, тип, һаман йәшерә килдем. Кисә оторо шашты шул, хатта күршеләр йоҡоларынан уянып килеп инделәр бит фатирға. Ғәфү итегеҙ, ҡыҙҙар, һеҙҙең алдығыҙҙа минә шул тиклем оят, тик балам өҫтөнән бер нәмә лә яҙмайым", - тип, иламһырап сығып китте ул. Әбейҙең улы араҡы еҫтәре аңҡытып килеп инде лә, эсеүе арҡаһында ғаиләһеҙ, эшһеҙ ҡалыуын һөйләне, әсәһенә һуғып ебәреүенә бик үкенеүен әйтте, биргән ҡағыҙҙарға ҡултамғаларын ҡуйып, йәһәт кенә сығып олаҡты. Коллегам был "ир-уҙамандың" йыш ҡына әсәһенә ҡул күтәреүен, бер ҙә генә эсеүен ташларға теләмәгәнен һөйләне. Йәл. Әсәй кеше ошо тормош тураһында хыялланғанмы ни?

Тап ошондай боласылар менән эшләй ҙә инде Өфө ҡалаһының йәмәғәт именлеген һаҡлау инспекторҙары. Былтыр туғыҙ ай эсендә 2584 низағ ҡуптарыусыларға административ хоҡуҡ боҙғандары өсөн протоколдар төҙөлөп, улар яуапҡа тарттырылған. Уйлап ҡараһаң, миллионлы ҡала өсөн был күп тә түгел кеүек, тик ошо һан тирәләй нисәмә әсәй, ҡатын, бала әсе күҙ йәштәрен түгә. Йәмәғәт именлеген һаҡлаусы инспекторҙар тарафынан тәнгә тынлыҡты боҙған, башҡаларға ҡамасаулаған өсөн яуаплылыҡҡа 1800 кеше тарттырылған. Улар бөтәһе лә хакимиәттең административ комиссияларында тикшерелеп, законға ярашлы, штраф түләүгә мәжбүр ителгәндәр. Үҙәктә ҡала буйынса таралған алыпһатарҙар менән эш бик ҡәтғи ҡуйылған. Хәҙер кем, нисек, ҡайҙа һәм нимә менән һатыу итергә тейеш - аныҡ ҡына билдәләнгән. Әлбиттә, һалым түләүҙән ҡотолорға маташып, хакимиәттән рөхсәтенән тыш, ҡасып-боҫоп һатыу итеүселәр етерлек. Тик был тағы ла административ хоҡуҡ боҙоу булып сыға шул. Хөрмәтле өфөләргә әйтер инем, нимәнәлер һатыуға сығарыр алдынан иң тәүҙә бөтә нескәлектәрен атҡарып, кәрәкле документтар йыйығыҙ, зинһар.

Балалар, уларҙың ғаиләлә тәрбиәләнеүе үҙәктә айырым иғтибарҙа. Ошо көнгә тиклем балиғ булмағандар эше буйынса инспекторҙар төрлө профилактик органдарҙа иҫәптә торған 2370 бала менән эшләгән. Индивидуаль һөйләшеү, йәшәгән һәм уҡыған ерҙәрендә күрешеү, үҫмерҙәргә артабан хоҡуҡ боҙоу юлынан сығырға ярҙам итә. Асоциаль тормош алып барған 1734 ата-әсә асыҡланған. Был ғаиләләр ҙа йәшәү урыны буйынса иҫәпкә ҡуйылып, күҙәтеү аҫтына алынған.

Шулай итеп, эш гөрләй үҙәктә. Һандар бермә-бер арта. Ә һандарҙа - кеше яҙмыштары... Ғазраилдан да ҡурҡыныс атай... Туҡмалған әбекәй... Әсәһен бер көн айныҡ күрмәгән ас балалар...

**Альмира ИСХАҠОВА,**
**Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәмәғәт именлеген һаҡлау үҙәге белгесе, психолог.**

*КИҪӘТӘБЕҘ!*

# МАШИНАҒЫҘҘЫ УРЛАУҘАРЫ БАР...

**Былтыр автотранспорт урлау һәм ҡыуыу менән бәйле теркәлгән енәйәттәр һанының кәмеү тенденцияһы һаҡланып килде. 2016 йыл менән сағыштырғанда бындай осраҡтар 138-гә кәм булды. Тикшерелгән енәйәттәрҙең дөйөм һаны 440 осраҡ тәшкил итһә, шуларҙың 91-е - урлау, 349-ы ҡыуып алып китеү менән бәйле.**

Транспорт саралары менән бәйле бындай енәйәттәрҙең күпселеге Өфө ҡалаһы буйынса теркәлә (63 процент). Күпселек осраҡта кис һәм төндә урамда торған машиналар урлана. Автомобилдәрҙе нигеҙҙә ҡабыҙыу йоҙағын боҙоп, үткәргестәрҙе туранан-тура тоташтырыу юлы менән урлау киң таралған. Былтырғы йыл буйына БР Эске эштәр министрлығының Эксперт-криминалистика үҙәге белгестәре тарафынан маркалау билдәләре үҙгәртелгән 64 машина асыҡланды.Шуларҙың бишәүһенә генә беҙҙең төбәктә эҙләү һалынған, ҡалғандары Рәсәйҙең башҡа төбәктәре, нигеҙҙә Мәскәү һәм Ленинград өлкәһе буйынса иҙәүкәләнә. Шуныһы ла бар: ғәҙәттә, енәйәтселәр ҡыуыуға ҡаршы механик сара менән йыһазландырылған машиналарға теймәү яғын ҡарай. Ошо юҫыкта теркәлгән енәйәттәр һаны артыуҙың ҡайһы бер сәбәптәре: тотош илдә автопарктар һанының артыуы; автомашинаны кредитҡа һатып алыуҙың еңелләшеүе; автотранспортты урлау өсөн техник сараларҙың арзанайыуы (5 йыл элек "кодграбер" 200-250 мең һум торһа, хәҙер уны 15 меңгә алырға була); үҙенең автомобилен һаҡлау йәһәтенән граждандарҙың тейешле хоҡуҡи аңға эйә булып етмәүе.

БР Эске эштәр министрлығының автомобиль хужаларына кәңәштәре: бер ваҡытта ла машинағыҙҙың ишектәрен - асыҡ, ә асҡысты ҡабыҙыу йоҙағында килеш ҡалдырмағыҙ; кеше йөрөмәгән һәм ҡараңғы урындарҙа машинаны оҙаҡҡа ҡалдырып китмәгеҙ; тәнгәләккә машинағыҙҙы гаражға йә түләүле туҡталҡаға ҡуйығыҙ; машинаны тиҙ генә ҡабыҙып булмаҫлыҡ бөтөн сараларҙы күрегеҙ: һаҡ сигналы, рулде, педалдәрҙе блокировкалау системаһы һ.б. менән йыһазландырығыҙ; документтарығыҙҙы һәм ҡиммәтле әйберҙәрегеҙҙе машинала ҡалдырып йөрөмәгеҙ; элек ҡулланыуҙа булған, техник документтарһыҙ автозапчастар һәм комплектлаусы деталдәр һатып алмағыҙ, уларҙың 90 проценты - урланған; автомашина һатып алғанда уның ике комплект асҡысы, әгәр ҡыуыуға ҡаршы ҡорамал ҡуйылһа, уға ике брелок булыуын талап итегеҙ; ҡулдан машина һатып алғанда техник документациялар менән бергә техник саралар паспортын һорарға ла онотмағыҙ; машинағыҙ урланған осраҡта кисекмәҫтән "02"телефоны буйынса йәки яҡындағы полиция бүлегенә килеп, техник паспорт мәғлүмәттәрен (марка, модель, төҫө, дәүләт номеры, агрегаттар номеры) хәбәр итегеҙ.

**БР Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БЫЛ ДА МӨҺИМ, ИМЕШ...

**Рәсәй Хөкүмәтенең юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә ингән яңы пунктка ярашлы, водителдәр төнгө ҡараңғылыҡта тораҡ пунктынан ситтә туҡтарға мәжбүр булғанда яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы куртка йәки жилет кейергә тейеш.**

2017 йылдың алты айында илдә ҡараңғы ваҡытта юл ситендә туҡтаған 66 водителде тапау осрағы теркәлгән. Алдан Рәсәйҙә йәйәүлеләр өсөн ошондай уҡ талап ҡабул ителде, улар тораҡ пунктынан ситтә йөрөгәндә яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы элементтар йөрөтөргә тейеш. Һөҙөмтәлә 2017 йылдың алты айында йәйәүлеләр ҡатнашлығында юл-транспорт ваҡиғаһын 10,2 процентҡа - 7,5 меңгә тиклем кәметеп булды. Яңы ҡарар рәсми рәүештә баҫылғандан һуң 90 көн үткәс үҙ көсөнә инә.

Һәм тағы. Былтыр декабрь башында Дәүләт автоинспекцияһында водителдәрҙең юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары менән аралашыуын фотоға һәм видеоға төшөрөү хоҡуғын раҫланылар. Шул уҡ ваҡытта был инспекторҙың эшенә ҡамасаулағанда йәки районда оперетив саралар уҙғарылғанда ул водителдең фотоға һәм видеоға төшөрөү хоҡуғын сикләй ала.

# ВОДИТЕЛДӘРГӘ ШТРАФТАР АРТА

**Рәсәй водителдәрен бер нисә яңылыҡ көтә. 2018 йылдың 1 ғинуарынан ҡараңғылатҡыс тәҙрәләр өсөн штрафтар өс тапҡырға арттырыла.**

Билдәләнеүенсә, автомобилдең алғы тәҙрәһе яҡтылыҡты 75 процентҡа тиклем, ә ҡабырға яҡтағы тәҙрәләр 70 процентҡаса үткәрһә, был ҡараңғылатҡыс боҙоу тип иҫәпләнә. Ул ҡараңғыраҡ булған хәлдә водителгә беренсе тапҡыр элекке 500 һум урынына 1,5 мең һум түләргә тура киләсәк. Ҡабатланған осраҡта штраф 5 мең һум тәшкил итәсәк. Шулай уҡ автоһәүәҫкәрҙәргә "тыныс хәрәкәт зонаһы" тип аталған яңы билдәләргә аптырарға кәрәкмәй. Улар ихаталарҙа, сәғәтенә 10-20 саҡрымдаса тиҙлек сикләнгән билдәмәләрҙә ҡуйыласаҡ. Йәйәүлеләр бындай урындарҙа үҙҙәренә унайлы ерҙән юл аша сыға ала. Штраф түпларға яратыусыларға ла уйланыу зарур. 2018 йылда суд приставтары штрафтар суммаһы 10 мең һумдан артҡан водителдәрҙең әйәнә барыу хоҡуғына эйә. Улар водитель таныҡлығынан мәхрүм итә ала. Һуңғыһы: белгестәр бензинга хаҡтарҙың уртаса 60 тингә артыуын фаразлай.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тимрәү

❖ Тимрәү, ҡорсаңғыны ҡуҙғалаҡтың тамыры һәм орлоғонан яһалған төнәтмә менән сылатып торорға. Бынан тыш, ҡуҙғалаҡты ваҡлап, ҡаймаҡ йәки һөт өҫтөнә ҡушырға, килеп сыҡҡан майҙы көнөнә бер нисә тапҡыр зарарланған ергә һөртөргә.

### Ҡолаҡ шаулауынан

❖ 1 балғалаҡ барвинка үләне, 1 ҡалаҡ энәлек сәскәһен ваҡлап, 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡас ябып, һауытты 30 минут ҡайнап ултырған һыуҙа тоторға, һөҙөргә. 1-1,5 ай дауамында ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3-4 тапҡыр 70-шәр г эсергә.

### Астма

❖ 40 бөртөк һуған орлоғон ҡайнап ултырған һыуға һалырға һәм йомшарғансы һыуҙа тоторға. Һуңынан һуғандарҙы алып, ярты литр зәйтүн майына һалырға, иҙергә. Иртән һәм кисен ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

### Һалҡын тейгәндә

❖ Шыршы йәки ҡарағай энәләрен ботаҡтарынан айырып, ит турағыс аша үткәрергә, һәр 100 грамм массаға 1-2 ҡалаҡ бал өҫтәргә, ингаляция һәм түшкә компресс өсөн ҡулланырға. Һыуыҡтыҫтың аҫҡы кәштәһендә һаҡларға.

### Етен

❖ Етен орлоғо бик шифалы, 4 аҙна буйына ризыҡтарға етен орлоғо ҡушып ашау ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, эсәк эшмәкәрлеген яйға һала. Бының өсөн 1 стакан ҡайнар һөт йәки һыуға 1-2 стакан тарттырылған етен орлоғо һалырға, 1-2 минут тоторға һәм тоҙ, шәкәр йәки бал ҡушып ашарға. Шулай уҡ етен онон һоло, дөгө, ҡабаҡ бутҡаһына өҫтәп ашарға була.

### Ҡарағай энәләре

❖ Ҡарағайҙың энәләре, тубырсығынан төнәтмә яһап, ванна ингәндә һыуға өҫтәргә. Йоҡоһоҙлоҡтан файҙалы, тирене таҙарта, быуындар һыҙлауын баҫа. Ай дауамында аҙнаһына 2-3 тапҡыр ванна инергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

***✓ Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон-борондан бер ваҡытта ла сабата үреп кеймәгән. Сабата Башҡортостан еренә иң тәүҙә 1552 йылда, урыҫ батшаһы Иван Грозный Ҡаҙанды баҫып алғас, килә.***



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Әмир, нәҙир ырыуҙары менән көрәш

Ошо уҡ ваҡытта тағы бер урында мосолмандар үлтерелә. Әмир ырыуы шөйехе шулай уҡ үҙ ырыуына белгестәр ебәреүен һорай. Мөхәммәт бәйғәмбәр уларға ла бер төркөм өммәттәштәрен ебәрә. Был юлы ла әмир ырыуы үҙе түгел, ә ситтән килеп етеп, сәләйем ырыуы яугирҙары һөжүм итә. Көстәр тиң булмай. Мосолмандар төркөмө тулыһынса тиерлек ҡырыла, ике генә кеше тере ҡала. Береһе яу ваҡытында ауыр яра ала, аҙаҡтан уны үлтереп тормайҙар, икенсеһе һуғыш барғанда ситтә дөйә көтә. Уны аҙаҡ тотоп алып, мәсхәрәле рәүештә сәсен ҡырҡып, ҡайтарып ебәрәләр. Был мосолман юлда әмир ырыуынан ике ирҙе осрата ла, һәләк булған иптәштәре өсөн үс алып, икеһен дә үлтерә. Мәҙинәгә ҡайтып еткәс, Мөхәммәт бәйғәмбәргә ни булғанын һөйләп бирә.

Күп тә үтмәй, әмир ырыуы илселәре үҙҙәре үк килеп, дәғүәләрен белдерә. Мосолмандарға ҡаршы һөжүмдә беҙҙекеләр ҡатнашманы, ә һеҙҙең кешегеҙ беҙҙән үс алған, ти улар. Ләкин үс алыуҙы үс алған ваҡытта хәлдең нисек булғанын белмәгәнлектән, ҡарымта хаҡын аҡсалата алырға риза булалар. Улар менән Мөхәммәт бәйғәмбәр ризалаша. Аралашсы итеп нәҙир (Бану Нәҙир) ырыуы аҡһаҡалдары билдәләнә, сөнки Мәҙинәлә әмир ырыуы менән тик нәҙир ырыуы ғына дуҫлыҡ килешеүе төҙөгән булып сыға.

Мөхәммәт бәйғәмбәр Әбү Бәкер менән Ғәли батырҙы эйәртеп, нәҙирҙәр ҡасабаһына юллана. Тик унда барып етмәйенсә, кире боролалар. Мәҙинәгә ҡайтыу менән Мөхәммәт бәйғәмбәр нәҙир ырыуында уларҙы үлтерергә йыйыныуҙары тураһында хәбәр итә. Шунда уҡ нәҙир ырыуына илсе ебәреп, ун көн эсендә оазисты ҡалдырып китеүҙәрен талап итә.

Нәҙир ырыуы юлға йыйына башлай. Ләкин был юлы монафиҡтарҙың башлығы, әлеге лә баяғы Абаллаһ ибн Ғөбәй ҡыҫылып маташа. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең әмеренә буйһонмаҫҡа саҡыра ул, үҙ яугирҙарының һәм тирә-яҡтағы ырыуҙарҙың ярҙамын вәғәҙә итә. Былдай вәғәҙәләрҙән һуң нәҙир ырыуы оазисты ташлап китеүҙән баш тарта. Ләкин Абаллаһ ибн Ғөбәй үҙ кешеләрен Мөхәммәт бәйғәмбәргә ҡаршы күтәрә алмай - монафиҡтар мосолмандарҙы үҙ өммәттәштәре тип һанай һәм, йәһүҙиҙәрҙе яҡлап, уларға ҡаршы ҡорал тотоп сығырға теләмәй. Тирә-яҡтағы ырыуҙар ҙа ярҙамға килергә ашыҡмай.

Ярҙам булмаясағын аңлағандан һуң, нәҙир ырыуы аҡһаҡалдары Мөхәммәт бәйғәмбәргә илселәр ебәреп, уның шарттарын үтәргә әҙер булыуҙарын белдерә. Ләкин был юлы Мөхәммәт бәйғәмбәр шарттарҙы ҡатыраҡ ҡуя - нәҙирҙәр ҡоралдарын ҡалдырып китергә тейеш.

Нәҙир ырыуы был шартҡа ла күнеп, юлға йыйына башлай. Оазистан киткәндә, дошмандары алдында һыр бирмәҫ өсөн, байрамса кейенеп, күңелле йырҙар йырлайҙар. Ислам динен ҡабул иткән ике ғаилә генә йорттарында тороп ҡала. Нәҙир ырыуы кешеләренең күбеһе Сүриәгә юллана. Аҙаҡ улар Ислам диненә ҡаршы көрәш алып бара.

Мөхәммәт бәйғәмбәр иһә нәҙирҙәрҙән тороп ҡалған йорттарҙы, ерҙәрен мөһәжирҙәргә өләшә. Бының менән ул мосолмандарҙың торлаҡ мәсьәләһен тулыһынса хәл итә. Байтаҡ йылдар буйы үҙҙәрендә мөһәжир ғаиләләрен йәшәткән ансарҙар ҙа иркенләп тын алып ҡала.

626 йылдың яҙында Мөхәммәт бәйғәмбәр Зәйнәб исемле утыҙ йәшлек тол ҡатынға өйләнә. Тик был ҡатыны туйҙан һуң бер нисә ай үткәс вафат була.

**(Дауамы бар).**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Былтыр 10 ноябрҙә "Башҡортостан" гәзитендә күренекле әҙип, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Сәлимйән улы Мусин тураһында баҫылған мәҡәләне бик ҡыҙыҡһынып уҡып сыҡтым. Мәҡәләлә уның Бөйөк Ватан һуғышы осоронда үҙ ҡулдары менән үреп кейгән сабатала һәм яһап алған саңғыла тыуған ауылы Ҡолғонанан алыҫта ятҡан Маҡарға йөрөп уҡығаны тураһында бәйән ителә.**



# САБАТА ШӘП АТЛАТАМЫ?..

Мәҡәләне уҡып сыҡҡас, миндә шундай уй барлыҡҡа килде: нимә ул сабата, ул ҡайҙан килеп сыҡҡан, уны нимәнән һәм нисек итеп үрәләр? Бигерәк тә һуғыш осоронда ул ниндәй әһәмиәткә эйә булған?

Сабатаны үрә башлау өсөн бик ҡатмарлы һәм оҙайлы эш башҡарырға кәрәк. Урманда үҫеп ултырған эре йүкә ағастарын ҡырҡҡандан һуң, уларҙың тамырынан йәш үҫентеләр шытып сыға. 6-7 йылдан һуң йыуанлыҡты һәнәк һабындай булғас, июнь айының ярттыларында ағастың ҡабығы ҡуба башлай. Ошо үҫентеләрҙе ҡырҡып алып, ҡабығын шөшлә менән буйынан буйына йырып сығырға кәрәк. Йырылған ҡабыҡтың ҡырыйҙарын ике яҡҡа шаҡарып ебәрһәң, ул анһат ҡына ағастан ҡубып килеп сыға. Айырылып сыҡҡан ағас - ҡыуал, ә ҡабығы сей йүкә тип атала. Сей йүкәне алып ҡайтып, күләгәлә 3-4 көн тотҡандан һуң, тәгәрмәсләп төрөп, бәйләп ҡуйырға кәрәк. Шулай итһәң, уны сабатаны үрер алдынан һыуға һалып ебетеүгә унайлы була. Сей йүкәне ҡояшҡа һалып киптерергә ярамай, сөнки ул ярыла башлай һәм сифаты юғала.

Сабата үрә башлау өсөн нисек итеп сей йүкәнән таҫмалар юнып әҙерләү һәм нисек сабата үреү тураһында яҙып тормайым, сөнки уның өсөн был эштәрҙе үҙ күҙең менән күреп, ҡарап ултырырға кәрәк. Ул бик ҡатмарлы эш. Батша Петр I, сабатаны үҙ ҡулдары менән үреп ҡарап та булдыра алмағас: "Это мудреное ремесло", - тип тиккә генә әйтмәгән. Ә Петр I үҙе бик оҫта ҡуллы шәхес булған. Ленинградта барғанда минә уның өй-музейын күрергә насип булды. Өйҙәң беренсе ҡатында уның эш урыны, аш-һыу бүлмәһе урынлашҡан. Эшләгән ерендә ағас эшкәртә торған станогы һәм төрлө-төрлө эш ҡоралдары тулып ята. Өйҙәң өҫкө ҡатында ҡунаҡхана һәм йоҡо бүлмәләре. Унда үҙе ағастан семәрләп эшләгән карауат, өҫтәлдәр, кресло-ултырғыстар ҡуйылған. Өйҙәң стеналарында ағастан семәрләп эшләнгән төрлө йыһаздар урын алған. Шулай итеп, төрлө һөнәр эйәһе булған Рәсәй батшаһы сабата үреүселәргә ҙур баһа биреп ҡалдырған...

1941 йылда, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, сабата ил кимәлендә көнүҙәк мәсьәләгә әйләнеп китә. Һуғыштың тәүге көндәрендә һалдаттарҙы кейендерергә аяҡ кейемдәре етешмәй, уны тегергә илдә күн юҡ хәлендә. Ошондай ауыр осорҙа фронттарҙағы 5,7 миллион һалдатты аяҡ кейеме менән тәьмин итеү өсөн ил етәкселеге йәшерен бойороҡ менән сабата үреү әртилдәре аса башлай. Ошо үтә лә ауыр ваҡытта химик Иван Плотников 1941 йылдың ноябрендә кирза тигән материал - күн алмаштырғысы - уйлап таба. Бының өсөн уға 100 мең һум күләмендә Сталин премияһы бирәләр. Ошо ваҡыттан башлап һалдаттарыбыҙға кирза итеге тегеп кейҙерә башлайҙар (халыҡ телендә "кирзуха"). Һуғыштан һуң кирза итекте ҡала һәм ауылдарҙа ла илебеҙҙең бер нисә быуын кешеләре кейеп үҫте. Кирза итеге етештерә башлағансы, һуғыштың тәүге көндәрендә һалдаттарыбыҙҙың күптәре дошманға ҡаршы сабата кейеп һуғышырға мәжбүр булды. Быныһы һуғыш яландарындағы хәлдәр. Ә тылда һуғышҡа тиклем алып кейеп йөрөгән аяҡ кейемдәре туҙып бөтә, баҙарҙа һәм магазиндарҙа улар бөтөнләй һатылмай.

1943 йылда 4-се синыфты тамамлағас, күрше ауылға уҡырға барырға мөмкинлек булмағас, мин колхозда эшләй башланым. Бикбирҙе ауылы халҡы бөтәһе лә сабата кейеп йөрөй, унһыһы ла етешмәй ине. Ауылда ике генә кеше сабата үрә белә: Ильясов Яңғолай һәм Әлмөхәмәтов Ҡужәхмәт олатайҙар. Иҫәнғолға баҙарға барһаң, баҙарҙың яртыһы сабата һата, тик уны һатып алырға аҡса юҡ. Аҡса булмағас, бер пар сабатаның хаҡын бер ҡаҙаҡ (400 грамм) һыйыр майына йәки 10 тауыҡ йомортҡаһына ярашлы ҡуйырҙар ине. Бер генә һыйырҙың иретелгән 16 килограмм майын йыл да хөкүмәткә тапшырып торабыҙ, сабата һатып алыуға арттырып булмай. Ә тауыҡ аҫрау түгел, үҙебеҙ аслыҡтан йонсойбоҙ. Ошондай ауыр ваҡытта мин үҙем сабата үреп өйрәнергә булдым һәм Яңғолай олатайға барҙым. Ул бер генә мәртәбә үреп күрһәткәндән һуң, нығыша торғас, ярайһы ғына үрә башланым. Иң тәүҙә үҙемә, һуңынан әсәйемә үреп бирҙем. Икенсе йылына хәтта үҙемдән арттырып һата ла башланым. Тәүҙә мин тик урыҫ сабатаһы ғына үрә белә инем, ә һуңынан татар, сыуаш, ҡата сабаталарын да үреп өйрәндем. Һуғыш тамамланғас та сабата беҙҙең быуынға хеҙмәт итеүен дауам итте. Мин тик 1947 йылда, 16 йәшемдә, Үрген урта мәктәбенең 5-се синыфына уҡырға барҙым. 10-сы синыфты сабата кейеп тамамланым һәм армияға ла сабатала оҙатылдым.

Тарихи яҙмаларҙан сығып, өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: беҙҙең ата-бабаларыбыҙ борон-борондан бер ваҡытта ла сабата үреп кеймәгән. Башҡорттар төрлө өй һәм ҡыр хайуандарының тиреһенән ыҫлап күн эшкәртеп, сарыҡ, итек, ситек һәм ҡата тегеп кейгәндәр. Сабата Башҡортостан еренә иң тәүҙә 1552 йылда, урыҫ батшаһы Иван Грозный Ҡаҙанды баҫып алғас, сукындырылған татарҙар менән "килә". 1554 - 1558 йылдарҙа башҡорт ырыуҙары Рәсәйгә ҡушыла башлағас, урыҫ заводчиктары башҡорттарҙың ерен тартып алып, заводтар төҙөй башлай. Мәҫәлән, 1702 йылда Демидов Уралда завод төҙөп, үҙенең 38 мең крепостной крәҫтиәнен алып килеп эшкә ҡуша һәм башҡорт ерендә урыҫ һәм сыуаш сабаталары барлыҡҡа килә. Шул осорҙан бирле беҙҙең "Сабата туҙһын - ваҡыт уҙһын", "Башҡорт байыҡһа, сабатаһын түргә элә", тигән әйтемдәребеҙ барлыҡҡа килгән.

...Кәйефем булғанда әле лә ҡыҙыҡһынған кешеләргә сувенир сабаталар үреп биргеләйем.

**Ҡасим ЯНБАЕВ.**
**Ейәнсура районы**
**Үрге Бикбирҙе ауылы.**

ДӨРӨҪ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

# ТУҒАНЛЫҠ ТЕРМИНДАРЫ

**"Был минең бер туған ҡустым", "Ул минә ике туған апай", "Мин уға өс туған ағайым" тигәнде йыш ишетәбеҙ. Миненсә, был рус теленән туранан-тура "двоюродный, троюродный, четвероюродный" тигән һүҙҙәрҙең тәржемә аша беҙҙең башҡорт теленә күскән варианттары.**

Мин үҙем бала саҡтан ике туған, өс туған, дүрт туған тигәнде белмәнем. Әсәйем ошолай өйрәтте:

- **Бер туған** - бер ата, бер әсәнән тыуған балалар (әсәйем бер туғандарҙы имсәктәш тип тә әйтә торғайны).
- **Аталаш туған** - бер ата, бер әсәнән тыуғандарҙың балалары.

Мәҫәлән, беҙҙең улыбыҙ Иҙел, ҡыҙыбыҙ Лилиә иремдең бер туған ҡустыһы Радмир ҡәйнешемдең балалары менән - аталаш туғандар.

- **Олаталаш туған** - бер ата, бер әсәнән тыуғандарҙың ейәндәре. Мәҫәлән, минең ейәнем Илхан менән һеңлемдең ейәнсәре Амелия олаталаш туғандар.
- **Ҡарт аталаш туған** - бер ата, бер әсәнән тыуғандарҙың ейәндәренең балалары, йәғни, бүләләре (әйткәндәй, беҙҙең яҡта элек бүлә, бүләсәр һүҙҙәре нинәлер ҡулланылманы).
- **Бабалаш туған** - бер ата, бер әсәнән тыуғандарҙың бүләләренең балалары үҙ-ара бабалаш туған була.
- **Әҡрәбәләр** - алтынсы, етенсе быуын туғандар.

Был туғанлыҡ терминдары ир туғанына ла, ҡатын туғанына ла берҙәй ҡағыла. Беҙҙең был атамаларыбыҙҙы мин Баймаҡ районының Әмин, Ишей, Байым ауылдарында ишетеп үҫтем. Һәм ошо мәғлүмәт менән уртаҡлашҡым килде. Бәлки, кемгәләр кәрәге тейер.

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**

✓ *Уларҙың боронғо йырҙары иҫ киткес үҙенсәлекле, хатта уны музыка тормошонда ҙур яңылыҡ итеп иҫәпләргә лә була. Уларҙың йырҙарында ата-бабаларының батырлыҡтарына һоҡланыу сағыла.*



*ТАРИХИ СЫҒАНАҠ*

# БАШҠОРТТАР

Пермдә һәм Көңгөр өйәҙендә урындағы Ҡаҙан татарҙары араһында ике ҙур булмаған башҡорт өйәҙе бар. Мәсеттәренең һәндерәләре һәм иҙәндәре кейеҙ менән (бик һирәктәренең генә келәм менән) ҡапланған. Бөтә йортта ла ағас баҫҡыстар, орлоҡтарҙы эшкәртергә тирмәнде алмаштырыусы киле осрай. Ҡайһы бер боронғо ауылдарҙа һыу тирмәне лә була. Бындай тирмәндәрҙе хатта шишмәләр ҙә әйләндерә алған. Улар һыуҙы быуып, бейектән тирмән тәгәрмәсенә ағып төшөрлөк итеп эшләгән. Шуға күрә, һыуҙың көсө тирмәнде әйләндерерлек хәлгә арткан. Ҡайһы ауылда һыу тирмәне юҡ, ундағы башҡорттар ҡул тирмәнен ҡулланған. Был тирмәнде ике имән түмәренән яһағандар. Ул тирмәндең бер-береһе менән ышҡылған уртаһына суйын киҫәктәре ҡаҡҡандар. Аҫҡы өлөшөнә ҡаҙаҡ ҡағып, өҫкө өлөшөн кейҙереп ҡуялар. Уртаһына тишек уйып, шунда орлоҡ һалыр өсөн уйым яһайҙар. Ә тирмәндең өҫкө өлөшөнә тотоп өйрөлтөр өсөн тотҡа формаһында ҡаҙаҡ ҡағыла. Тирмәнде ашъяулыҡҡа ултырталар ҙа, өҫкө өлөшөндәге уйымға орлоҡ һалып, әкрен генә өйрөлтәләр, уртаһынан ҡойолғанын алып иләйҙәр. Аҫҡа оно төшә, ә өҫтә кәбәге ҡала.

Башҡорттарҙың төп шөғөлө - малсылыҡ. Ләкин, бынан тыш, улар ер эшкәртеү, һунарсылыҡ, ҡортсолоҡ, еләк-емеш йыйыу менән дә шөғөлләнә. Улар үҙҙәренең байлығын малдарының күплеге менән иҫәпләй. Һәр береһе көтөү-көтөү мал тота. Бигерәк тә йылҡы малын йыш ҡына сеймал урынына ла файҙаланғандар. Итен, һөтөн киң ҡулланғандар, тиреһенән төрлө кейем, һауыт-һаба текһәләр, ялынан, ҡойроғонан арҡан ишкәндәр. Ярлы башҡорттарҙың һарыҡтарының һаны иң байҙарының йылҡы һанына тиң, хатта, ҡайһы саҡта, күберәк тә булған. Эре малды байыраҡтар, ә кәзә көтөүен һәр береһе тиерлек тотҡан. Ҡайһы берҙәре хатта бер-нисә дөйә лә аҫыраған. Сусҡаны хәрәм тип, ә йорт ҡоштарын ҡышты ауыр сыға тип аҫырамағандар. Иң ярлы иҫәпләнгән башҡорттоң да көткән йылҡыһы илле, утыҙҙан кәм булмаған. Күптәре биш йөҙ, байыраҡтары меңгә саҡлы, иң байҙары ике меңгә тиклем һәм унан да күберәк йылҡы һәм башҡа төрлө мал көткән. Улар малсылыҡ менән генә туҡталып ҡалмаған, ҡортсолоҡ менән дә шөғөлләнгән. Һәр береһенең бер-нисәнән алып, өсәр, дүртәр, бишәр йөҙ умартаһы булған.

Башҡорттар малдарына ҡышын ашарға һалырға тырышмаған. Уларҙы ҡырға тибенлеккә сығарғандар. Ябыҡ, көсһөҙ малдарға ғына тәүҙә аяҡҡа баҫып киткәнсе ашатҡандар. Хатта дөйәләрҙе лә сепрәктәр менән йылыраҡ итеп урап, тибенлеккә сығарғандар. Яҙға ҡарай малдар ныҡ ябыҡҡан, йонсоған. Ҡайһылары аслыҡтан ҡырылған, кейек-януарға ла табыш булған. Өйөр малдары ла быға күнегеп бөткән. Улар бергә генә йөрөй, иң көсһөҙҙәрен дә ташлап китмәгән. Шуға күрә мал-тыуар йәйен генә ҡолонлаған, быҙаулаған һәм бәрәсләгән. Башҡорттар шуны ла белгән: көнө буйы инәһен имеп йөрөгән мал ҡышты ауыр үткәргән. Улар инәләрен генә имеп йөрөгән малдың яҡшылап ашамауын белгән. Шуға ла уларҙы төнгөлөккә генә инәләренә ҡушҡандар.

Башҡортостанда игенселек менән шөғөлләнеү өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Ер уңдырышлы. Ләкин был шөғөл башҡорттар араһында әле яҡшылап таралмаған. Улар икмәкте ул тиклем үк кәрәкле тип тапмай. Бер-нисә ғаилә берләшеп, игенселек менән шөғөлләнгән осраҡ та бар. Әммә улар ун дисәтинә ерҙән артығын эшкәртмәй. Йыйып алынған көлтәләрҙе, бохаралар кеүек, атта һыбай килеш тапатып һуҡтыралар.

Һунарға ла күптәре күңел өсөн генә сыға. Һунарға үҙҙәренең өй эттәре, өйрәтелгән бөркөттәре, тоҙаҡ һәм башҡа әллә ниндәй ҡоралдар менән йөрөйҙәр.

Бында ер аҫты байлыҡтары күп. Ләкин урындағы халыҡ уны яҡшылап эшкәртә белмәй. Ҡайһылары тимер, баҡыр рудаларын йыйып, яҡынтирәләге заводтарға тапшырып, аҡса эшләй. Пермдә башҡорттар баҡыр рудаһы табыу өсөн ҡоролмалар төҙөй. Унда табылған руда заводтарға оҙатыла. Тик бер башҡорт та был рудникта эшләмәй. Уларға был эштә эшләргә ғорурлыҡтары ҡушмай. Руданы заводтарға ташып ҡына аҡса эшләйҙәр.

Башҡорттар, Ислам дине ҡушыуынса, хәләл ризыҡ менән генә туҡлана. Ҡышын мал-тыуар ябығып, хәлһеҙләнә башлаһа, алдан әҙерләгән ҡорот, май, киптерелгән ит, тоҙло балыҡ, йә булмаһа, хәлһеҙләнгән малдарын һуйып ашайҙар. Ер эшкәртеү менән шөғөлләнгәндәр бутҡа, ондан бешерелгән ризыҡтар менән туҡлана. Яҙға тиклем туҡлыҡһыҙ ризыҡтарҙан бер аҙ ябығалар, ләкин яҙ етеү менән йәйләүҙәргә сығалар, кәйефтәре күрәйә, күңелдәре күтәренке була. Ҡайһылары сәсеү эшен бөтмәйенсә, ҡырға сыҡмай, тоҡҡарлыҡланып тора. Яҙын бөтәһе лә ҡайын һуты эсә. Саҡ ҡына үлән сыға башлау менән һөт ризыҡтары әҙерләй башлайҙар. Ҡышҡылыҡтан бик һирәктәренең генә ашамлыҡ запастары ҡала.

Улар әсегән һөттән, һыйырҙыҡынан һәм һарыҡтыҡынан, айран яһайҙар, ә йылҡынынан ҡымыҙ бешәләр. Айран эшләү өсөн ҡайнатылған һөттө ҡатыҡҡа ҡушалар. Шунан ул әсеп, айранға әйләнә. Һөттөң ҡаймағын айырып алғас, ҡалғанынан эремсек, ҡорот әҙерләйҙәр. Һарҡып сыҡҡан һөттө эркет тиҙәр. Ҡаймаҡтан май бешәләр. Дөйә һәм бейә һөтөнән ҡымыҙ ғына яһайҙар. Был һөт ҡуйы булмағанға күрә, май яһамайҙар. Ҡымыҙҙары әскелтем тәмле, эскәндә ләззәт бирә. Был эсемлек туҡлыҡлы ғына түгел, хатта шифалы ла. Шуға ла башҡорттар һау-сәләмәт, мыҡты халыҡ. Ҡайһы бер йәйҙең эҫе көндәрендә ҡымыҙҙан аҙ ғына ҡыҙмаса булған башҡорттарҙы ла осратырға мөмкин. Бигерәк йомарт, ҡунаҡсыл халыҡ. Ашар алдынан һәм ашағандан һуң Хоҙайға рәхмәт уҡып, доға ҡылалар.

Башҡорттар ашауға таһыллы халыҡ. Бер ҡунаҡ булғанда ун биш фунтлап ит ашайҙар. Бер биҙрә ҡымыҙҙы бер табында ултырғанда ла эсеп бөтәләр. Ҡунаҡ улар өсөн изге кеше. Хатта ҡайһы саҡ ҡунаҡҡа иң яратҡан аттарын да биреп ҡайтаралар.

Арбалар киң таралмаған, сөнки ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа һыбай йөрөүҙе хуп күрә. Ҡатын-ҡыҙҙың эйәре йомшаҡ һәм ҡупшылығы менән айырылып тора. Һәр тирмә янында һәр ваҡыт бер булһа ла эйәрләнгән ат тора. Йыш һыбай йөрөгәнлектән, ир-аттың аяҡтары кәкерерәк.

Ололарға айырыуса хөрмәт күрһәтелә. Ҡарттарға, аҡ һаҡаллыларға изгеләргә ҡараған кеүек ҡарайҙар. Ситтән ҡунаҡ килһә, иң беренсе аҡһаҡалдарын саҡырып, түргә ултырталар. Милли байрамдарҙа, мәҫәлән, ҡорбан байрамында, оло кеше, ҡунаҡ булһа ла, табындың хужаһы итеп тәғәйенләнә.

Күп башҡорттоң икешәр ҡатыны бар. Унан артығырағы - бик һирәк күренеш. Кәләш алғанда ҡалымды ун биштән ике йөҙгә тиклем йылҡы менән бирәләр. Һыйыр малы, һарыҡтар был осраҡта иҫәпкә инмәй. Туйҙан һуң ошо малдарҙың күбеһе кәләштең бирнәһе менән бергә кире әйләнеп ҡайта. Туйҙар йәй көнө, ризыҡ, ҡымыҙ мул мәлдә үткәрелә. Бының өсөн йылҡы малын салалар. Никахтың икенсе көнөндә йәш ғаилә ағзалары бүләккә энә, еп, ҡулъяулыҡ кеүек бүләктәр тарата. Байрам ваҡытында аттарҙа сабышыу, уҡтан атып, мәргәнлектә һынашыу кеүек ярыштар киң таралған. Улар думбырала ғына түгел, үләндән яһалған ҡурайҙа ла оҫта уйнай, хатта уға өҫтәп, тамаҡ төбөнән ғыжылдатып үҙенсәлекле көй сығаралар. Уларҙың боронғо йырҙары иҫ киткес үҙенсәлекле, хатта уны музыка тормошонда ҙур яңылыҡ итеп иҫәпләргә лә була. Уларҙың йырҙарында тыуған илде данлау,



ата-бабаларының батырлыҡтарына һоҡланыу сағыла. Йәш кәләш иренең тирмәһенә керер алдынан, ата-әсәһенә рәхмәтен белдереп, сеңләп илай. Уға ата йортонан мал йә башҡа кәрәк-яраҡ бирелә. Туғандарының тирмәһен ҡалдырып китерҙән алда ҡымыҙ һауытына рәхмәттәр әйтеп, бәләкәй генә бүләк бәйләп ҡалдыра. Киленде бөтә ырыу менән күпмелер ара оҙата баралар, юлда ырыуҙаштары үҙҙәре менән алған ҡымыҙҙарын эсәләр.

Бала тыуғанда, Ислам динле башҡа милләттәр кеүек, йола үткәрәләр. Ерләү йолалары бигерәк үҙенсәлекле, улар үлгән кешене ерләргә һыбай алып бара. Ерләүселәр һәм мулла иң алдан һыбай төшә, уларҙың артынан ике ат араһына арҡан менән таҡта бәйләнә, уның өҫтөнә мәйетте һалып, оҙатыусылар арттараҡ оҙатып килә. Мулла доға ҡылғандан һуң, мәйет сыҡҡан тирмәләгеләр яҡынын ерләй, аҙаҡ төрлө ризыҡтар тарата.

Башҡорттар борондан динле халыҡ. Улар Ислам диненә ышана, ләкин уларға мәжүсилек күренештәре лә хас. Улар берәй хайуанды үлтерһә, уның бешерелгән итен ҡояшҡа ҡуйып, шамандар һымаҡ ниндәйҙер йола башҡара. Башҡорттарҙың хатта бер-нисә шайтан ҡыуыусыһы ла бар. Уларҙы "Шайтан күреүсе" тип йөрөтәләр. Башҡорттар һөйләүенсә, был кешеләр ендәрҙе күрә, уларға уҡтан ата, ҡылыс менән һелтәнә, таяҡтар менән туҡмай, һаҙлыҡтарға тиклеп ҡыуалай, яралай, ҡайһы саҡта үлтерә лә. Был халыҡ артыштың ен-пәрейҙе ҡыуалай торған көсөнә ышана. Үҙҙәре тылсымдан ҡурҡалар, ә үҙҙәренең үткәндәрҙе, киләсәкте һ.б. күрә белгән күрәҙәселәре бар. Ҡайҙа бал ҡорто тоталар, шул урынға аттың баш һөйәген элеп ҡуялар. Сирле һаташһа, йә булмаһа, ауырыу ҡатынды тулғаҡ тотһа, мулла таяғы менән шайтандарҙы ҡыуа, туҡмай, Ҡөрьән сүрәләрен уҡып, төкөрөнә. Ауырыуҙың хәле еңеләйгәс, яңынан ен эйәләшмәһен өсөн, ниндәйҙер үлән тегелгән тирене уның муйынына эләләр.

Һабансылар байрамы булған Һабантуй үҙенә күрә ҙур ғына сара булып тора. Башҡорттар үҙҙәре яҡшылап ер эше менән шөғөлләнмәһә лә, был байрамда ихлас ҡатнаша.

**Иоганн Готлиб ГЕОРГИ.**

**(Аҙағы. Башы 3-сө һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-һинд-иран концепцияһы

Ҡайһы бер ғалимдар үҙҙәренең хеҙмәттәрендә иран телле сармат-савроматтарҙың ювелир изделиелар яһауға маһирлығы хаҡында яҙа. Тап шуның өсөн дә Пермь крайының Шырҙан музейында урын алған Уралдың төньяҡ-көнбайышында яһалған алтын, көмөш биҙәүестәр, һауыт-һаба "Ирандыҡы" тип тәҡдим ителә. Ҡайһы бер авторҙар табылған әйберҙәрҙе "Ирандыҡы" тип атап ҡына ҡалмай, барҙы ҡәбиләһен Иран сығышлы тип атап, Урта Азия халҡына индерә. М. З. Зәкиев фекеренсә, бардалар/пардалар/, пардылар/парфылар/порфяндар - бер үк халыҡты тәшкил итә. Шулай итеп, академик халыҡтарҙы бергә ҡушырға маташа.

Ҡайһы бер ғалимдар төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандағы башҡорт ҡәбиләләре составында көн итеүсе барҙы башҡорт ҡәбиләһе шул уҡ парфяндар булған, тип раҫларға тырыша. Быға фарсыларҙың һөйләш теле йәғни көнсығыш Иран диалектының башҡорт һәм болғар телдәре менән бөтөнләй уртаҡлығы булмауы ҡаршы килә. Мәҫәлән, белгестәр әйтеүенсә, төрки телдәр "үҙгәрештәргә бирелмәүе" менән айырылып тора, бер мең йылда ул телдәрҙең 5-7 процент һүҙҙәре генә иҫкерә. Был сифатты беҙ башҡорт теленә ҡарата ла әйтә алабыҙ. Тик боронғо телдәргә генә ошондай һирәк сифат хас. Шулай итеп, беҙ барҙы ҡәбиләһенең парфяндар менән һис ниндәй уртаҡлығы булмауы хаҡында ышаныслы итеп әйтә алабыҙ.

Халыҡ ижадына һалынған хеҙмәт һөҙөмтәләрен үҙләштереү, төрки телле төньяҡ халыҡтары: башҡорттар, шул иҫәптән ғәйнәләр һәм болғарҙар барлыҡҡа килтергән сәнғәт өлгөләрен үҙенеке тип иғлан итеү, шул уҡ ваҡытта төп халыҡ һаналған барҙыларҙы парфяндарға индереү - был осраҡлы рәүештә генә башҡарылмай. Дөйөм алғанда, донъя тарихы ағышына йоғонто яһай алырлыҡ, илдең сәйәси тормошонда хәл иткес роль уйнарлыҡ тарихи факттар һәм халыҡтарҙың мәҙәни мираҫы менән планлы рәүештә һәм тәрән уйланылған манипуляция үткәрелеүе хаҡында фекер тыуа. Таныш булмаған ҡалаларҙың меңәр йыллыҡ емереклектәре, бай ҡәберлектәр төрки халыҡтарҙың бөйөк тарихының өнһөҙ шаһиттары. Бындай тарихи байлыҡты Рәсәйҙең башҡалаһы Санкт-Петрбургта Тау институты аҫҡан, мәғдәнселектең бар серҙәрен белгән, тимер изделиеларын яһауҙа яңы технологиялар индергән башҡорттарҙыҡы тип таныуға ҡарағанда, уларҙы "һинд-ирандарҙыҡы" тип атау күпкә еңелерәк.

**(Дауамы бар).**

***✓ Шуға күрә, бөгөнгө ҡыҙыҡһыныуҙарыма нигеҙ ғаиләбеҙ ағзаларының тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашынан, туризмға, әүҙем спортҡа һөйөүҙән һалынды, тип ышаныслы әйтә алам.***



# УҢЫШЛЫ СӘЙӘХӘТ НИГЕҘЕ...

## юлдаштарҙың ышаныслы булыуында



**Буш ваҡытын һәр кем үҙенсә уҙғара. Телевизор тоҡандырып, диванда ҡырын ятып ялын уҙғарыусылар ҙа күп, сәйәхәт итергә яратыусылар ҙа һанап бөткөһөҙ. Өйҙә ял итергә яратыусылар ниндәй тәьҫораттар менән байыталыр күңелен, белмәйем, ә бына туристик походтарҙан күс туплап, тәбиғәттән энергия йыйып, һөйләп бөткөһөҙ мәғлүмәт туплап ҡайтыусылар һоҡландыра. Уларҙың һәр ваҡыт күҙҙәре янып тора, физик яҡтан ныҡтар, рухи сәләмәтлектәре лә күпкә юғары. Ә сәйәхәт барышында күргәндәрен һөйләй башлаһалар, ваҡыттың нисек үткәне лә һиҙелмәй. Нәҡ әүҙем туризм яратыусыларҙың объективтарынан һоҡланғыс фотолар барлыҡҡа килә, видеокамералары матур фильмдар тыуҙыра. Тәбиғәттең төрлө миҙгелендә лә сәйәхәткә сығып китеүселәрҙең ҡайһы берҙәре башҡаларға ла ошо "сирҙәрен" йоҡтороп, уларҙы үҙ рәтенә ала. Бөгөнгө әңгәмәсем нәҡ шундайҙарҙан - оҫта сәйәхәтсе, "Авантюра" туристик клубы етәксеһе, экстремаль ярыштар ойоштороусы Артур АЛАҠАЕВ.**

### Юлдар, юлдар мине саҡыра...

Өфөнөң Һупайлы биҫтәһендә, әүҙем тәҙөләш эштәре барған осорҙа үҫтем. Бала сағым тәҙөләш майҙандарында, яҡындағы йылғала һыу инеп, терәлеп торған урманды ҡыҙырып үтте. Мәктәптә уҡығанда атай-әсәйем йәйҙәрен ике аҙналыҡ туристик походтарға ебәрә ине. Шулай уҡ ғаиләбеҙ менән дә йыш ҡына тәбиғәт ҡосағына сығыр инек. Тағы ла йыл һайын машинала Воронеж өлкәһендәге туғандарыбыҙға юлланабыҙ, юлда туктап, палаткалар ҡороп, ял итәбеҙ. Ошоларҙың барыһы ла тәбиғәткә ылығыуға сәбәпсе булғандыр. Өлкән кластарҙа иптәштәрем менән походтарға сығып китеүебеҙ ҙә атай-әсәйем тарафынан һәр саҡ хупланды. Шуға күрә, бөгөнгө ҡыҙыҡһыныуҙарыма нигеҙ ғаиләбеҙ ағзаларының тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашынан, туризмға, әүҙем спортҡа һөйөүҙән һалынды, тип ышаныслы әйтә алам.

Ғаилә ҡорғас та походтарға йөрөүҙән туҡтаманым. Минә юлдаш булып кәләшем дә урман-яландар ҡыҙырҙы. Башҡортостанды тулыһынса тиерлек урап сыҡҡас, Рәсәй төбәктәренә сығып киттем. Беренсе сәйәхәтем автомобилдә Рәсәйҙең "Аҡ ел" командаһы менән бергә Алтай, Тыва һәм Хакасия яҡтарына булдым. Үтеү ауырлығы буйынса туристик реестрҙа 5-се кимәл тип иҫәпләнгән маршрут 8036 саҡрым тәшкил итә. Был оҙайлы һәм ҡатмарлы сәйәхәттән уңышлы йөрөп ҡайтҡас, үҙемә ышаныс артты, тағы ла ҡатмарлыраҡ маршруттарға сыҡтым. Тәүге походым иң иҫтә ҡалғаны булһа, иң экстремаль сәйәхәтем тип Коми республикаһындағы Маньпупунёр геологик ҡомартҡыларына алып барған юлды иҫәпләйем. Был маршрут, үтеү ауырлығы буйынса, 6-сы категорияға ҡарай. Юл оҙайлығы Өфөнән тауға тиклем 2576 саҡрым. Уны беҙ 13 көн эсендә үттек. Өфөнән 2 машина сығып киттек, Мәскәүҙән беҙгә тағы ла 2 автомобиль ҡушылды.

Былтыр ике тапҡыр Ҡаҙағстанға барҙыҡ. Май айында илдең үҙәк һәм көньяғына, ә июлдә дала менән сүллеккә сәйәхәт ҡылдыҡ. Йәйҙең уртаһында, иң эҫе ваҡытта, сүллеккә сығып китеп, үҙебеҙҙе һынап ҡарау ине маҡсатыбыҙ. Ауырлыҡтарға бирешмәнек, иҫән-имен ҡайттыҡ. Шулай уҡ былтыр 4-се категория ҡатмарлыҡтағы маршрут менән тағы ла Алтайға барып ҡайттыҡ. Ғаиләм менән бер ай тирәһе Рәсәй буйлап сәйәхәт ҡылдыҡ - Магаданға тиклем барып боролдоҡ.

### Мобиль туризм

Походтарҙың төрө бик күп. Мин йәйәүле походтарға ла күп йөрөйөм, йылғалар буйлап байдаркаларҙа ла йөҙөп төшәм, шулай уҡ мәмерйәләр серен "сисеү" ҙә күңелемә яҡын. Тауҙарға артылыу ваҡыттары күп алғанға күрә, уның менән әллә ни ҡыҙыҡһынмаһам да, былтыр 1-се категория ҡатмарлыҡтағы Тағанай буйлап походҡа барҙым. Шулай ҙа иң оҡшағаны минә автомобиль туризмы. Был туризмдың 6 төр ҡатмарлыҡтағы категорияһы бар. Машинала сәйәхәт иткәндә һин үҙеңә үҙең хужа. Барасаҡ маршрутты һайлау, ҡасан туктап ял итеү, ниндәй иҫтәлекле урындарҙы ҡарау, ниндәй тиҙлектә барыу - ғөмүмән, барыһы ла үҙеңдең ҡулыңда. Автомобиль менән тиҙ йөрөү мөмкинлеге лә уға өҫтөнлөк бирә, һин башҡа транспорт кеүек расписаниеға бәйле түгелһең. Автомобиль туризмы һәр саҡ хәрәкәттә булыу, тимәк, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бик күп урындарҙы күреү тигән һүҙ. "Тимер атта" сәйәхәт иткәндә алдағы көнгә аныҡ ҡына план ҡороу файҙаһыҙ, сөнки аҙым һайын бихисап көтөлмәгәнлек һағалай. Ошо яғы менән дә ылыҡтыра автотуризм.

### Өфө - Маньпупунёр - Өфө

Әлеге маршрут нигеҙендә автомобиль туризмының үҙенсәлектәрен һөйләп үткем килә. Унда барырға теләүселәргә пособие рәүешендә лә булыр әйткәндәрем. Походҡа әҙерлек бер йыл дауамында барҙы. Беҙ машиналарҙы тәҙөкләндерҙек, ошо юлды үтеүселәрҙең видео һәм фото отчеттарын өйрәндек, улар менән осрашып һөйләштек, экипаж туплаҡ, аҙыҡ-түлек барланыҡ, кейемдәр әҙерләнек. Шулай уҡ Печора-Илыч ҡурсаулығына һәм "Ивдель" ландшафт ҡурсаулығына пропускттар эшләтеү ҙә күп ваҡытты алды. Был ҡурсаулыҡтарға әләгергә теләүселәр күп булғанлыҡтан, пропуск эшләтеү өсөн заказды алдан бирергә кәрәк, сөнки йәйгә улар бөтә. Машиналарҙың тәҙөклөгөн ныҡ тикшереү мөһим. Бының кеүек алыҫ арағa сығыр алдынан ташлы, юлһыҙ ерҙә, тәрән һыуҙа бер нисә тапҡыр тест үткәреп, асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк. Шулай уҡ запас частар тураһында ла онотоpға ярамай. Бигерәк тә машинаны тарттырыу өсөн лебедка, кисеүҙе үткәндә двигатель һыу аҫтында эшләһен өсөн махсус "тын алыу трубкаһы" - шноркель, зарядланған аккумулятор, әйберҙәрҙе һалыу өсөн экспедицион багажник, трансмиссия, подшипник, сальниктар мотлаҡ кәрәк буласаҡ. Тағы ла "юлһыҙ" юлда машина ҡырына ятмаһын өсөн автомобилгә махсус ҡоролма - "күс тупһаһы" ("силовые пороги") - мотлаҡ ҡуйырға кәрәк. Улар ҡоростан эшләнә һәм автомобиль рамына беркетелә. Тау-таштан йөрөгәндә тәгәрмәстәр тишелеп кенә ҡалмай, ә хатта йыртылып китә. Шул уҡ урында уны ямап тороп булмай, шуға күрә запас тәгәрмәсте бәрәү генә түгел, ә икәү алырға кәрәк. Төрлө техник шыйыҡсалар, тормоз ҡалыптары (тормозные колодки) һалып алыу ҙа ҡамасау итмәҫ. Беҙ һәр кисеүҙе сыҡҡан һайын майҙарҙы алыштырҙыҡ, двигатель ныҡ ҡыҙғанда антифриз өҫтәп ҡойҙоҡ, тормоз шыйыҡсаһын да йыш өҫтәп ҡойҙоҡ, йә тулыһынса яңырттыҡ.

Алыҫ һәм ауыр маршрутҡа сыҡҡанда иғтибарға лайыҡ тағы ла бер мөһим фактор - экипаждағы кешеләрҙең һаулығы. Ниндәй сәйәхәттә лә кемдер ауырып китергә йәки йәрәхәтләнергә мөмкин, шуға күрә ҡул аҫтында кәрәкле бөтә медикаменттар ҙа булырға тейеш. Ҡулға ниндәй дарыу эләгә шул һалынған аптечка бөтөнләй бармай. Бында медицина өлкәһендә эшләүсе һәм үҙе лә туризм менән ҡыҙыҡһыныусы белгестең кәңәшенә ҡолаҡ һалырға кәрәк. Беҙҙең экспедиция ваҡытында һыуыҡ тейҙереү ҙә, ағыуланыу ҙа, йөрәк ауыртыу осрағы ла булды. Дөрөҫ комплектланған аптечка ярҙамында улар ауыр эҙемтәләргә килтермәне. Дөйөм бер аптечка менән бер рәттән, хроник ауырыу менән интегеүселәр үҙҙәренә махсус препараттар менән тулыландырылған айырым аптечка ла алырға тейеш. Юлға сығыр алдынан уҡ кемдең ниндәй дарыуға аллергия икәнен асыҡлау фарыз. Әгәр ҙә ныҡ бейектә "тау ауырыуы" башланһа, тиҙ генә түбән төшөү генә ауырыуҙың хәлен еңеләйтәсәк. Шуға күрә, алыҫ экспедицияға сығыр алдынан һәр кем үҙ төбәгендәге бейек тауға күтәрелеп ҡараһа, яҡшыраҡ.

Аҙыҡ-түлек тураһында ла алдан ҡайғыртыу урынлы. Беҙ бер айға етерлек ашамлыҡ алдыҡ, сөнки оҙайлы ваҡыт цивилизациянан алыҫта булырға тура килерен белдек. Шулай уҡ урманда машина ныҡлы ҡыйраған осраҡта уны йүнәтеү ҙә оҙаҡ ваҡытты алырға мөмкин. Бөтә был моменттарҙы ла күҙ уңында тоторға кәрәк. Ашау тәртибен дә алдан планлаштырҙыҡ. Беҙ, мәҫәлән, көнөнә ике тапҡыр - иртәнге һәм киске ашты - яҡшылап ашаныҡ, ә ҡапҡылап алыу өсөн туктап торманыҡ, сөнки һәр туктау оҙаҡ ваҡытты ала.

### Төркөм психологияһы

Күп кешене үҙенә туплаған походтарға йөрөргә яратам. Эш бында сәйәхәт барышында килеп тыуған ниндәйҙер техник ҡыйынлыҡтарҙы төркөм менән еңелерәк үтеү мөмкинлегендә лә түгел. Төркөмдөң психологияһын аңларға тырышыу, теге йәки был ситуацияла кешенең үҙен нисек тотоуын күҙәтеү оҡшай. Походта кеше яңы шарттар менән осраша. Ундағы ҡатмарлы шарттар, төрлө хәлдәр, физик көсөргәнешлек, өйрәнелгән йәшәү ритмының үҙгәреүе, оҙайлы ваҡыт бер үк кешеләр менән аралашыу - барыһы ла кешене икенсе яҡтан аса. Хатта берәүе көнлөк походҡа сыҡҡанда ла, өйрәнелмәгән шарттарҙа, кеше юғалып ҡалырға мөмкин. Бындай осраҡта ваҡытында уның хәлен күрергә, аңларға һәм ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәк. Әгәр ҙә ниндәйҙер хәл килеп тыуған осраҡта командалағы бер генә кеше "һыңһа" ла, бөтә төркөмгә ауырға тура киләсәк. Планлаштырылған ваҡыт эсендә улар барыһы бергә бер бөтөндө тәшкил итә һәм сәйәхәт аҙағынаса ошо бөтөнлөк юғалмаҫҡа тейеш. Ә оҙайлы ваҡытҡа сығып киткәндә яныңдағы кешеләрҙе ныҡ һайлап алыу уңышлы сәйәхәттең иң мөһим шарты. Ныҡ әҙерлекһеҙ, етерлек тәжрибәһе булмаған йәки конфликтлы кешене походҡа алып сыҡмау хәйерле. Һәр төркөмдә лә, ҡатнашыусылар ни тиклем етди һайлап алынмаһын, барыһынан да көсһөҙөрәге була. Яҡшы төркөм ундайҙарға һәр саҡ ярҙам итә, ләкин шул уҡ ваҡытта уның көсһөҙлөгөнә баҫым яһамай.

Поход һәйбәт үтһен өсөн, етәксе менән риза булмаған хәлдә лә, уның ҡарарҙарын мотлаҡ үтәү кәрәк. Ләкин етәксе үҙен өҫтөн ҡуйып, талапсан тауыш менән бойороҡтар "яуҙыра" башлаһа, төркөм эсендәге климат сәләмәт булмаясаҡ, шуға ла уға алтын урталыҡты һаҡларға кәрәк. Шулай уҡ төркөмдә килеп тыуған сетерекле мәсьәләләрҙе тиҙ генә хәл итә, ығы-зығыларҙы йәйлап ебәрә алыусы аралашыусан бер кешенең булыуы ла походтан яҡшы тәьҫораттар менән ҡайтырға мөмкинлек бирәсәк.

Һәйбәт төркөмдә барыһы ла үҙенең нимә өсөн яуап биргәнлеген яҡшы аңлай һәм бойороҡ, киҫәтеү көтмәйенсә, шуны эшләй. Төркөмдә берҙәмлек, мөнәсәбәттәрҙең тотороҡлоғо йәйлап барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә ҡуйылған маҡсатҡа берҙәм ынтылыш, бер-береңә ярҙам, ихтыяр көсө булмаһа, сәйәхәттең һуңғы нөктәһенә барып етеү бик икеле. Шуға күрә, оҙайлы юлға сыҡҡанда юлдаштарҙы ныҡ һайларға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Психологтар фекеренсә, сәйәхәт итеү бик файҙалы. Сәйәхәт яратыусылар план төҙөргә өйрәнә, башҡа кешеләр менән тығыҙ бәйләнештә булыу һәм үҙ-үҙеңде ҡулда тотоу оҫталығына төшөнә, үҙҙәренең рухи ҡиммәттәрен яңынан ҡарап сыға, аралашыуҙа булған ҡыйынлыҡтарҙы аңлы рәүештә ҡабул итә. Тәбиғәтте яратыу, унда үҙеңде әҙәпле тоторға өйрәнеү өсөн дә сәйәхәттәр ҡылырға кәрәк. Тынысландырыу, төрлө борсоған уйҙарҙы бер тәртипкә һалыу өсөн дә иң шәп терапия - сәйәхәткә сығып китеү. Ул бер көнлөкмө, әллә бернисә аҙнағa һуҙыламы, уныһы мөһим түгел. Тик бер тапҡыр сәйәхәт "тәмен" татыған кеше унан башҡаса айырылмай. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ менән әңгәмә ошо асылды тағы ла нығытты. Гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында ла барҙыр сәйәхәттәр яратыусылар. Тәьҫораттарығыҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине.**

Гөлназ МАНАПОВА
әңгәмәләште.

✓ *Беҙ яратыуыбыҙҙы ла ҡысҡырып әйтергә тартындыҡ. Ә йәшерен хис һәр саҡ саф, изге, яҡты була. Бөгөн йәштәр яратыуын бер-береһенә генә түгел, башҡалар алдында ла ярып һала.*



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Бөтә эшмәкәрлекте техникаға "тапшырып" бөтөп барабыҙ. Ҡулдан эшләнгән әйберҙәргә музейҙарҙа ҡарап һоҡланабыҙ, бик кәрәкһә, берәр бөртөкләп кенә оҫталарҙан эшләтеп алабыҙ. Ә нәҡ ҡул оҫталығы һалынған әйберҙәр генә быуындан-быуынға күсә барып, айырым бер ғаиләнең тарихында үҙ урынын ала. Ағастан йорт йыһаздары эшләүселәрҙе лә, һис шикһеҙ, шулар рәтенә индерергә була. Әбйәлил районы Мораҡай ауылында йәшәүсе ағас оҫтаһы Фәнзил ТОҠОМБӘТОВтың эшләгән йорт йыһаздары ла күптәрҙең өй түрендә урын алған. Буш ваҡытын файҙалы уҙғарыу өсөн генә тотонған был шөғөлө хәҙер уның ятаҡан һәм килемле һөнәренә әйләнгән.**





# ТЕЛӘК ҺӘМ ЕЛКӘ КӘРӘК...



- Үҙем Ейәнсура яҡтарынан. Башланғыс синыфта уҡығанда Ҡужанаҡ ауылы мәктәбенең оҫтаханаһына йөрөп, ағастан төрлө әйберҙәр эшләргә өйрәндем. Күрекһеҙ генә ағастан сынъяһау йыһаздарҙың килеп сығыуы һоҡландыра ине. Юғары уҡыу йортон тамамлап, эшләй башлағас, яйлап, яратҡан шөғөлөмә кире ҡайттым һәм беренсе тапҡыр өйөмә өҫтәл эшләнем. Матур ғына килеп сыҡҡас, күңел ҡанатланып китте, бер-бер артлы тағы ла төрлө йыһаздар эшләп ҡуйҙым. Күрәбелә йөрөгәндәр яйлап заказ бирә башланы. Эш күбәйгән һайын, дәртлерәк тотонам, илһам тоҡана, ижадымдың һөҙөмтәһен тиҙерәк күргем килеүем темпымды ла арттыра. Һәр заказ биреүсе үҙенең өй интерьерына, биҙәлешенә, башҡа мебель төҫөнә ярашлы йыһаз эшләтә. Күптәр үҙҙәре үк һыҙмаһын да килтерә, ә ҡайһы берәүҙәр минең ҡарамаҡҡа ҡалдыра. Ағас эшендә минең өсөн иң ауыры - тейешле генә төҫтө "тотоп" алыу. Тиҙ генә эшләп бөтәм дә, төҫ һайлауға барып етһәм, бер урында тапана башлайым ҡайһы саҡта. Әлеге көндә "багажымда" йорт йыһаздарынан тыш, ишек, һандыҡ, гөл ултыртыу өсөн кәштә, сәғәт, балалар уйынсығы, баҫҡыс, сәңгелдәк, тәпән һәм башҡа әйберҙәр бар. Шулай уҡ ағасты көйҙөрөп, төрлө биҙәктәр һалып та әйберҙәр эшләйем. Исемлекте тағы ла арттырасаҡмын, сөнки ағастан әллә күпме матур нәмәләр эшләргә мөмкин.

Ағасты яратҡанда ғына уны "тыңлатырға" мөмкин. Әгәр ҙә бөтә ихласлығыңды биреп эшләмәһәң, бер нәмә лә килеп сыҡмай. Мин бигерәк тә ҡайын, имән, ҡарағай, уҫаҡ ағастары менән эш итергә яратам. Хәҙер сит илдә үҫкән әллә ниндәй ҡыйбатлы экзотик ағастарҙан йыһаздар эшләү модалы. Ағастан эшләнгән әйберҙе ҡарау еңелдән түгел, ә сит яҡтарҙан килтерелгән ағастан булғандары айырыуса ҙур иғтибар талап итә, сөнки температуралар төрлөлөгө уларға ыңғай яҡтан тәьҫир итмәй. Шуға күрә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән ағастарҙан етештерелгән йорт йыһазынан да яҡшыһы юҡ.

Баҙарҙа ДВП, фанеранан эшләнгән мебель күпләп һатыла, ләкин улар, беренсенән, сифат яғынан аҡһаһа, икенсенән, улар һаулыҡҡа зыян килтерергә лә мөмкин. Мәҫәлән, ошо материалдар ҡулланып етештерелгән мебель фенол һәм формальдегид кеүек зарарлы матдәләр бүлеп сығара. Улар иһә бауыр, бөйөр, баш мейеһе һәм йөрәккә насар тәьҫир итә. Үҙ һаулығына ҡул һелтәп ҡарамаған һәр кем осһоҙ, ләкин зарарлы йыһаздарҙан баш тартып, ҡыйбатыраҡ булһа ла, тәбиғи материалдан эшләнгәндәренә өҫтөнлөк бирә.

Ағас тере йән - ул үҫә, һыу эсә, тын ала, йыл миҙгеленә ҡарап үҙгәрә, япраҡтары асыла, ҡойола, үрсей һәм үлә. Уларҙың һәр береһенең үҙ "холҡо" бар. Бер үк төр ағастың да ҡайһыһы менәндер эш итеүе еңел, ә икенсеһе бер нисек тә баш "бирмәй". Шуға күрә, мәҫәлән, бер үк һыҙма буйынса, ләкин ике имәндән эшләнгән әйбер бер-береһенә оҡшамаясаҡ. Шулай уҡ йыһазды эшләгәндә ниндәй кәйефтә булыуың да сағылыш таба. Төрлө нескәлектәре күп ул ағас эшенең. Был өлкәлә эшләгән һәр оҫтаның үҙенә генә хас эшләү алымдары, серҙәре була һәм нәҡ ошо нескәлектәр уның йыһазын башҡаларҙыҡынан айырып тора. Әгәр ҙә эш башлағанда ижади ҡомары булмаһа, процесс ауыр бара. Шулай ҙа башлап китеүең генә көс, ҡулдар етеҙ эшләй башлай, һыҙмалар ҙа еңел уҡыла, хатта ыҙалай торғас, төҫтөң дә кәрәк кенәһен табып алаһың. Ғөмүмән, эшеңде ятаһаң, уны бар күңелеңде һалып башҡарһаң, барыһы ла уңышлы килеп сыға. Ә матур, сифатлы әйберҙең һатып алыусыһы ла табыла. Шуға күрә, һәр кем үҙенең шөғөлөн килемле итергә мөмкин. Килеп сыҡмаҫ, тип ҡурҡырға ярамай, башлап китһәң, тырышһаң, барыһын да тормошҡа ашырып була. Теләк һәм елкә кәрәк.

**Гүзәл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# БАШҠА ШУЛ УЛАР...

**?**

**"Һеҙ бөгөнгө йәштәрҙән көнләшәһегеҙме?" Шундай һорау менән үткән быуын йәштәренә - өлкәндәргә мөрәжәғәт иттек.**

***Зәһира ӘХТӘМОВА:*** "Бөгөнгө йәштәргә күп тә булһын, тиҙ ҙә булһын", тип, ҡайһы берәүҙәр уларҙың был принцибын өнәп бөтмәһә лә, мин быға ыңғай ҡарайым. Тиҙлек дәүеренең талабы шулай - кем өлгөрә, шул өлгәшә. Күпте талап иткән кеше - күпте маҡсат икән кеше. Барыһын да дәүләт, хөкүмәт, колхоз өсөн башҡарған, ҡара таңдан ҡара кискәсә уның өсөн бил бөккән элекке йәштәрҙең бөгөнгө ҡартлығы нисек һуң? Дәүләт беҙҙең өсөн ҡасандыр беҙ тырышҡанса тырышамы? Астан үлмәҫлек пенсияһына ла риза булып йәшәйбеҙ, ә хәҙерге системала тәрбиәләнгән йәштәр ошондай пенсияға шөкрана ҡылыр инеме? Талап итә белмәнек, башты баҫып эшләнек, шундай йәмғиәттә тәрбиәләндек, шуға күрә бөгөн дә шулай йәшәйбеҙ. Аҡсаһы ғына булһын, хәҙерге йәштәр өсөн мөмкинлектәр күп: үҙе тапҡан малына үҙе хужа була ала, теләгән эшен асып ебәреүе мөмкин. Ә беҙ артыҡ тауыҡ аҫыраһаҡ та, дәүләткә бишләтә түләнек. Ҡайҙа инде күпләп эре мал тотоп, фермерлыҡ менән шөғөлләнеү? Шундай мөмкинлектәребеҙ булһа, ҡартайған көнөбөҙҙә хөкүмәттең ике тин пенсияһына ҡарап, бармаҡ ялап ултырыр инекме ни? Шул хатабыҙ ҙа бар: үҙебеҙ совет осоро тәрбиәһендә үҫеү сәбәпле, күптәребеҙ балаларыбыҙҙы ла шул позицияла тәрбиәләргә тырыштыҡ. Мәҫәлән, аҡсаға ҡарата кире мөнәсәбәт белдерҙек. Һөҙөмтәлә, әлеге йәштәребеҙҙең күптәре үҙаллы аҡса эшләүгә яраҡһыҙ булып сыҡты. Нәҡ шундайҙар ҡырҡа үҙгәрешле заман эсендә аҙашып ҡала. Иҡтисади яҡтан алға киткән илдәрҙә ата-әсәләр баланы биләүҙән үк аҡса эшләргә өйрәтә, был алымды беҙҙекеләрҙең дә үҙләштереп алыуы һөйөндөрә. Көнләшмәйем, һөйөнәм мин бөгөнгө йәштәр өсөн!

***Сабир КӘРИМОВ:*** Хәҙерге йәштәр рухи-әхлаҡи йәһәттән беҙҙең быуындан күпкә ҡайтыш. Кешелеклелек, изгелек сифаттары түбән, булғаны ла аҡса менән иҫәпләнә. Әҙәп, оят тигәндәре иһә демократия килеп инеү менән сыҡты ла ҡасты илебеҙҙән. Тотанаҡһыҙ, йәмһеҙ ҡылана бөгөнгө йәштәр: транспортта, йәмәғәт урындарында ҡысҡырып һөйләшәләр, өлкәндәрҙән оялыу түгел, иғтибар ҙа итмәйҙәр, хатта ғәм алдында һүгенәләр. Быныһы ҡайһы саҡ махсус рәүештә ҡыланғандай тойола. Ниндәйҙер протест белдереү ғәләмәтелер, ахры.

Мөхәббәт, һөйөү хисе лә әлеге йәштәрҙә беҙҙәгеләй ихлас, саф түгел. Беҙ ҡыҙҙарҙы ихтирам итә, яҡлай, ҡәҙерләй инек. Яратыуыбыҙҙы ла ҡысҡырып әйтергә тартындыҡ. Ә йәшерен хис һәр саҡ саф, изге, яҡты була. Бөгөн йәштәр яратыуын бер-береһенә генә түгел, башҡалар алдында ла ярып һала. Элек беҙ һөйгәнебеҙ менән никахлашып ҡауыша инек, хәҙер тәүҙә енси "ҡауышалар", аҙаҡ танышалар икән. Бөгөнгөнөң рухи етлекмәгән йәштәре иртәгәнең кемен тәрбиәләр икән? Шуныһы ҡурҡыта, шуныһы борсолдора.

***Миләүшә БОРХАНОВА:*** Заман йәштәрен айырыуса ҡыйыу булыуҙа ғәйепләһәләр ҙә, бының да ыңғай яҡтары бихисап бит. Мәҫәлән, әҙәпле, тыйнаҡ совет балаһы кәрәк әйберен һорарға ҡыймайынса, мөйөштә баҫып тора икән, бөгөнгөнөң үткер балаһы шул уҡ әйберҙе барыһынан алда эләктереп тә ала. Үҙ фекерен ҡысҡырып әйтеүе, тейешен талап итә белеүе менән дә бәхетле хәҙерге йәштәр. Иламаған балаға имсәк ҡаптырмайҙар бит. Кешеләрҙең күҙенә ҡарап, алдап торған заманда йәштәрҙең үҙ һүҙен әйтергә оялып тормауында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ күрмәйем мин. Барыбыҙ ҙа әҙәм балаһы, теләгәнсә йәшәргә, нимәгә хоҡуҡлы һәм нимәгә лайыҡлы булыуыбыҙҙы белергә хаҡыбыҙ бар. Бөгөнгө йәштәрҙә рухи тәрбиәнең түбән булыуында замандың артыҡ мәғлүмәтле булыуы ла сәбәпселер. Йәштәр донъяуи кимәлдә фекер йөрөтә, киң даирәлә мәғлүмәтлеләр. Ә кеше һәр яҡтан да тигеҙ үҫешә алмай: ниндәйҙер йүнәлештә алға киткән осраҡта, икенсе йүнәлеш аҡһай төшә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йәшлектең дә, әгәр ҡабатланһа,**

**Булмаҫ ине, бәлки, ҡыҙығы", - тигән Әнғәм Атнабаев. Ниндәй генә заманға тура килмәһен, һәр йәшлектең үҙ йәме, үҙ ғәме шул. Һынауҙарҙың ҡайһыһына ғына дусар ителмәһен, ҡабатланмаҫ был миҙгел үҙенең оптимистик рухы, ташып торған дәрте, саялығы, хатта дыуамаллығы менән көслө. Донъяның бөтөн мәшәҡәттәренән өҫтөн торорлоҡ хисе башҡа, көсө башҡа уның. Ҡартлыҡ бөтмәҫ уйын уйлай, йәштәр - көлә лә уйнай, тигәндәй, әлегә улар йәшлек дәрте менән, өлөшөнә төшкәнде ялмай ҙа, алға саба. Ә һуңынан иһә, өлкәнәйгәс, үҙҙәренән һуң киләсәк йәштәр хаҡында уйылып китеп уйланырҙар ҙа, фекер ҙә йөрөтөрҙәр. Хәс тә әлегеләй...**

*✓ Тупһанан ғына тороп, ҡысҡырҙым: "Ағай, ҡоҙағый беҙҙең бөтәбеҙҙе лә сәй эсергә саҡыра!" Саҡырмаһа, ней эш. Моғайын, саҡырылған ҡунаҡты кире бороп сығармаҫ әле. Әлбиттә, минең ҡысҡырғанды өйҙә лә ишеттеләр.*



# ҠАТЫНДАР МЕНӘН...

## тыныс булыуҙары ауыр, ҡустылар!

*(Хикәйә түгел)*

Өлкән ағай ҡыҫырыҡлап алды ла, беҙгә аҡыл өйрәтә башланы. Беҙгә, тигәнем, дүрт ҡустыһына була инде. Беҙҙең йәш айырмаһы үҙ-ара әллә ни ҙур түгел. Бер-беребеҙҙән ни бары ике-өс йәшкә генә бәләкәйбеҙ. Ә шулай ҙа өлкән ағайҙың аҡыл өйрәтергә хаҡы бар. Шуға, беҙ әле уны тыныс ҡына тыңлап торабыҙ.

Өлкән ағай ҡустыларына ошондайыраҡ аҡыл бирә: "Килендәр менән матур йәшәгеҙ, ҡустылар. Тынысыраҡ булырға тырышығыҙ. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була. Асыу менән түгел, аҡыл менән эш итергә өйрәнегеҙ. Ҡыҙып киткән булып, килендәргә ауыр һүҙ әйтмәгеҙ". Тыныс ҡына тыңлап торабыҙ өлкән ағайҙы. Кемдер көләмһерәп, кемдер көрһөнөп, хатта кемдер асыуланып ҡуя. Әммә ошо хис-тойғолар эстә генә ярһып тыуа ла, эстә генә ялҡынһыҙ үлә. Уларҙы тышҡа сығарырға һис кенә лә ярамай. Сөнки тыныс тауыш менән тыныс йәшәргә өйрәтеп торған тыныс өлкән ағайыбыҙҙың ҡыҙып китеүе лә бар.

Әйтергә лә онотоп торам. Беҙ әле күмәкләшеп "Газель" автобусы эргәһендә апай-килен-еңгәйҙәрҙе көтөп торабыҙ. Ейәнсура яҡтарына ҡоҙаларға ҡунаҡҡа килгәйнек. Яңы ғына табынға хуш итеп, өйҙән сыҡтыҡ. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар ҙа сығырға тейеш. Улар, һеҙ сыға тороғоҙ, беҙ салат рецептын яҙып алабыҙ ҙа, һә тигәнсе йүгерешеп килеп тә сығырбыҙ, тип, өйҙә тороп ҡалдылар.

Әйҙә, өлкән ағай өгөт-нәсиғәт уҡыһын, апай-килен-еңгәйҙәр салат рецептын яҙып алһын, ә мин һеҙгә ошо ҡоҙаларҙағы мәжлес тураһында һөйләп үтәйем әле. Һеҙ беҙҙең ҡоҙа-ҡоҙағыйға өндәшеп кенә ҡуймағыҙ тағы. Сер итеп кенә әйтәм. Был табындың бер әтнәкәһе булды бит, әй. Юҡ-юҡ, ҡоҙаларҙың һый-хөрмәте бына тигән булды. Матур ҡунаҡ иттеләр. Эш шунда - табында бер төрлө генә салат булды. Ә бының ниməһе ҡыҙыҡ инде, тип аптырап ҡалмағыҙ әле. Сөнки һөйләсәк хәл тап ошо салатҡа бәйле лә инде. Үҙегеҙ беләһегеҙ, хәҙер бит ниндәй генә салат ҡуйылмай табынға. Унда, кәм тигәндә генә лә, алты-ете төрлөһө була. Шуныһы ҡыҙыҡ, уларҙың күбеһенең эстәлеге майонез аҫтына йәшерелгән була. Шунан бер килке салаттың күплегенә ултыраһың аптырап. Аҙаҡ бер килке ҡайһыһын тәмләп ҡарарға белмәй шомланып ултыраһың әле. Ә был табында рәхәт, һайланып ултырырға кәрәкмәй. Тәмләһәң дә, ашаһаң да, һоҡланып ҡарап ултырһаң да - бер генә салат. Башҡаһы юҡ. Әйткәндәй, оло еңгәйҙең яратҡан һүҙе бар - тәүфиҡ кәрәк! Әллә бына ошо һүҙҙәрен иҫтә тотоп, әллә ҡоҙағыйҙы уңайһыҙ хәлгә ҡуймайым тип, оло еңгәй ошо салатты исем өсөн генә маҡтап алған булды. Ә был беҙҙең апай-килен-еңгәйҙәргә етә ҡалды. Улары ҡапҡан һайын маҡтаны салатты. Мин дә ашаным уны. Миңә ҡалһа, артыҡ бер нәмәһе лә юҡ ине, буғай. Салат салат инде. "Ҡоҙағый, был салатҡа ыуаҡ ҡына итеп туралған тауыҡ ите ҡушып ебәрһәң, тәме бермәбер артып китәр ине", - тип әйтке килә инде былай. Әммә әйтергә ярамай. Оло еңгәй шунда уҡ: "Ҡунаҡта әҙерәк тәүфиҡ кәрәк, ҡәйнеш!", - тип әйтәсәк.

Йылы һүҙ - йән аҙығы, тип бушҡа әйтмәйҙәрҙер инде. Ҡоҙағыйҙы әйтәм, был маҡтауҙарға балалар һымаҡ ҡыуанып бер булды. Ни эшләйһең, салатты маҡтай-маҡтай ашаныҡ инде. Беҙҙең бәхеткәлер, салат ҡапыл ғына бөттө лә ҡуйҙы. Аллаға шөкөр, уны күп итеп әҙерләмәгәндәр икән. Ысын әйтәм, рәхәт булып ҡалды. Башҡа нәмәгә үрелеп булмай, салат ашағыҙ ҙа салат ашағыҙ, тип, йәнде алып баралар ине. Салат бөттө, эш тә бөттө, тип уйлайһығыҙмы? Яңылышаһығыҙ. Бына шул мәл: "Тәмле салатым менән һеҙҙе туйғансы һыйлай алманым", - тип, ҡоҙағый йөрәкһеп алды ла китте. "Исмаһам, әҙ генә лә ҡалманымы шунда", - тип әллә нисә тапҡыр аш-һыу бүлмәһенә инеп сыҡты. Уны был бәләнән әлеге лә баяғы тәүфиҡлы оло еңгәй ҡотҡарҙы:

-Ҡоҙағый - тине ул - һин беҙҙе салатты әҙерләү серҙәре менән таныштыр. Беҙ өйгә ҡайтҡас, үҙебеҙ күп итеп әҙерләп, кинәнеп китеп ашарбыҙ.

Бындай һүҙҙәрҙе ишеткән ҡоҙағый май ҡояшы һымаҡ ялтлап китте:

-Өйрәтәм, нишләп өйрәтмәй тей, барығыҙҙы ла өйрәтеп ҡайтарам, - тип дыу килде.

"Шулай инде, белгән өйрәтә, белмәгән өйрәтмәй", тип әйтер инең, әлеге лә баяғы оло еңгәйҙең "Тәүфик кәрәк", тигәне кәртә булып тора. Ә шулай ҙа ҡоҙағыйҙың ҡыуанысы тора-бара үкенескә әйләнде. Үкенерлек тә шул, сөнки ул кәрәкле гәзитен таба алмай эт булды. Баҡтиһәң, ошо тәмле салат рецепты гәзит битендә баҫылып сыҡҡан булған. Ә бына тап ошо гәзит иң кәрәк саҡта юҡҡа сыҡҡан да ҡуйған. Башҡа кәрәкмәгән гәзиттәр, ана, ята туҙырашып, ә кәрәклеһе юҡ. Эй, эҙләне, эй, эҙләне ҡоҙағый. Барыбер таба алманы уны. "Һин генә тотоп тора инең ул гәзитте, ҡайҙа ҡуйҙың?" тип, бер ғәйебе булмаған ҡоҙаға ла һуҡранып алды, "Бынауында ғына һалып торғайным, шунан атайығыҙ тотоп тора ине, күрмәнеңме, ҡыҙым, күрмәнеңме, улым?" тип балаларынан һорашҡан булды. Килене ҡәйнәһенең холҡон белеп бөткәндер инде. Ул баштан уҡ ҡырҡа әйтте: "Ҡәйнәм, мин көнө буйы ҡаҙан тирәһендә булыштым. Гәзит тотоп торманым, ҡайнымдың да гәзит тотоп торғанын күрмәнем". Бәйләнерлек кешеһе ҡалмағас, ҡоҙағый башын тотоп, бер аҙ баулап алған булды: "Эй, ошо өйҙә рәхәт йәшәйҙәр ҙә инде, берәү ҙә белмәй, берәү ҙә күрмәй, берәүгә бер нәмә лә кәрәкмәй...". Әлеге лә бағы оло еңгәй: "Юҡтың аты юҡ, бушҡа ҡайғырма әле, ҡоҙағый", - тип ҡырҡа тынысландырып ҡуйҙы уны. Шул арала табынға йылы аш, бешкән ит алып килделәр. Табында ҡоротло тәмле һурпа, ҡаҙылы ат ите булғанда ниндәйҙер салат тураһындағы мәғлүмәт бөтөнләйе менән юҡҡа сыҡты...

Ул салат тураһында мин бөгөн дә иҫләмәҫ инем әле. Әммә ҡоҙағыйҙың, китапса әйткәндә, бәхет ишеге табынға хуш итеп, ҡунаҡтарҙы оҙатҡан мәлдә асылды. Галошын кейергә тип эйелгәйне... Шул мәл уның шатлыҡлы тауыш яңғыраны: "Таптым, барыбер таптым!" Хатта ул бысраҡ галошын күтәреп алып, күкрәгенә бер нисә тапҡыр ҡыҫып алды. Мин хатта, әллә ҡоҙағыйҙың зиһен-фәләненә берәй нәмә булдымы, тип аптырай биреп ҡуйҙым. Ә шулай ҙа ҡыуанырлыҡ хәлваҡиға булған икән. Баҡтиһәң, теге рецептлы гәзит... галош эсендә ятҡан! Ҡоҙағый усы менән маңлайына һуға-һуға, аптырап киткән кеше булды. Имеш, ул өләкөгөн генә үҙ ҡулдары менән үҙенең галошына ошо гәзитте онтораҡ урынына һалған, ә бөгөн ошо турала бөтөнләйе менән онотҡан. Оло һаҡлыҡ менән тартып сығарҙы ул гәзитте галошынан. Шуныһы үкенесле, беҙгә ошо ҡыуанысты тышҡа сығарып ҡыуанып булмай. Ә шулай ҙа мин, оло еңгәйгә күрһәтмәй генә, сәпәкәй иткән булдым. Башҡалар ипләп кенә, ура-а-а, тип йылмайышып алған булды. Шул арала йырыҡ ауыҙҙарыбыҙҙы күреп ҡалған һиҙгер оло еңгәй "Тәүфиҡ кәрәк, ҡәйнештәр", тигән ҡараштарын беҙгә алмаш-тилмәш һирпеп тә алды.

Бына шулай. Ирҙәр тышҡа сығып, "Газель" автобусы эргәһенә өйкөләштө, ә ҡатын-ҡыҙҙар, алдан әйткәнемсә, теге салат рецептын яҙып алабыҙ, тип, өйҙә тороп ҡалды. Тиҙ сығырҙар ул, беҙ әле сығып барғанда уҡ ҡайһыһы ҡәләм, ҡайһыһы ҡағыҙ эҙләп мәж булып тороп ҡалғайнылар. Ә шулай ҙа бынау Ейәнсура яҡтары бигерәк елле-дауыллы икән. Оҙаҡ та торманыҡ бит әле, ә шул арала тәнгә һиҙелер-һиҙелмәҫ һыуыҡ та йүгерҙе. Ун биш-егерме минут көтөп торғандан һуң, оло ағайҙың түҙемлеге үҙен һиҙҙертә биреп ҡуйҙы. Сыҙаманы, иң бәләкәй ҡустыға әйтте: "Бар, ҡустым, инеп әйтеп сыҡ, ҡайтырға кәрәк". Ҡусты инде лә сыҡты. Бер минут та ваҡыт үтмәне. "Хәҙер", тип әйттеләр тине ул. Уның бындай яуап менән килере алдан уҡ билдәле бит инде. Хатта ҡустыға ваҡытын, һүҙен әрәм итеп барып йөрөмәһә лә булыр ине. Шуға күрә беҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙың яуабын тыныс ҡабул ҡылдыҡ һәм көтөүҙе дауам иттек. Тағы ун биш-егерме минут ваҡыт үтеп китте. Дөйөм алғанда, беҙҙең көтөүгә кәм тигәндә лә ярты сәғәттән ашыу ваҡыт үтеп китте бит, әй. Был ваҡыт эсендә, биллаһи, ике-өс юллыҡ рецепт ҡына түгел, ә ике-өс кәритә салат эшләп булыр ине. Әммә рецепт та, салат та, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа юҡ. Етмәһә, көнө һыуыҡ. Шул саҡ оло ағайҙың ике сикәһе тартыша биреп ҡуйҙы. "Үҙеңде саҡ тотоп тораһыңмы, ағай",тип өндәштем мин уға эстән генә. "Саҡ тотоп торам шул, ҡустым", тип яуапланы ул миңә эстән генә. Һүҙһеҙ аңлап торғанға күрә, оло ағай миңә өндәшеп торманы. Ул миңә ҡарап, эйәген өй яғына табан бороп, һелкеп кенә ҡуйҙы. Ниндәй генә яуап менән килермен икән, тип, мин өй яғына йүнәлдем. Минең борсолоуҙар бушҡа булмай сыҡты. Өйҙә мине көтмәгән күренеш көтөп торған. Барып инһәм... өҫтәлдә борҡоп самауыр һажлап ултыра, ә ҡатын-ҡыҙҙар тирләп-бешеп сәй эсә! Бындай күренештән мин бер аҙға хатта баҙап ҡалдым. Шуға күрәлер инде, оло еңгәйҙең әйткән һүҙҙәре ҡолаҡҡа тоноҡ ҡына булып ишетелә: "Нишләй, ҡәйнеш, берәй йомошоң бар инеме әллә?"

Әҙерәк тәүфиҡ кәрәк, еңгәй, тип әйткәндә хатта ғына ла килешер ине оло еңгәйгә. Әммә әйтергә дәрәжә етмәй. Ә мин шулай ҙа үсте алдым оло еңгәйҙән. Кире боролоп сыҡтым да ... тупһанан ғына тороп, ҡысҡырҙым: "Ағай, ҡоҙағый беҙҙең бөтәбеҙҙе лә сәй эсергә саҡыра!" Саҡырмаһа, ней эш. Моғайын, саҡырылған ҡунаҡты кире бороп сығармаҫ әле. Әлбиттә, минең ҡысҡырғанды өйҙә лә ишеттеләр. Дыу килеп, табынды яңыртып йөрөгәндәрен күҙ алдыма килтереп, оло кинәнес менән тыңлап торҙом. Ә өшөп торған ир-ат артыҡ инәлтеп торманы, дәррәү өй яғына табан йүнәлде. "Үҙем саҡырырға сығып ҡына бара инем, ярай әле, мәлендә ҡоҙа килеп инде", - тип өтәләнеп ҡаршы алған булды беҙҙе ҡоҙағый.

Сәй эсеп алғас, тәндәр йылынып, күңелдәр күтәрелеп китте. Әле автобуста ҡайтып барабыҙ. Бара биргәс, оло еңгәй беҙгә ҡарап әйтеп ҡуйҙы: "Ҡунаҡта үҙегеҙҙе тәүфиҡлы тоттоғоҙ. Барығыҙға ла рәхмәт". Аҙаҡ өлкән ағай өҫтәп ҡуйҙы: "Шулай. Тыныс булыуҙары ауыр улар менән, ҡустылар!"

**Шәрип СЫНБУЛАТОВ.**

### ӘБЙӘЛИЛ МӘҘӘКТӘРЕ

## "НА ВАГОНАМ!"

Байым ауылында Әхиәр исемле шуҡ, йор һүҙле олатай була торғайны. Шаянлығы арҡаһында уның исеме менән бәйле күп ҡыҙыҡлы хәлдәр бөгөн булһа ла ауылдаштары хәтерендә йәшәп килә.

Баҫҡан ерендә оҫҡон сәсрәтеп торған Әхиәр олатай 50-се йылдар башында Ҡытай халыҡ республикаһында әрме хеҙмәтен үтәй. Әхиәр олатай инде "бабай" булып, хеҙмәтен тултырып ҡайтыр алдынан командирҙары һәм бер нисә иптәше менән яңы килгән һалдаттарҙы үҙҙәренә алмашҡа алырға тип, СССР сигенә сыға. Армия сафына яңы ингән йәштәрҙе Ҡытайға бара торған поезд вагондары алдына теҙеп ҡуйғас, командир ҡыҫҡа ғына телмәр тота һәм үҙ эштәрен тулыһынса теүәлләр өсөн егеттәрҙе "бабайҙар" ҡарамағына ҡалдырып китә. Әхиәр олатай бик яңғырауыҡлы, көслө һәм матур тауышлы ине. Иптәштәре: "Әйҙә, һин ҡысҡыр, нығыраҡ ишетерҙәр, вагондарға инеп ултырырға әмер бир", - тиҙәр. Әхиәр олатай, үҙе һөйләүе буйынса, тамағын ҡырып ебәреп аруҡ көслө генә тауыш менән: "На вагонам!" - тип фарман бирмәһенме. "Минең ҡысҡырыуым булды, теҙелешеп торған егеттәр вагон баштарына үрмәләй ҙә башланы, - ти бабай. - Командирыбыҙ хәлде аңламай, йүгереп килеп етте. "Ниндәй әмер бирҙегеҙ?" - ти был. Был ваҡытта инде етеҙерәк егеттәр вагон өҫтөндә ултыра, кемдәрелер яңы үрмәләй генә. Командир "отставить" командаһын яңғыратып, һалдаттарҙы кире ергә төшөрҙө һәм: "По вагонам!" - тип ҡысҡырып, егеттәрҙе вагон эсенә индерҙе".

Хәбәренең аҙағында Әхиәр олатай: "Мин урыҫ телен яҡшы белмәгәс ни..." - тип өҫтәп ҡуйған була торғайны. Әллә торғаны менән бер көлкө, шуҡлыҡ оҫтаһы булған ҡарт шул рәүешле йәш һалдаттарҙың ниндәй алмаш булыуын һынағанмы икән?

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ҒАИЛӘ ҺӘМ ШИҒРИӘТ

Фирүзә АБДУЛЛИНА

# ҺИНЕҢ МЕНӘН КИЛӘ ҠАРТАЙҒЫМ...



**Башҡа бер халыҡтар шиғриәтендә лә, башҡорт шиғриәтендәге кеүек, ғаилә тормошона ҙур урын бирелмәйҙер. Урыҫ шиғриәтендә, мәҫәлән, әсәйҙәргә арналған шиғыр табырмын тимә. Ә беҙҙә әсәһенә арнап ҡәләм тирбәтмәгән кеше бармы икән? Шулай уҡ ауыл, атай-әсәй, ҡусты-һеңле, туғандар, ир-ҡатын темалары ла иркен ҡулланыла. Был темалар һәр уҡыусыға шундай яҡын, үҙ. Моғайын, ғаилә ҡиммәттәрен бар тойғоларҙан да өҫтөнөрәк, алғараҡ ҡуйыуыбыҙ ҙа ҡаныбыҙға һеңгәндер. Гәзитебеҙҙә Ғаилә йылына арналған шиғырҙар шәлкеме серияһын интернет селтәрҙәрендә күптәрҙең күңелен яулап өлгөргән һәләтле шағирә Фирүзә Абдуллина асып ебәрә. Уның лирикаһындағы ғаилә мөнәсәбәттәренең күп яҡлы саткылары үрҙә әйтелгән фекергә раҫ. Шиғри юлдарҙа әйтер һүҙ ҙә, хистәр ҙә, үпкә лә, шелтә лә, кинәйә лә, ә иң мөһиме, йөрәк иретер һөйөү бар.**

### Уртаҡ тормош

Арттан этеп, алдан һөйрәп,
Берсә маҡтап, берсә әрләп,
Бер юхалап, берсә һыйлап,
Көйөн көйләп, яйын яйлап,
Һүҙ әйтергә мәлен һайлап,
Нисек булһа иргә ярап
Донъя көтә ҡатын-ҡыҙҙар.

Ташып тора гәйрәт-көстәр,
Ҡасып бармай әле эштәр,
- Беҙ булмаһаҡ, былар нишләр?
Ирҙәр ҡулын һағындырып,
Табындырып, ялындырып,
Уҙындырып, аҙындырып,
Йәшәп ята ир-егеттәр.

Берсә - йәнәш, берсә - көрәш,
Берсә - һатыш, берсә - тартыш,
Кемдер - еңмеш, кемдер - ҡайтыш,
Берсә - әйтеш, берсә - атыш,
Мөхәббәт һәм нәфрәт ҡатыш,
Бына шулай йәшәп ятыш -
Уртаҡ тормош.

### Өлгөрөрбөҙ

Яңғыҙ күршем "еңел" донъя көтә,
Эшләнә лә ҡуя эштәре!
Иҫем китеп ҡайсаҡ ҡарап торам:
Нисек кенә етә көстәре?

Ул бер көндә эшләп ҡуйған эште
Ай буйына башлай алмайым:
Йорт хужаһы арый, ул ял теләй,
Ирҙән үтеп булмай - аңлайым!

Өй эсендә тауыш булмаһын, тип
Ауыҙлыҡлап тыйып үҙемде,
Көтөп торам. Күршем эргәһендә
Күтәрергә оят күҙемде.
Оят булһа булһын! Тыныс булһын
Иртәләрем, көнөм, кистәрем!
Тороп торһон эшем. Өлгөрөрбөҙ.
Һау ғына бул берүк, тиҫкәрем!

### Ҡыҙҙарға

"Һинә рәхәт, бөтә яҡлап ирең
Камил булғас", - тине әхирәт,-
Минең ҡыҙыма ла кейәү һайлау
Серен, ваҡыт табып, бер өйрәт".

Иларғамы, әллә көлөргәме?
Ҡурҡам үпкәләтеп ҡуйыуҙан,
Оҙон-оҙаҡ йылдар был дуҫлыҡҡа
Ҡунмағайны бит һуң сан-туҙан.

Ҡуш аяҡлап баҫам тормозома -
Серем бер үк ҡалһын сер булып!
Һай, афарин үҙем! Уәт афарин!
Ирем ҡалһын иң шәп ир булып!

...Серҙе сисәм, ҡыҙҙар, бөгөн һеҙгә:
Фаш итмәгеҙ илгә өйҙәген,
Ситтәр белмәһендәр кемдең ниндәй
Эске кейем кейгән-һөйгәнен.

Утыҙ ике тештән сыҡҡан хәбәр
Утыҙ ике телгә аш булыр,
Ирең ҡолағына килеп еткәс,
Йөрәгендә ятҡан таш булыр.

Маҡтағанды инде кем ятмай?
Артыҡ ыҫҡыньһа ла зарар юҡ:
Аванс бит ул! Уны тулыһынса
Аҡламайса уға сара юҡ!

Тик сабырлыҡ кәрәк самаларһыҙ,
Илап алһаң ҡайсаҡ бушанып...
Ирҙәр улар камил икәненә
Үҙҙәре лә бөтә ышанып!

Енел түгел әйтер һүҙҙе йотоп,
Теләктәрҙе тыйып-тышалыу,
Ситте ышандырыу ауыр түгел,
Иң ауыры - үҙең ышаныу.

Камил тип дан тотҡан ир-егеттең
Ҡатыны мин. Әйтер хаҡым бар:
Камил ирҙәр ерҙә булмай бит ул,
Камил булмағандай ҡатындар!

### Сәбәп ҡылайыҡ!

- Бәхет мине урап үтте, - тиһең, -
Хоҙай минә бәхет бирмәне,
Башҡаларға бирҙе өйөп-өйөп,
Минең күтәнемдә күрмәне.

...Көтәләр шул! Батша улы кәрәк,
Аҡтан ғына булһын аты ла!
Йомшаҡ тәхеттәргә өмөт итеп,
Ултыралар яңғыҙ, ҡатыла.

...Бәхет мине эҙләп йөрөйҙөр, тип,
Көттөм. Сыҡтым ҡаршы алырға,
Сабыр ғына көткән булыр инем -
Ҡурҡтым өлөшөмдән ҡалырға.

Йә аҙашып ҡуйыр берәй ерҙә,
Йәки кемдер уны сәлдерер,
Өмөт итеп, бушҡа тороп ҡалһам,
Алданып та ҡалһаң, йәлдер ул?

Шуға күрә, көтөп ултырмайса,
Үҙ аршыным менән үлсәнем:
Нигеҙ урынына ҡаҙаҡ ҡаҡтым,
Йолктом кесерткәнен, билсәнен.
Нишләп көтәм? Һәр бер ағзам теүәл,
Башым эшләй, камил иманым -
Бәхетемде үҙем әүәләнем,
Әллә ҡайҙан көтөп торманым!

Йәнгә ләззәт бирер һөнәрем бар,
Тамаҡ туйҙырырлыҡ эшем бар,
Мендәр араһынан эҙләй-эҙләй,
Үҙем һайлап алған кешем бар!

Балаларым - йәшәү мәғәнәһе,
Ҡартлығымда терәк булырҙар,
Раббым һаулыҡ бирһә,
бар көндәрем
Тыныс бәхет менән тулырҙар...

Юҡ, бәхетте көтөп ултырмайыҡ,
Үҙебеҙ ҙә сәбәп ҡылайыҡ,
Бәхет - үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙа!
Тик өмөттө генә өҙмәйек,
Тик йәшәүҙән генә биҙмәйек,
Бер туҡтауһыҙ уны эҙләйек,
Бары нығк-нығк итеп теләйек -
Бәхет килер - шуны беләйек!

### Бир ҡулыңды!

Бир ҡулыңды! Әйҙә минең менән
Етәкләшеп алтын көҙҙәргә!
Беҙ бит инде күптән күнеккәнбеҙ
Арттан ҡарап ҡалған күҙҙәргә.

...Йәшлегемдең йәшел яҙҙарында
Устарыңа һалдым ҡулымды,
Мөхәббәтен, иғтибарың менән
Яҡтырттың һин барыр юлымды.

Ҡулдар - ҡулда, күҙҙәр -
күҙҙә булғас,
Йәйҙәребеҙ булды еләкле,
Минең өсөн һин һаман да шул уҡ:
Яҡын, гәзиз, ҡайнар йөрәкле.

Бир ҡулыңды! Әйҙә, алтын көҙгә!
Күҙҙәреңдә һаман наҙ ғына...
Һинең менән мин һаман да
йәп-йәш,
Көҙҙәрем дә, гүйә, яҙ ғына.

### Һинең менән килә ҡартайғым!

Бошонмайым, йыйырсыҡтар
күрһәм,
Йәшлек үткәнендә юҡ ҡайғым -
Бер хыялым йәшәй күңелемдә:
Һинең менән килә ҡартайғым!

Юҡ-бар өсөн һис бошонмаҫ инем,
Һин янымда саҡта мин - гәмһеҙ,
Һинең менән минә һәр саҡ рәхәт,
Һинең менән булмаҫ күңелһеҙ.

Ерҙәр гиҙеп, донъя күрер инек,
Бергә саҡта ожмах йән-яғым...
Бер өмөтөм минә көс-дәрт бирә:
Һинең менән килә ҡартайғым!

Йәш саҡтарҙы иҫләп көлөшөрбөҙ,
Бала-сағаларҙы һөйләрбеҙ,
Килер көнгә пландар ҡорған булып,
Күңел ятҡан йырҙы көйләрбеҙ...

Сәстәребеҙ, әйҙә, салланһындар,
Булһын әйҙә ҡулда таяғым -
Оло үтенесем Хоҙайыма:
Һинең менән килә ҡартайғым!

ЯРҘАМ



## ТУЙ ТАБЫНЫНДА...
## мәҡәлдәр, әйтемдәр

- Ҡатын менән ир- икеһе бер.
- Ҡашығаяҡ шылтыраған
  һайын ҡатын айырмайҙар.
- Ҡоҙа булғансы, нығк һораш,
  Ҡоҙа булғас, нығк һыйлаш.
- Ҡош аяғынан, ҡыҙ иренәнән әләгер.
- Ҡош моронһоҙ булмаҫ,
  Ҡыҙ урынһыҙ булмаҫ.
- Ҡыҙ байлығы- күркәм холоҡ,
  Ир байлығы- тәүәккәл.
- Ҡыҙ күңелендә- балалы бишек,
  Ир күңелендә- эйәрле ат.
- Ҡыҙ күрмәй- бил сиселмәй,
  Һыу күрмәй- итек сиселмәй.
- Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма,
  ҡәйнә ҡыҙҙан ярала.
- Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була.
- Ҡыҙ яҡшы ергә төшһә- ялпая,
  Яман ергә төшһә- ҡартая.
- Ҡыйыу егет- ир күрке,
  Һылыу ҡыҙҙар- өй күрке.
- Ҡысыған ерҙән ҡул китмәй,
  Һөйгән йәрҙән күҙ китмәй.
- Матурҙы күрге килә,
  Яҡшыны алғы килә.
- Матурлыҡ туйҙа кәрәк,
  Мөхәббәт көн дә кәрәк.
- Менгән атың аҡбуҙ булһын,
  Һөйгән йәрең йәш ҡыҙ булһын.
- Оло өйгә ни кәрәк, кесе өйгә лә шул кәрәк.
- Өй артында ҡыуағың булһа, һандуғас ҡунағың булыр.
- Өйөнә күрә иләге,
  Ҡапҡасына күрә силәге.
- Сөйөнә күрә туҡмағы,
  Туйына күрә таҡмағы.
- Сәскә яҙ менән, мөхәббәт наҙ менән.
- Тиңең менән тибешһәң дә килешә.
- Туй- йыйын, һый ҙа уйын.
- Туй күрке ҡунаҡ менән.
- Туйға барһаң туйып бар,
  Асыуыңды ҡуйып бар.
- Туғандарың- ҡулың менән аяғың,
  Дуҫтарың- таяныр таяғың.
- Урманда ағас күп булыр,
  Башын киҫкән бер булыр.
- Ул тапҡан- уңған ҡатын,
  Ҡыҙ тапҡан- наҙлы ҡатын.
- Ул тыуһа- тыу бәйлә,
  Ҡыҙ тыуһа- бау бәйлә.
- Ул- һөйөнөс, ҡыҙ- ҡыуаныс.
- Улыңа башынан һыйпап кәңәш бир,
  Килененә ай һайын һөйләп күстәнәс бир.

Фәнүр ШАҺИЕВ әҙерләне.
(Дауамы бар).

*✓ Хәлит көләкәс Гөлшаттан бик тиҙ ялҡты. Уның эшен, ҡылығын Миңлесырурҙыҡы менән сағыштырҙы. Бер аҙҙан ул йәшлек мөхәббәте ҡатынының тырнағына ла тормағанын аңланы. Аңланы ла ул, тик һуң ине.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫШЫН...

## киви аша

■ Яңы Зеландияның Отаго университеты ғалимдары С витаминына бай һәм тотош организмға ыңғай йоғонто яһаусы емеште билдәләгән. Улар әйтеүенсә, тап киви емеше организмды витаминдар менән тулыландыра ала икән. Витаминдар, үҙ сиратында, арыуҙы һәм депрессияны юҡҡа сығара. Тикшеренеүҙәрҙә төрлө йәштәге 50 ир-ат ҡатнаша. Улар көн һайын киви ашарға һәм үҙенең кәйефе-хәле тураһында ентекләп һөйләргә тейеш була. Тикшеренеүҙәр теүәлерәк булһын өсөн, төркөмдә икегә бүләләр. Беренсе төркөмдәгеләр көнөнә - яртышар, икенсе төркөмдәгеләр икешәр киви ашай. Икенсе төркөмдәге ир-егеттәрҙең кәйефе лә яҡшыраҡ була, эшкә һәләтлектәре лә арта. Емештең файҙалы матдәләре нервы көсөргәнешенән дә арындыра. Антиоксиданттар һәм башҡа компоненттар аш һеңдереүгә ыңғай йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Маргарет Виссерс раҫлауынса, С витамины метаболизмды әүҙемләштерә. Көнөнә бер нисә киви ашарға тәҡдим итә улар. Бигерәк тә ҡыш миҙгелендә файҙалы был емеш.

■ Күңел болғанғанда, мускулдар һыҙлағанда имбир файҙалы. Ул ҡандағы шәкәр кимәлен дә түбәнәйтә, аш һеңдереүгә булышлыҡ итә. Имбирҙе Азия илдәрендә ит, балыҡ ризыҡтарына ла, сәйгә лә өҫтәйҙәр. Гингерол - төп биологик әүҙем матдә имбирҙә файҙалы сифаттар өҫтәй. Яман шештең ҡайһы бер формаларын имбир менән дауалап була. Бигерәк ашҡаҙан аҫты, һөт биҙҙәре яман шешен булдырмау өсөн имбир ҡулланырға кәңәш итәләр. Был тәмләткес респираторлы инфекцияларға ҡаршы көрәшә.

■ Офиста эшләү, гәҙиттә, әүҙем аҡыл эшмәкәрлеге менән бәйле. Баш мейеһенә даими энергия кәрәк, шуға ла эш ваҡытында нисек туҡланырға кәрәк һуң? Ғалимдар раҫлауынса, бөтөн ризыҡтар ҙа баш мейеһенең эшмәкәрлеген әүҙемләштермәй. Мәҫәлән, сейә кеүек файҙалы емеш-еләктәрҙә мелатонин күп, шуға ла улар йоҡоно килтерә. Ҡәһүә эскәндән һуң 60-90 минут ваҡыт үткәс кенә уның тәьҫирен тойорға була. Офиста банан ашау ҙа кәрәкмәй. Ул шулай уҡ йоҡоно килтерә. Көнбағыш, палтус балығы, тәм-том да шундай уҡ һөҙөмтә алып килә. Шулай булғас, эш урынында нимә ашарға һуң? Белгестәр билдәләүенсә, эремсек, йогурт кеүек һөт ризыҡтарына, төрлө бутҡаларға, йәшелсәгә, алмаға, йөҙөмгә, грушаға өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләргә үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душ ҡойоноғоҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндөҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе киске алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Ғалимдар газлы һыуҙы даими эсеү диабет, ҡан баҫымы күтәрелеү һәм мейегә ҡан һауыу хәүефен арттыра, тигән һығымтаға килгән. Көньяҡ Африка Республикаһының Стелленбос университеты тикшереүҙәр уҙғарған, тип хәбәр итә киң мәғлүмәт саралары. Медицина хеҙмәткәрҙәре аҙнаһына биш тапҡырҙан күберәк газлы һыуҙы эскән кешеләрҙең торошон күҙәткән. Һөҙөмтәлә уларҙың күбеһендә диабет, юғары ҡан баҫымы һәм һимереүгә килтереүсе метаболик синдром асыҡланған. 0,33 литр күләмле газлы һыуҙа 39 грамм самаһы шәкәр бар, ул көндәлек норманан 14 грамға күберәк. 10 аҙна дауамында газлы һыуҙы эскән кешеләр йышыраҡ йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына зарланған.

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ҺАУАЛАҒЫ ТОРНАҒА ЫМҺЫНЫП...

**Редакция йомошо менән ауылдарға сыҡҡанда төрлө яҙмышлы кешеләр осрай. Кемдер һоҡланыу уята. Икенселәренән ғибрәт, һабаҡ алаһың. Өсөнсөләре - үкенесле ғүмер кисергәндәре иһә йәлләтә, күңелде тетрәндерә.**

Бынан бер нисә йыл элек район ауылдарының береһендә уғата ҡыҙғаныс яҙмышлы бабай тураһында һөйләгәйнеләр. Бабай тигәс тә етмешкә лә етмәгәйне әле ул. Ауыл халҡы мөңгөлек йортҡа оҙата ине уны. Хәлит ҡарттың яҡты донъя менән хушлашҡанын бер нисә көндән һуң ғына белгәндәр.

Уның һуңғы осорҙа урамда күренмәүен һәр кем үҙенсә юраны.

Аулаҡта эсеп яталыр, тигәндәр ҙа бар, сөнки йәш сағында бик һиҙелмәһә лә, ологайғас, уның йыш ҡына һалмыш йөрөгәнен күргәндәр ауылда. Йөрәгем яна, аҙыраҡ эсһәм, ана шул ялҡын бер аҙ баҫылғандай була, тип аҡланған.

Ҡарт күренмәгәс, ҡыҙҙарының береһе алып ҡайтып киткәндер, тип тә фаразлағандар бар. Ҡыҙың булһа, ҡырҡ ерҙән тый, тип, балаларына ифрат ҡаты булһа ла, әсәйҙәренең тәрбиәһе менән улар киң күңелле, атайҙарына ихтирамлы булып үҫте.

Янғыҙҙың өнө сыҡмаҫ, йәйәүленең саны сыҡмаҫ тип, уның тәҙрәһендә ут булмауын бөтөнләй иғтибарға алмағандар ҙа юҡ түгел. Эше менән дә, холоҡ-фиғеле менән дә ауылдаштары араһында бер ҡасан да хөрмәт ҡаҙанмағанғамы, уның хәлен белешергә инергә ашыҡҡан кеше булманы.

Ә бына ҡарттың әбейен һағынып, һары һағышҡа бирелеп ятыуы тураһында береһенең дә башына ла инеп сыҡманы, сөнки Хәлиттең хәләленә ғүмер буйы кәмһетеп ҡарауын бөтә ауыл халҡы белә. Һыйыры ҡыҫыр ҡалһа ла, эте олоһа ла, ҡапҡаһы асылмаһа ла, кәбәненең осон ел осорһа ла - бөтәһен дә бисәһенән күрҙе. Үҙенә генә әйтеп күңелен ҡырманы, ә уны бөтә урамға рисуай итеүҙән йәм таба ине. "Ҡатынның тинтәк булһа, ҡамсың йыуан булһын", тип, үҙенең ҡатынын һүҙ менән генә түгел, ҡул менән дә рәнйетеүен йыш ҡына бөтәһенең дә иҫенә төшөрөп торҙо. Ҡатын ямау түгел шул, һүтеп ташлап булмай, тип ғүмер буйы ҡатынына зарланып йәшәгәнен ишеткән күрше-тирәһенең башына, ысынлап та, Хәлит ҡатынын юҡһынып, ауырыуға һабышыр, тигән уй инеп тә сыҡмай ине.

Миңлесырур инәйҙе иһә ауылда йәше-ҡарты хөрмәт итте. Аҡыллы, сабыр булыуы уны шул тиклем һөйкөмлө күрһәтте, хатта уның ярты битен ҡаплап алған ҡыҙыл миңенә иғтибар иткән кеше лә булманы. Кәңәш-төңәшкә лә, ярҙам кәрәккәндә лә уға килделәр. Әйәк аҫтына тиклем төшкән миңен аҙ булһа ла күрһәтмәҫкә тырышыпмы, әллә башҡа төрлө сәбәптәнме, һәр ваҡыт башын әйеп йөрөгән был тупа һынлы, буйсан ҡатынға йәше-ҡарты кеселекле булды.

Ҡарты, әлбиттә, ауылдаштарының, үҙенең туғандарының ҡатынына булған тәрән ихтирамын тойҙо. Әммә ҡыуанаһы, ғорурланаһы урынға, ул, киреһенсә, йәмәғәте ни тиклем абруй ҡаҙана барһа, шул тиклем рәнйетте. Балалары алдында ла оялып торманы, кешегә ҡушып, теңкәһенә тейҙе. Үҙҙәрендә ҡушмаған кеше ҡалмағас, күрше ауылдағы сыуаштарҙы барлай башланы. Ауырып, түшәккә йығылғанда ла, кемде көтөп ятаһың, тип, мыҫҡыл итте.

Хәлиттең йәшәй башлағандан алып ҡатынына бер сәбәпһеҙгә бәйләнеүенең ғилләһе иһә үҙендә ине. Дөрөҫөрәге, ҡаршы яҡта күрше йәшәгән йорттоң хужабикәһенә булған мөнәсәбәтенә бәйле. Гөлшатты йәштән һөйҙө ул. Тик был хаҡта атай-әсәһенән башҡа бер кем дә белмәне. Ҡыйыуһыҙлығы, мәшәүлеге арҡаһында үҙенә оҡшаған ҡыҙға өйләнә алманы ул. Күрше ауыл ҡыҙы Гөлшат менән колхоз һабантуйында танышты. Ҡыҙ, ҡыҙыҡ күрепме, был яҡтарҙа бөтөнләй осрамаған исем менән - Миңлесырур тип танытты үҙен. Енел һөйәкле, бер баҫаһы урынға ун баҫып, өйөрөлөп-сөйөрөлгән ҡыҙға мөкиббән булды ла ҡуйҙы егет. Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр күргән ҡыҙ төштәренә инеп аптыратҡас, өйләнергә теләүен белдерҙе. Шуны ғына көткән атай-әсәй берҙән-бер уларының был ниәтен дәррәү күтәреп алды. Улай ғына ла түгел, иртәгеһенә үк ҡыҙҙың атай-әсәһе менән һөйләшергә тип, күрше ауылға юл тоттолар. Хәлитте әйҙәләп ҡараһалар ҙа, барырға оялдымы, ҡурҡтымы, хәҙер быны үҙе лә аңлата алмай, өйҙә ҡалыуҙы хуп күрҙе. Исеменән башҡа ҡыҙ тураһында бер нәмә лә белмәй юлға сыҡҡан атай-әсәһе кисләтен кенә бик ҡәнәғәт булып ҡайтты ла, никахҡа әҙерләнә лә башланы.

Никах табынына йәштәрҙе ултыртманылар. Йола үтәп, кейәүләп, ҡунаҡ булып ятыр заман түгел ине, кәләшен арбаға ултыртып ебәргәндә лә эргәһендә икенсе ҡыҙ ултыралыр тип уйламаны Хәлит. Атай-әсәһенән оялып, кәләшенә һүҙ ҙә ҡушманы. Ҡайтҡас ҡына күрҙе уны: һөйгән ҡыҙы урынында Миңлесырур исемле бөтөнләй икенсе ҡыҙ баҫып тора ине. Һул күҙенән әйәгенә тиклем ҡыҙыл миңле үҙе. Күҙен күтәреп ҡарарға ла оялған ҡыҙҙы, бер гонаһы булмаһа ла, үҙен алдауҙа гәйепләне. Тик һуң ине, никах уҡылған, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар бүләк бирешкән, мәһәр бирелгән, ҡыҙҙың бирнәһен еңгәләре күтәреп өйгә индереп урынлаштырған.

Атай-әсәһенә илап та, ялбарып та икенсе ҡыҙҙы яратыуы хаҡында әйтеп ҡараһа ла, ғәрсел атаһы был хаҡта ишетергә лә теләмәне. Яҙмышына шулай күнде Хәлит. Әммә ошо алданыуы тиҙҙән оялсан, баҫалҡы егеттән әсе телле, уҫал иргә әйләндерҙе.

Күп тә үтмәй, Миңлесырурҙың ауылдашы Гөлшат та ҡаршы йортҡа килен булып төштө. Хәлит ғүмер буйы шул йортҡа, уның тәҙрәһендә янған утҡа, унан күренгән һынға ымһынып йәшәне. Ишек алдында йөрөгән күрше ҡатындың уның яғына бер һирпеп ҡарауы ла әйтеп аңлатҡыһыҙ ләззәт бирә ине. Ҡасан булһа ла барыбер Гөлшат үҙенеке булыр тигән хыял менән йәшәне. Ихатаһында нимә төҙөһә лә уның менән уртаҡ мөлкәт булыр тип өмөтләнде. Дүрт тиҫтә йыл бергә йәшәһәләр ҙә, уның тормошонда Миңлесырурға бөтөнләй урын булманы.

Ҡорҙашын урманда ағас баҫып, ваҡытһыҙ гүр эйәһе булғас, Хәлит эстән генә тантана итте. Ә Миңлесырур ауырып йығылғас, нисек ҡыуанғанын белһәгеҙ! Хоҙай Тәғәлә уға йәшлек мөхәббәтенә - Гөлшатына - табан шулай юл аса түгелме? Ҡырҡ йыл бергә ғүмер иткән ҡатынының үлемен теләп, күпме йоҡоһоҙ төн үткәрҙе бит. Сағырып - ҡунағың килмәһә, ауырып - ҡатының үлмәһә, ҡыйын икән, тип, мыҫҡыл итте. Ғүмер буйы тешен ҡыҫып, сабыр ғына көн иткән Миңлесырур шәбәйеп, аяғына баҫҡас та, уйламағанда кесе ҡыҙына барып йәшәргә ризалашты ла ҡуйҙы. Хәлиткә рәсми рәүештә айырылышырға ҡарар итеүен белдерҙе. Шуныһы ғәжәп: ауылда был хәлгә береһе лә аптыраманы.

Тиҫтә йылдар йәшерен яратып, күңеленән генә йөҙәр-меңәр тапҡыр һөйөүе тураһында белдерткән Хәлит ни өсөндөр Гөлшат уның яратыуы хаҡында беләлер, тип уйланы. Улай ғына ла түгел, хатта уның да үҙенә битараф түгеллегенә ышана ине. Тик ул уйлағанса килеп сыҡманы, күршеһе хатта ботон сабып көлдө. Шулай ҙа ҡырҡа ғына баш та тартманы, уйларға һүҙ бирҙе. Бер-береһенә сәйгә йөрөштеләр, әммә Хәлит көләкәс Гөлшаттан бик тиҙ ялҡты. Уның эшен, ҡылығын Миңлесырурҙыҡы менән сағыштырҙы. Бер аҙҙан ул йәшлек мөхәббәте ҡатынының тырнағына ла тормағанын аңланы. Аңланы ла ул, тик һуң ине. Тәүҙә Хәлит Миңлесырурҙың башҡа бер ҡасан да бында кире ҡайтмаҫын бик яҡшы белһә лә, бер нисә тапҡыр шылтыратып, ҡайтыуын үтенде, ялбарҙы. Ҡатыны киң күңелле, йомшаҡ тәбиғәтле булһа ла, иренең күҙ йәшен түгеп илағанын күреп йәлләһә лә, кире ҡайтманы. Хәлитте һуңғы юлға оҙатҡанда ғына күрҙе уны ауыл халҡы...

Был ваҡиғанан ауылдаштары ниндәй һабаҡ алды, тиһегеҙме? Һауалағы торнаға ымһынып, ҡулындағы сәпсекте ысҡындырма! Янындағы кешеңдең ҡәҙерен бел!

Ғүмүмән, һәр кешенән, хәл-ваҡиғанан ниндәй ҙә булһа - әсеме ул, яҡшымы - һабаҡ алаһың. Кемдер беҙҙе көслөрәк булырға, икенселәр сабырлыҡҡа өйрәтә. Берәүҙәр ғәфү итергә, башҡалар бәхетле булырға, шатланырға өйрәтә. Ә кемдер бер нәмәгә лә өйрәтмәй, киреһенсә, һындырырға тырыша. Әммә беҙ уларҙан да тормош һабаҡтары алабыҙ. Шуға күрә, һәр кемдең ҡәҙерен белергә тейешбеҙ. Хәлит ҡартты шуға ла ауылдаштары ер ҡуйынына бөтә йоланы үтәп, хөрмәтләп һалды.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*✓ Етәкселәрегеҙ, хәләл ефеттәрегеҙ, яҡындарығыҙ менән ниндәйҙер бәхәстәр йәки талаш килеп тыуһа, ситләшегеҙ. Ҡайҙалыр яңғыҙ ғына тыныс урында ултырығыҙ, тынысланығыҙ.*



*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

**Оҙаҡ ваҡыт бер төрлө генә позала ултырған кеше ярты-бер сәғәттән һуң нисек тә уңайлыраҡ ултырыу өсөн борғолана башлауы барығыҙға ла мәғлүмдер: йә аҫҡараҡ шылаһың, йә арҡанды тура тотаһың, йә көмөрәйәһең, йә аяҡтарыңды салаһың. Бөгөн тап ошо аяҡтарҙы салып ултырыуҙың организмға зыяны хаҡында һөйләшмәксебеҙ. Бындай поза веналарҙың варикоз киңәйеүенә, юғары ҡан баҫымына, хатта табандағы нервыларҙың зарарланыуына килтерә, тиҙәр. Әммә быларҙың ҡайһыһы дөрөҫ, ҡайһыһы уйҙырма?**



# НИ РӘҮЕШЛЕ УЛТЫРАҺЫҢ БИТ...

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырып, тромбтар барлыҡҡа килеүен ҡуҙғытабыҙ. Дөрөҫ! Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, салып ултырылған аяҡтар ҡан әйләнешенә ҡамасаулай, был инде тромбтар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Шуға күрә, ҡан тамырҙары проблемалары менән интегеүселәргә аяҡтарын салып ултырыу тыйыла.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырғанда табан нервыларына зыян килә. Дөрөҫ! Әгәр бик йыш аяҡтарҙы салып ултырғанда, аяҡтарҙы һәм табандарҙы контролләгән нервыларҙы зарарларға мөмкин. Сираҡ ҡушары нервыһы аяҡтың аҫҡы өлөшөнә, табанға һәм бармаҡтарға хәрәкәт импульсы һәм тойғолар биреүҙә ҡатнаша. Сираҡ ҡушары нервыһының боҙолоуы бик йыш аяҡтарҙы салып ултырыуға бәйле.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырыу варикоз барлыҡҡа килтерә. Уйҙырма! Күпселек табиптар был фекерҙе кире ҡаға Йәш үҙгәрештәре, генетик факторҙар, артыҡ ауырлыҡ, йөклөлөк - варикоздың төп сәбәптәре.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырыу һынкәүҙәгә насар йоғонто яһай. Уйҙырма! Дөрөҫ булмаған һин аяҡтарҙы салып ултырғанда ниндәйҙер эҙемтәләргә килтереүе мөмкин, әммә киреһенсә түгел. Оҙаҡ ваҡыт уңайлыҙ креслола ултырыу һын-кәүҙәгә күберәк зыян килтереүе мөмкин.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырыу ҡан баҫымын күтәрә. Дөрөҫ! Әммә был ҡан баҫымы күтәрелеү сиренә килтермәй, ә тубыҡ аҫтындағы тамырҙар ҡыҫылған ваҡытта уны ваҡытлыса ғына үҙгәртә.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырыу янбаш һөйәгенә баҫым яһай. Уйҙырма! Киреһенсә, был осраҡта янбаш тирәһе ныҡына, сөнки бындай торош мускулдарҙы аяҡтарҙы салмай ултырғандағыға ҡарағанда - 11, баҫып торғанға ҡарағанда 21 тапҡырға нығыраҡ һуҙа.

Ысынбарлыҡмы, әллә уйҙырмамы: аяҡтарҙы салып ултырыу арҡаны һәм муйынды ауырттыра. Дөрөҫ! Аяҡтарҙы салып ултырыуҙың, ысынлап та, арҡаға һәм муйынға йоғонтоһо бар. Бындай торош муйынға һәм арҡаның урта, аҫҡы өлөшөнә артыҡ баҫым яһай. Аяҡтарҙы салып ни тиклем оҙаҡ ултырһағыҙ, шул тиклем умыртҡалыҡҡа көс төшә. Күпмелер ваҡыттан һуң был ҙур проблемаға әүерелеүе мөмкин.

Хәҙер аяҡтарҙы салып ултырыуҙың кире яҡтарын белдегеҙ. Бәхетиһән, насар эҙемтәләре күберәк икән, шуға күрә, бындай позаны һайламаҫҡа тырышығыҙ. Нисек ултырыуығыҙҙы контролләгеҙ һәм сәләмәт булығыҙ!

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ТЫМАУ ТЕЙГӘНДӘ...

- 1 ҡалаҡ ромашкаға бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, биш сәғәт йылыла тәнәтергә кәрәк. Шунан болғатырға, һөҙөргә һәм көнөнә өс тапҡыр танауға тамыҙырға.
- 3 ҡалаҡ ваҡлап туралған һуғанға 50 мл йылы һыу ҡойорға, ярты балғалаҡ бал өҫтәп, ярты сәғәт тоторға. Был һыуҙы көнөнә өс тапҡыр танауға тамыҙып торорға.
- Һуған һәм һарымһаҡты ваҡлап турап, көнөнә дүрт тапҡыр 10-15 минут тирәһе танау һәм ауыҙ аша һулап ултырырға.
- Тымаулай башлаған та, табанға горчичник ҡуйып, ҡалын йөн ойоҡ кейергә һәм ике сәғәт үткәс, алып, ун минут бүлмә буйлап шәп-шәп атлап йөрөп алырға кәрәк.
- Танау эсенә каланхоэ япрағының һутын күп итеп һөртергә. Көнөнә биш тапҡыр танауҙың ике тишегенә лә 4 тамсы алоэ һутын тамыҙып торорға.
- Танауҙың ике тишегенә лә 5-6 тамсы сөгөлдөр һутын тамыҙып, мамыҡ тампондарҙы шул һутҡа манып, танауға тығып йөрөргә.
- Бер ус эвкалипт япрағына ҡайнар һыу ҡойорға һәм башты таҫтамал менән ҡаплап ултырып, күтәрелгән быу менән тын алырға. Тик тынды танау менән алып, уны ауыҙ аша сығарыу мөһим.
- Тымау ныҡ йонсотҡан осраҡта ҡыҙған табаға ҡойолған һеркәнән күтәрелгән боҫ менән тын алып ҡарарға мөмкин.
- Нашатыр спиртына сылатылған мамыҡты танауҙың ике тишеге менән сиратлаштырып еҫкәргә.
- Кәрән, арыш оно һәм балды бер тигеҙ нисбәттә һалып бутарға. Килеп сыҡҡан ҡамырҙан йәймә яһап, танау биленә һалырға. Был рәүешле мотлаҡ өс төн дауаланырға.
- Танауға көнөнә өс тапҡыр кәбеҫтә һуты тамыҙып торорға. Табандарға йод һөртергә һәм ҡоро гәрсис һибелгән йөн ойоҡ кейергә кәрәк.
- Танауҙың лайлалы тиресәһенә вазелин һөртергә, шунан танауҙың ике тишегенә лә ыуалған һарымһаҡ һөртөлгән мамыҡ тығырға. Был процедураны көнөнә өс тапҡыр эшләргә.
- Һарымһаҡ майы ла тымау тейҙергәндә файҙалы дауа. Бер һарымһаҡ бүлкәһенә бер ҡалаҡ үҫемлек майы ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙөп алып, тәүлек дауамында 3-4 тапҡыр танауға тамыҙып йөрөргә кәрәк.
- 1 ҡалаҡ ҡаты итеп ҡайнатылған ҡара сәйгә ярты балғалаҡ бал һәм 15 тамсы эвкалипт төнәтмәһе ҡушып бутағыҙ. Эвкалипт төнәтмәһен дарыуханала табырға була. Килеп сыҡҡан дарыуҙы көнөнә 3-4 тапҡыр бишәр тамсыға тиклем танауға тамыҙырға ярай. Уны хатта бәләкәй балаларҙы дауалағанда ла ҡулланырға була.

*ҠОЛАҠ ҺАЛ!*

# БАЛАЛАР МАУЫҒЫУЫ

**✓ Спиннерҙар балалар психикаһы өсөн зыян килтермәй, әммә ваҡ деталдәр арҡаһында хәүефле булыуы бар.** Ошо хаҡта уйынсыҡты экспертизалау йомғаҡтары буйынса Роспотребнадзор идаралығында хәбәр иттеләр. Август айында Роспотребнадзор балаларҙың һаулығын һаҡлау өлкәһендә ғилми-тикшеренеү ойошмаларына спиннерҙарҙың балалар һаулығына тәьҫир мөмкинлеге тураһында һорау йүнәлтте. Экспертиза йомғаҡтары буйынса уйынсыҡтың балалар психикаһына тәьҫире йәһәтенән ыңғай йәки кире сифаттар белдермәүе асыҡланған, тип хәбәр ителәə ведомство сайтында. Эксперттар уйынсыҡты боҙолған йәки һынған киҫәктәренә тикшерергә кәңәш итә. Бынан тыш, яҡтыртыу элементтары булған һәм батарейкала эшләгән спиннерҙарҙы уны йотоуҙы йәки бәләкәй өлөштәренең танау юлдарына эләгеүҙе булдырмау өсөн өлкән кешеләр ҡарауында ҡулланырға мөмкин.

**✓ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә.** Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үсмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үсмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үсмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Релаксация беҙгә үҙебеҙҙе яҡшы тойорға ярҙам итә, әммә уның башҡа ыңғай яҡтары ла бар - эргәбеҙгә тормошҡа үҙебеҙ кеүек ҡараған һәм шундай уҡ көйләнешле кешеләрҙе йәлеп итәбеҙ. Йәғни тыныс һәм тотороҡло ваҡытта шундай уҡ низағты яратмаған һәм көрсөк тыуҙырмаған кешеләрҙе ылыҡтырабыҙ. Агрессив көйләнгән кеше күҙлегенән ҡарағанда, тыныс һәм ыңғай кеше психҡа оҡшаған, шуға күрә агрессор, үҙен хәүеф аҫтына ҡуймаҫ өсөн, икенсе урында тауыш ҡуптарасаҡ. Шундай ҡыҙыу холоҡло кешеләр менән эш иткәндә, үҙеңде тыныс тоторға кәрәк һәм улар йәлап һеҙгә көйләнәсәк һәм үҙҙәрен тәртипле тота башлаясаҡ. Әгәр релаксация техникаһын үҙ аллы өйрәнә алмайһығыҙ икән, шул туралағы китап һатып алығыҙ йәки курстарға яҙылығыҙ.

## Төп ҡағиҙәләр

- Көнелдә дауалағанда һәр көн мөһим. Шуға күрә был эш менән һәр көн бер үк ваҡытта шөғөлләнегеҙ. Иң яҡшыһы - бер нәмә лә иғтибарығыҙҙы ситкә йәлеп итмәгән саҡта - иртән шөғөлләнеү. Был саҡта тотош көнгә етерлек энергия туплаяһығыҙ.
- Тәнде һәм аңды көсһөҙләндереүҙе ултырған килеш башҡарырға кәрәк. Әгәр ятһағыҙ, йоҡлап китәсәкһегеҙ.
- Релаксацияға ваҡытығыҙ булмаһа - табығыҙ! Медитация ярҙамында оҙайлы киләсәктә процесҡа ҡарағанда күберәк ваҡыт экономиялаясаҡһығыҙ. Кеше өсөн медитация - автомобиль өсөн профилактика йәки тюнинг кеүек үк. Көнөнә 20 минут бүлегеҙ һәм барлыҡ системалар күпкә һөҙөмтәлерәк эшләй башлар.

## Кешеләр асылы булһа?

Етәкселәрегеҙ, хәләл ефеттәрегеҙ, яҡындарығыҙ һәм алыҫ туғандарығыҙ менән ниндәйҙер бәхәстәр йәки талаш килеп тыуһа, ситләшегеҙ. Ҡайҙалыр яңғыҙ ғына тыныс урында ултырығыҙ, тынысланығыҙ. Барлыҡ кешеләрҙе улар нисек бар - шулай ҡабул итергә тырышығыҙ. Уларға мөхәббәт энергияһын ебәрегеҙ. Бәлки, был асыл һеҙгә радикаль йәки авангард булып тойолор, шулай ҙа ҡулланып ҡарағыҙ, ләкин уның нисек эшләгәнен аңларға тырышмағыҙ. Бары тик ҡулланығыҙ. Күптәр шулай эшләй һәм иҫ киткес һөҙөмтә ала. Ҡыҫҡаһы, уның менән көндө тыныс һәм низағһыҙ үткәреүгә көйләнергә кәрәк.

## Үҙегеҙгә йәшәргә ярҙам итегеҙ!

Иғтибар иткәнегеҙ бармы: тәү ҡарашҡа тәбиғәттәге оҙайлы һәм ялҡытҡыс кеүек күренгән йәйәүле поход ниндәй энергия менән тултыра һәм бер нисә сәғәт сауҙа үҙәгендә йөрөгәндән һуң ниндәй кисерештәр тыуа? Беҙҙе урап алған һәр нәмәнең - үлән булһынмы ул, бетон, пластик йәки полиэстер - үҙ тирбәлеше бар. Урман һәм баҡсалар тирбәлештәре менән дауалай, сөнки беҙҙең сарыф ителгән энергияны тултыра. Тимербетон мегамаркеттар һәм автотуҡталыштар бөтөнләй икенсе тирбәлештә һәм улар беҙҙән энергияны һура.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**

**(Дауамы бар).**



## 29 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 02.35, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Икра". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Познер" (16+).
00.30 "Налет". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Чистосердечное признание". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм".**
**10.00 "Девочка со спичками". Худ. фильм (12+).**
**11.00 Итоги недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Лорд вор". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 30 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.40, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.50 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Икра". 3-я и 4-я серии (16+).
23.35 "Налет". 3-я и 4-я серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "семейные ценности". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 11-я и 12-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Щелкунчик". Худ. фильм (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**10.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**10.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Шпион по соседству". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 31 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.40, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.50 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Икра". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Налет". 5-я и 6-я серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Шесть миллионов свидетелей". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 13-я и 14-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Соляная принцесса". Худ. фильм (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана".**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Загадки космоса" (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Охотники за разумом". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 1 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.40, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 01.35 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.50 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Икра". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 "Налет". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Горячие следы". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Склифосовский". 15-я и 16-я, заключительная, серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Поцелуйте невесту!" Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Принц-медведь". Худ. фильм (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Загадки космоса" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Невидимый". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 2 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон.
23.15 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Юбилейная церемония вручения премии "Грэмми".
02.15 "Он, я и его друзья". Комедия (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Чужая дверь". Детективный сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Юморина" (12+).
23.15 "Человеческий фактор". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
02.50 "Сталинградская битва". Док. фильм.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Алаверды Геннадию Хазанову" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Т.Давлетбердина. "Моя семья" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**24.00 "Падение Олимпа". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 М.Карим. "В ночь лунного затмения" (12+).**

## 3 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

04.50, 06.10 "Горячий снег". Худ. фильм (12+).
06.00, 09.00 Новости.
07.00 "Смешарики. Спорт".
07.15 "Играй, гармонь любимая!"
08.00 "Умницы и умники" (12+).
08.45 "Слово пастыря".
09.15 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
10.20 "Бриллиантовый вы наш!" К 95-летию Леонида Гайдая (12+).
11.20 "Сак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "12 стульев". Комедия.
15.10 "На Дерибасовской хорошая погода, или На Брайтон-бич опять идут дожди". Комедия (16+).
17.00 "Как Иван Васильевич менял профессию" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Бриллиантовый вы наш!" (12+).
24.00 "Преданный садовник". Драма (16+).
02.20 "Нападение на 13 участок". Худ. фильм (16+).
04.20 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.40 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.35 "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00, 11.20 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" (16+).
14.00 "Исцеление". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Выбор". 4 серии. Драматический сериал (16+).
01.00 "Хочу замуж". Худ. фильм (12+).
03.00 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Планета 51" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 12.00 "Тәмле" (12+).**
**11.30 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**17.00 "Любовь - душа мелодии".**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30, 01.45 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**24.00 "Падение Лондона". Худ. фильм (16+).**
**02.30 З.Атнабаева. "Прерванная свадьба" (12+).**

## 4 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Просто Саша". Худ. фильм (16+).
06.00, 09.00 Новости.
07.15 "Смешарики. ПИН-код".
07.25 "Часовой" (12+).
07.55 "Здоровье" (16+).
09.15 "Поле чудес" (16+).
10.20 "В гости по утрам" с Марией Шукшиной.
11.10 "Дар сердечный". К 85-летию Игоря Кваши (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Верные друзья". Комедия.
15.10 "Страна Советов. Забытые вожди" (16+).
17.10 "Я могу!" Шоу уникальных способностей.
19.15 "Звезды под гипнозом" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?". "Дети XXI века".
23.40 "Анж и Габриель". Мелодрама (16+).
01.25 "Хичкок". Худ. фильм (16+).
03.15 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.45 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00, 14.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Чужие дети". Мелодрама (12+).
16.05 "Завтрак в постель". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Допинг". Расследование Андрея Медведева (12+).
01.50 "Право на правду". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Сборник советских мультфильмов.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Алтын". Музыкальная премия (12+).**
**18.15, 01.00 "Затерянный город Z". Худ. фильм (16+).**
**20.45 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**

*КӨНАУАЗ*

# ДИПЛОМАТИЯ...

## үкенеү менән булышмай

**Рәсәйҙең тыныслығы һәм тотороҡлоғонда, донъя кимәлендә абруйлы урында булыуында, башҡалар менән бер рәттән үҙ һүҙен әйтә алырлыҡ дәүләт булараҡ ҡабул ителеүендә Сит ил эштәре министрлығының эшмәкәрлеге мөһим. Шуға күрә әлеге дәүләт органы етәксеһе Сергей Лавровтың Рәсәй өсөн артабан тышҡы сәйәси өлкәлә ниндәй йүнәлештәрҙең өҫтөнлөклө икәнлеген билдәләүенә иғтибар итергә кәрәктер. Яңыраҡ булып уҙған матбуғат конференцияһында министр нәҡ ошо моменттарҙы күҙ уңында тотоп, сығыш яһаны.**

Иран йәҙрәһе буйынса килешеүҙе һаҡлап ҡалыу Рәсәй алдында торған өҫтөнлөклө мәсьәләләрҙең береһе, тип билдәләне ул. АҠШ-тың ошо йүнәлештәге һуңғы белдереүе, йәғни Дональд Трамптың был килешеүҙән сығыу менән янауы оптимизм өҫтәмәй, әлбиттә, шулай ҙа башҡа Европа илдәренең килешеүҙең бөтә шарттарын да үтәүе әлеге мәсьәләнең контролдән сыҡмауына булышлыҡ итер, тигән ышаныс белдерҙе Сергей Лавров.

Рәсәй менән Американың мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы һорауҙар күп булды осрашыуҙа. Сергей Лавров фекеренсә, АҠШ һәм тарихи Көнбайыш үҙҙәренең әлегә тиклем булған өҫтөнлөклө позицияларын юғалта бара. Ул шулай уҡ рәсми Вашингтон һәм уның союздаштарының тышҡы сәйәсәттә тик ультиматумдар теле менән генә етәкселек итеүенә үкенес белдерҙе.

Сириялағы хәлдәрҙе барлап, Сит ил эштәре министрлығы башлығы, АҠШ-тың был илдә Сирияның демократик көстәренә сик хәүефһеҙлеге зоналары төҙөүгә булышлыҡ итергә теләүен тәнҡитләп, был аҙым илдең бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итмәйәсәк, тип белдерҙе. "Был Төркиә һәм Ираҡ, ә Евфрат йылғаһынан башлап көнсығышҡа ҡарай сиктәрҙә зур биләмәне айырыу, тигән һүҙ. Ә был зонаның АҠШ етәкселеге аҫтындағы төркөм ярҙамында контролдә тотолаһағы хаҡында белдереү, Сирияны бүлгесләүгә табан йүнәлтелгән аҙым һәм ул оло хәүефһеҙлек тыуҙыра", - тине Сергей Лавров.

Бөтә донъяны көсөргәнешлектә тотҡан Израиль һәм Палестина мәсьәләһенә ҡағылып, Сергей Лавров бөгөнгө көндә улар араһында тура диалогты ойоштороу мөмкинлеге юҡ кимәлендә, тине. Дональд Трамптың АҠШ илселеген Тель-Авивтан Иерусалимға күсереүен Палестина халҡының ни өсөн ауыр кисереүен билдәләп: "Уларҙы аңларға була. Күп йылдар дауамында улар үҙҙәренә ҡарата бер нәмә лә талап итмәйенсә, бер яҡлы ташламалар эшләп килде. Шулай уҡ палестиндар Израиль менән тура һөйләшеүҙәргә лә әҙер инеләр, ләкин әлеге ситуацияла, ҡыҙғанысҡа күрә, быны көтөп булмай", тип үҙ фекерен белдерҙе.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА**
**әҙерләне.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ҠУРАЙ - МИЛЛИ БРЕНД

**Интеллектуаль милек буйынса федераль хеҙмәткә башҡорттарҙың милли уйын ҡоралы ҡурайҙы музыкаль бренд булараҡ теркәү хаҡында тәүге ғариза бирелгән. Был хаҡта Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте.**

"Әле Рәсәйҙә бер генә инструмент - Тула гармуны ғына теркәлгән. Уға ҡурай ҙа өҫтәлер, тип өмөтләнәбеҙ", - тине республика вәкиле парламенттың юғары палатаһы ултырышында. Билдәле булыуынса, Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенко сенаторҙарға үҙ төбәктәрендә икешәр брендты теркәргә ҡушҡайны. Быйылғы ултырышта ул шул хаҡта иҫкә төшөрҙө. "Ләкин беҙ килгән һорауҙарҙы тикшергәндән һуң теләктең ҙур булыуын, әммә әлегә ошо өлкәлә белемдең аҙыраҡ икәнлеген аңланыҡ. Шуға бәйле беҙ мартта семинар үткәрергә тәҡдим итәбеҙ, унда төбәк брендын дөрөҫ теркәүҙе аңлатыу күҙаллана", - тип билдәләне Лилиә Ғүмәрова һәм сенаторҙарҙан март айына тиклем потенциаль брендтар менән таныштырыуҙарын һораны.

# СТӘРЛЕТАМАҠТА...

**Башҡортостанда "Етегән-2018" Асыҡ республика конкурсы башланды. Ул Башҡортостан Республикаһында Ғаилә йылына арналған "Етегән - ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ билдәһе" республика байрамы барышында уҙғарыла.**

Бәйгенең финалы Стәрлетамаҡта 1 мартта үтәсәк. Унда һәр кем ҡатнаша ала. Конкурста түбәндәге номинациялар ҡаралған: Һөйөү тураһында шиғырҙар һөйләү; Мөхәббәт хаҡында йырҙар башҡарыу; Иң яҡшы бейеү (дуэт); Мөхәббәт тураһында иң яҡшы ҡыҫҡа метражлы фильм (5 минутлыҡ); Башҡорт телендәге иң яҡшы флаерҙар һәм открыткалар; Һөйөү темаһына иң яҡшы фотоһүрәттәр; Башҡорт йырҙарына һәм көйҙәре аҫтында "Етегән-2018" байрамына иң яҡшы флешмоб. Конкурс йомғаҡтары буйынса жюри һәр номинацияла өс призлы урынды билдәләй. Еңеүселәргә һәм лауреаттарға ойоштороу комитетынан дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырыу ҡаралған. Сара 12 ғинуарҙан 25 февралгә тиклем барасаҡ ... Сара 12 ғинуарҙан 25 февралгә ҡәҙәр дауам итә. Эштәрҙе 20 февралгә тиклем ҡатнашыусының ғаризаһы менән ulya2017@yandex.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Тулыраҡ мәғлүмәт - конкурстың рәсми төркөмөндә. Байрам 2016 йылдан башлап әҙҙың тәүге көнөндә үткәрелә. Конкурсты ойоштороусылар: Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Мәғариф министрлығы, Халыҡтар дуҫлығы йорто, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Стәрлетамаҡ бүлексәһе, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы.

# МӘҘӘНИӘТ ЙОРТТАРЫНА ЯРҘАМ

**2018 йылда "Урындағы мәҙәниәт йорто" проекты буйынса ғаризалар ҡабул итеү башланды. Был турала проекттың төбәк координаторы Эльвира Айытҡолова хәбәр итте.**

"Урындағы мәҙәниәт йорто" - "Берҙәм Рәсәй" партияһы проекты. 2017 йылда унда Башҡортостан Республикаһы ҡатнашҡайны. Проект ауыл мәҙәниәт йорттарын яңыртыуға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән. Ауыл ерендә мәҙәниәт йорттары халыҡтың ялын ойоштороу, халыҡ ижадын һаҡлау, балаларға һәм йәштәргә өҫтәмә белем биреү үҙәге булып тора. "Быйыл бер нисә яңылыҡ бар: смета булғанда, мәҙәниәт йорттарын ремонтлауға аҡса планлаштырырға мөмкин. Үткән йылда финанслау отҡандар ҙа яңынан ғариза бирә ала", - тип билдәләне Эльвира Айытҡолова. Документтар исемлеге һәм ғаризаның формаһы Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы сайтында "Документтар" бүлегендә бирелгән. 2017 йылда "Урындағы мәҙәниәт йорто" башланғысына Башҡортостанға федераль бюджеттан 32 объектты яңыртыу өсөн 46 миллион 248 мең һум йүнәлтелде. Шулай итеп, республика Рәсәй төбәктәре араһында субсидиялар күләме буйынса өсөнсө урынға сыҡты.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Ғинуар - февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (12) дүшәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:15 | 17:45 | 19:15 |
| 30 (13) шишәмбе | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 16:17 | 17:47 | 19:17 |
| 31(14) шаршамбы | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 16:19 | 17:49 | 19:19 |
| 1 (15) кесе йома | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 2 (16) йома | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:22 |
| 3 (17) шәмбе | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |
| 4 (18) йәкшәмбе | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**28 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 12.00 6+
**28 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+
**30 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**31 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00 6+
**31 ғинуар "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+
**1 февраль "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**2 февраль "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 ғинуар "Пес Барбос и новогодний кросс"** (И. Казакова), бәләкәстәр өсөн Яңы йыл әкиәте. Башлана 12.00 0+
**31 ғинуар "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**27, 28 ғинуар "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+
**27 ғинуар "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+
**28 ғинуар "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+ Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия 12+
**1 февраль "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбаев), комедия 12+
**2 февраль** "Күптәрҙе бит йырҙар осраштыра..." Н. Нәжмиҙең тыуыуына 100 йыл. "Аҡҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө һәм театр актерҙары ҡатнаша.

# ИҒТИБАР: БӘЙГЕ

**"Башҡортостан" ТРК ДУП-һының "Ҡурай-ТВ" телеканалы "Ҡурай даны" тигән премия булдырҙы. Ул башҡорт телен пропагандалауға һәм һаҡлауға, халыҡ йолаларын үҫтереүгә һәм тамашасылар аудиторияһын йәлеп итеүгә йүнәлтелгән "Ҡурай" йыр-моң-күңел асыу телеканалын популярлаштырыу маҡсатында ойошторолдо.**

Премия номинациялары: "Йыл йырсыһы"; "Йыл меценаты"; "Эшлекле ханым"; "Ижади ғаилә"; "Ҡул оҫтаһы"; "Ер кешеһе"; "Ҡәләм оҫтаһы"; "Һөнәр оҫтаһы"; "Миһырбанлы ғаилә"; "Иң шәп клип төшөрөүсе". "Ҡурай даны" премияһы дүрт этапта уҙғарыла: 1-се тур - ябыҡ (ситтән тороп). Жюри тамашасыларҙың теләктәре буйынса һөнәри ҡаҙаныштарынан сығып, дәғүәселәрҙе билдәләй. 2-се тур - таныштырыу. Концерт форматында уҙа. Унда тамашасы номинацияла ҡатнашыусылар менән таныша. 3-сө тур - телевизион (һайлап алыу). Йыл дауамында "Ҡурай" каналында номинанттар тураһында тапшырыуҙар эфирға сыға. Тамашасылар ебәргән SMS-тауыш биреү юлы менән еңеүселәр билдәләнә. 2019 йылдың февраль айында Гала-концерт була. Еңеүселәргә исемле миҙалдар, дипломдар, аҡсалата һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырыла.

✓ - *һаңраумын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән тауыштарҙы ишетмәйем.*
*Телһеҙмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән һүҙҙәрҙе һөйләмәйем.*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# МӘҘӘНИӘТ - МИЛЛӘТТЕ,

## милләт ошо ерҙе һаҡлай

**Учалы филармонияһы - республикабыҙҙағы берҙән-бер муниципаль кимәлдәге филармония булып иҫәпләнә. Талантлар төбәгендә ижад итеүсе был мәҙәниәт усағы ниндәй уңыштарға өлгәшкән, киләсәккә ниндәй уй-хыялдар менән йәшәй, тигән һорауҙар менән Учалы филармонияһы солисы, республика һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре Ынйы Дамир ҡыҙы ӘХМӘТОВАға мөрәжәғәт иттек.**



**Ынйы Дамир ҡыҙы, һеҙ, моғайын да, филармонияла ул ишектәрен асҡан көндән эшләйһегеҙҙер?**

- Күптәр хәтерләйҙер, филармониябыҙ 2000 йылда, ҡыҙғаныҫҡа күрә, арабыҙҙан бик иртә киткән бөйөк шәхес Ринат Абдуллиндың тырышлығы менән асылғайны. Был төбәктә бит башҡорт оҙон йырын бар нескәлеген аңлап йырлайҙар, башҡорт бит еүен бар камиллығында тойоп бейейҙәр. Бында һәр мәктәптең - бейеү ансамблдәре, һәр ауылдың үҙенең үҙешмәкәр коллективтары бар. Шуға ла филармония кеүек мәҙәниәт усағы бик кәрәк ине. Ул үҙенә күрә районды мәҙәни үҙәге булып тора. Ошо 17 йыл эсендә матур коллектив тупланды, бөгөн ҡаланы ла, районды ла филармонияһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Филармонияла эшләп килгән "Алтын-Ай" тип аталған өлгөлә балалар бейеү ансамбле тураһында ла ишетеп торайығыҙҙыр, улар сит илдәргә сығып, лауреат исемдәре яулап ҡайта.

Үҙем профессиональ сәхнәлә 1992 йылдан, филармонияға килгәнгә тиклем "Таусы" мәҙәниәт һарайында эшләнем. Балаларҙы йырларға ла өйрәтә инем. Бөгөн филармония солисымын, лекторий менән район мәктәптәре буйлап та йөрөйбөҙ. Ғөмүмән, Учалы районында мәҙәниәткә шул тиклем иғтибар көслө. Эшһеҙ бер көн ултырмайбыҙ. Әле бына Яңы йыл шыршыһын асыу тантанаһында ҡатнаштыҡ. Балалар өсөн "Өс батырҙың Яңы йыл мажаралары" тигән мюзикл да әҙерләнә артистар.

**Филармония концерттар әҙерләүҙән тыш, төрлө фестиваль-бәйгеләр ҙә үткәрә. Ошо саралар тураһында ла телгә алһағыҙ ине?**

- Учалы районы, Учалы ҡалаһы хакимиәттәре менән берлектә үтә бындай саралар. Бөтөн Башҡортостан 2020 йылда үтәсәк Фольклориадаға әҙерләнгәндә беҙ ҙә ситтә тороп ҡалмаҡ. Халыҡтың рухи тормошон байытыу, уларҙы милли мәҙәниәтебеҙгә йәлеп итеү маҡсатынан "Етегән йондоҙ" тигән фестиваль үтте. Учалы, Белорет, Бөрйән райондарынан, Силәбе өлкәһенән фольклор коллективтар ҡатнашты унда. "Сал Урал" хореография сәнғәте фестивале лә күптәргә таныш. Былтыр ул Республика Грантына ойошторолдо. Силәбе һәм Ҡурған өлкәләрендә йәшәгән башҡорттар араһында башҡорт бейеүе онотолмаһын, тигән изге маҡсаты бар был сараның. Уның сиктәрендә ошо төбәктәрҙә оҫталыҡ дәрестәре үткәрелә. Мәҙәниәт бит ул телде, тел - милләтте, милләт ошо ерҙе һаҡлай. Шуға ла бындай сараларҙы үткәреүҙән баш тартмайбыҙ. Директорыбыҙ Әлмир Миңлеәхмәт улы Мөхәмәтйәров йәш булһа ла, рухлы һәм талапсан. Милли мәҙәниәтте һаҡлау һәм үҫтереү беҙҙең ҡулда икәнде яҡшы аңлайбыҙ һәм күберәк эшләргә тырышабыҙ. Иң мөһиме, тыныслыҡта һәм татыулыҡта йәшәйек. Хеҙмәттәштәремә яңы ижади үрҙәр яуларға насип булһын. Үҙемдең генә лә йырланмаған әллә күпме йырҙарым ята.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

ӨФӨЛӘ БАР БЕР ЙОРТ

# ҠОМАРТҠЫ БУЛАРАҠ...

**1930 йылдарҙа төҙөлгән Өфө почтамты "Элемтә йорто" тигән элекке исеме аҫтында Рәсәй Федерацияһының тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары реестрына индерелде.**

Был хаҡта Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралығының бойороғонда хәбәр ителә. Бойороҡ ҡомартҡының аныҡ координаталарын, бинаның тышҡы йөҙөн һәм мөһим архитектура элементтарын, шулай уҡ ҡомартҡыны файҙаланыу режимын билдәләй.

Архитектор Николай Зарубиндың проекты буйынса төҙөлгән бина Ленин менән Коммунистик урамдары мөйөшөндә урынлашҡан. Сергей Синенко блогында хәбәр ителгәнсә, төҙөлөш 1930 йылда башлана һәм финанслау мәсьәләһе арҡаһында һигеҙ йылға һуҙыла. Элемтә йортон төҙөү ҡалаға ул мәлдәге хаҡтар буйынса 2,5 миллион һумға төшә. Бөйөк Ватан һуғышы башланған йылда бишенсе ҡаты төҙөлә. Ҡыйығында Коминтерн станцияһының радиовышкаһы ҡуйыла, ул һуғыш йылдарында Европа һәм көнсығыш телдәрендә фашистарға ҡаршы тапшырыуҙар алып бара. 1957 йылда Өфө почтамты үҙенең әлеге исемен ала. Элемтә йортона ҡуҫкәнсе Өфөләге почта үҙәге Черны-шевский урамынан алыҫ түгел урында - "Сахаров телеграфы" тип йөрөтөлгән йортта урынлашҡан булған. Был ҡомартҡы - шәхси милектә (һәм 200 миллион һумдан ашыу хаҡҡа һатыла).




АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАРТ ҠӘҘЕРЕН...

## йәш белмәй

Ҡарт ҡәҙерен йәш белмәй, ауырыу ҡәҙерен һау белмәй, фәҡир ҡәҙерен бай белмәй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

Уҡытыусыларға миһырбанлы бул. Улар һинең хөрмәтеңә мохта? булмаһалар ҙа, йәлләүеңә мохта?.

**(Эшли Брильянт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: Егерме биш йәшлек бер егет алма баҡсаһынан йыраҡ түгел урында ял итеп йөрөгән. Бер ваҡыт уның күҙҙәре ағастағы алмаларға төшә һәм шул мәлдә ул үҙенең бик ныҡ асыҡҡанын иҫенә төшөрә. Шунда ул баҡсаға яҡын килә һәм уны-быны уйлап тормаҫтан, ағастан бер алма өҙөп ала. Алманың яртыһын ашап бөткәс кенә уны баҡса хужаһынан рөхсәтһеҙ өҙөп алыуы иҫенә төшә. Ул тирә-яғына ҡарай һәм яҡында ғына бер ир ултырыуын күреп ҡала. Егет ғәйепле төҫ менән был ир янына килә һәм: "Мин бик ныҡ ас инем. Һинең баҡсаңдан рөхсәтһеҙ алма өҙөп алдым, был хаҡта алманың яртыһын ашап бөткәс кенә иҫкә төшөрөп, алманың яртыһы өсөн булһа ла һинән рөхсәт һорарға килдем", - ти. Теге ир: "Мин бит баҡсаның һаҡсыһы ғынамын. Ә баҡсаның хужаһы бынан 24 сәғәт йәйәү үтерлек аралағы ауылда йәшәй", - тип яуаплай.**

**Йәш егет алма баҡсаһының хужаһы йәшәгән ауылға йәйәүләп китә. Иртәгәһенә ул ауылдағы кәрәкле өйҙө эҙләп таба. Баҡса хужаһына үҙе менән булған хәлде һөйләп бирә һәм рөхсәтһеҙ өҙөп алып ашаған ярты алма өсөн ғәфү үтенә. Баҡса хужаһы: "Минең берҙән-бер шартым бар, шул шартты үтәмәйенсә, мин һине ғәфү итмәйем: һин минең ҡыҙыма өйләнергә тейешһең. Ләкин ризалығымды бирер алдынан мин һине иҫкәртергә тейешмен: минең ҡыҙым һаңрау, телһеҙ, һуҡыр һәм зәгиф", - тигән. Егет: "Мин бында Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн, рөхсәтһеҙ ашаған ризыҡты хәләл итер өсөн килдем. Тимәк, мин был шартҡа риза булырға тейешмен", - ти. Ошонан һуң уны буласаҡ кәләше янына алып баралар. Ҡыҙҙың һылыулығын күреп, егеттең иҫе китә. Ул, аптырап, ни өсөн атаһының ҡыҙы шундай итеп һүрәтләүе тураһында һораша. Ҡыҙ былай тип яуаплай:**

**- Һаңраумын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән тауыштарҙы ишетмәйем.**

**Телһеҙмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән һүҙҙәрҙе һөйләмәйем.**

**Һуҡырмын, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән нәмәләрҙе күрмәйем.**

**Зәгифмен, сөнки мин Аллаһы Тәғәлә теләмәгән ерҙәргә йөрөмәйем... Егет ҡыҙға өйләнеп, баяғы ярты алма өсөн уның атаһының ярлыҡауына өлгәшә. Күпмелер ваҡыттан һуң бәхетле ғаиләлә ир бала - буласаҡ имам Әбү Хәнифә ән-Нуман тыуа".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 136/01